ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

31-6 октябрь - ноябрь (карасай - ҡырпағай) 2025

№43 (1187)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Гвардиясылар улар



2

Ер аҫты байлыҡтары... яңы тәртип буйынса файҙаланыла



6

Сит ерҙәрҙә солтан булғансы...



8-9

Ниңә тукмалып йәшәйһең?



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* ***Баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл бөгөн: 2026 йылдың 1-се яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара. ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 1054 һум 50 тин. Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле "Киске Өфө"гә яҙылырға ашығығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.***

***Мөхәрририәт.***

*АФАРИН!*

## БЕҘҘЕҢ БАЛАЛАР ШУНДАЙ!



**Өфөнөң 119-сы мәктәбе 11-се синыф уҡыусыһы Рамаҙан Йәнбәтов планетоход уйлап сығарып, проектын Мәскәү дәүләт университеты майҙансығында үткән "Киләсәк ғалимдары" Халыҡ-ара конкурсына тәҡдим иткән.**

Бер йыл элек Рамаҙан пилотһыҙ системалар менән мауыға башлай. Ике ай эсендә ул Ерҙе өйрәнеү планетоходының прототибын йыя. Аппараттың бар деталдәре лә 3D- принтерҙа баҫтырылған - проектың үҙенсәлеге шунда.

Был аппарат ер һәм һауа анализдарын алырға, үтеүе ауыр булған урындарҙан өлгөләр йыйырға, кеше өсөн хәүефле шарттарҙа эшләргә һәләтле. Шулай уҡ ул хәрби маҡсаттарҙа ла ҡулланыла ала.

Проектың ғилми етәксеһе - педагогия фәндәре кандидаты Гүзәл Батыршина.

Уның етәкселеге аҫтында ғилми эш ике баһалау этабын үтеп, конкурстың суперфиналына сыҡҡан. Конкурсҡа әҙерлек ҡатмарлы техник проекттар өҫтөндә эшләү өсөн барлыҡ шарттар ҙа булдырылған Өфө фән һәм технологиялар университетының Технологиялар һәм материалдар институтында башлана. Әлеге ваҡытта Рамаҙан конкурстың һуңғы этабына әҙерлек алып бара. Рамаҙанға финал проектын әҙерләүҙә уңыштар һәм конкурста еңеүен теләйбеҙ!

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ҠУРҠЫНЫС ЯНАҒАНДА...



**Башҡортостанда БПЛА һөжүме ҡурҡынысы янағанда sms һәм push-хәбәрҙәр, "112", "Ашығыс ярҙам" һәм "Рәсәй МЧС" мобиль ҡушымталары аша хәбәр ителә башланы.**

Тәүге ошондай иғлан 27 октябрҙә булды. Был хаҡта Хөкүмәт кәңәшмәһендә Башҡортостандың ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов хәбәр итте. "112" мобиль ҡушымтаһын әлегә биш мең кеше генә күсереп алған, "Рәсәй МЧС"ты - 10 мең самаһы. "Был дүрт миллионлы республика өсөн бик аҙ. Бик яҡшы тәҡдим: кеҫәлә һәр ваҡыт ағымдағы хәл тураһында кисекмәҫтән хәбәр итеү системаһы булырға тейеш. Кешеләр ваҡытын һәм эшен дөрөҫ планлаштыра алһын", - тине республика етәксеһе Радий Хәбиров.

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Бөгөн беҙҙең тормошобоҙҙа стресс сығанағы булырҙай ваҡиғалар күбәйҙе. Һеҙҙе нимә тетрәнеүҙәргә килтерә һәм был хәлдән һеҙ нисек арынаһығыҙ?

***Заһит ҒҮМӘРОВ, йәштәр хәрәкәте ағзаһы:*** Минең өсөн стресс - ул һине мораль һәм физик яҡтан юҡҡа сығарыусы хәл торошо. Ундай хәлдә йырып сығырға үҙебеҙ бар көсөбөҙҙө һалырға тейешбеҙ. Әгәр тормошомда шундай хәлдәр килеп сыға ҡалһа, миңә унан ҡотолоу өсөн иң яҡшы урын - ул тәбиғәт, тыуған яғым. Баймаҡ районының Күгиҙел ауылына ҡайтһам, барлыҡ ауыр уйҙар юҡҡа сыға, күңелем бушанып, үҙемә илһам алып киләм. Әгәр ҙә инде ҡайтыу форсаты булмаһа, эш-мәшәҡәттәр ҡалала ҡалырға мәжбүр итһә, урамдар буйлап машинала йөрөп килеү ҙә бер ни тиклем борсоуҙарҙан арындыра. Һәм, әлбиттә, иң ҙур ярҙам - доғала булыу.

Ғөмүмән, әгәр бер туҡтауһыҙ эшләйһең икән, нисек тә булһа ял алып, бер көнөндө тик үҙең өсөн генә, үҙеңдең ятраҡан шөғөлдәреңә генә бағышларға кәрәк. Был да стресты еңеүҙең бер ысулы булып тора, минеңсә.

Бөгөнгө көндә күптәр үҙҙәренең психик тороштарына ҡул һелтәй, донъя тип саба. Әммә тетрәнеүҙәр, стресс - ул ябай һүҙҙәр генә түгел, ваҡытында уларҙың эҙемтәләренән ҡотолоу яғын ҡарамаһаң, ул организмда йыйылып, артҡандан-арта барыуы, һөҙөмтәлә үҙеңә мораль яҡтан хәүеф янауы бар. Хеҙмәткә, тормошҡа булған мөнәсәбәт тә үҙгәрә. Шуға күрә ниндәй ҙә булһа сәбәптәр арҡаһында күңел төшөнкөлөгөнә бирелһәң, ваҡытында үҙең өсөн тап килгән ял ысулын һәм урынын табыу мөһим.

*"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!*




*"Киске Өфө" гәзитен алдырып уҡымағандар күп нәмәнән мәхрүм, тигән фекерҙәбеҙ. Ундағы ҡайһы ғына мәҡәләне алма, уйға һалырҙай тос фекер, зиһендәрҙе яҡтыртып ебәрерҙәй фәлсәфә, күңел имләрҙәй аҡыл хазинаһы.*

12+

*✓ Өйҙән эшләү хеҙмәткәрҙәр өсөн - аҡсаны һәм ваҡытты экономиялау, көн һайын эшкә йөрөмәү транспорт сығымдарын айына уртаса өс мең һумға кәметә һәм көнөнә сәғәт ярым ваҡытты экономиялай.*



*ҠЫҪҠАСА*

# КЕМ ЕҢДЕ?

**Башҡортостанда 2025 йылдағы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаттары билдәле булды. Был турала республика Хөкүмәтенең бойороғо баҫылып сыҡты.** "Салауат ерендә" гәзитенең баш мөхәррире урынбаҫары Шамил Әхмәтшин - Салауат районының билдәле кешеләре тураһында очерктар һәм мәҡәләләр серияһы өсөн; "Йәшлек" гәзитенең баш мөхәррире Артур Дәүләтбәков - "Бельские просторы" журналында баҫылған "Өфө - Донбасс: беҙгә был юлдарҙы оноторға ярамай" юлъяҙмалары өсөн; "Юлдаш" радиоканалы коллективы (Гүзәл Зарипова, Гүзәл Ситдиҡова, Илнар Әхмәтгәрәев) - "Күперҙәр" ижтимағи-сәйәси проекты өсөн. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, конкурсҡа журналистарҙың замандаштарыбыҙҙың образдары, милли мәҙәниәттәр байлығы һәм халыҡтар дуҫлығы темаһы, йәмғиәттәге тыныслыҡ һәм татыулыҡ, Башҡортостандың социаль-иҡтисади үҫеш мәсьәләләре сағылдырылған материалдар ҡабул ителде.

✓ **Кизеү миҙгеле Башҡортостанға Рәсәйҙең Үҙәк төбәктәренә ҡарағанда 2-3 аҙнаға һуңыраҡ килә.** Был хаҡта "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында Роспотребнадзорҙың төбәк етәксеһе Анна Казак хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, 2024 йылда кизеүҙең тәүге осраҡтары ғинуарҙа теркәлгән, сирҙең иң ныҡ таралған осоро мартҡа тура килгән. Быйылғы хәл нисек булырын күҙаллауы ҡыйын. Әммә ауырыу кимәле декабрь-ғинуарҙа күтәрелеүе көтөлә. Кизеүгә ҡаршы иммунитет формалашыуы өсөн 3-4 аҙна кәрәк. "Шуға күрә октябрь аҙағына тиклем кизеүгә ҡаршы прививка яһатҡандарҙа ауырыу кимәле күтәрелгәнгә тиклем иммунитет формалашып өлгөрәсәк", тип билдәләне Анна Казак.

✓ **Республика халҡын малдарын юлға сығаргандары өсөн яуаплылыҡ хаҡында иҫкәртәләр. Контролһеҙ йөрөгән, юлға сыҡҡан малдар өсөн уларҙың хужаларын административ яҙ көтә.** "Бындай осраҡтар юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларға ҙур хәүеф тыуҙыра. Айырыуса төндә һәм насар һауа торошо ваҡытында был үтә лә хәүефле. Хужалар үҙҙәренең малын ҡарарға, ә урындағы властар уларҙы көтөү ҡағиҙәләрен билдәләргә бурыслы", - тип белдерҙе Башҡортостан транспорт министрлығы башлығы Любовь Минакова.

✓ **Башҡортостанда Белорет - Учалы - Мейәс юлының 7 саҡрымы ремонтланасаҡ.** Эштәр "Тормош өсөн инфраструктура" милли проекты сиктәрендә Учалы районының Кәрим һәм Ҡорама ауылдары эргәһендәге ике участкала алып барыла. Әлеге ваҡытта юл төҙәүселәр юлдың өҫкө ҡатламын эшләй. Юлдың нигеҙе ресайклинг технологияһы буйынса ныығытыла. Эштәрҙе ағымдағы йылдың аҙағына тиклем тамамлау күҙаллана. Белорет-Учалы-Мейәс юлы мөһим транспорт артерияһы. Был юлдан Белорет һәм Учалы райондарында йәшәгән 165 меңдән ашыу кеше Белоретка һәм Учалыға бара, шулай уҡ М-5 "Урал" федераль трассаһына һәм Силәбегә барған трассаға сыға, тип билдәләне Башҡортостандың транспорт министрлығы башлығы Любовь Минакова. Билдәләнеүенсә, шулай уҡ ағымдағы йылда Учалы районының Истамғол һәм Баҙарғол араһындағы 4 саҡрымлыҡ юл ремонтланды.

*РӘСМИ СЫҒАНАҠ*

# ГВАРДИЯСЫЛАР УЛАР

**Рәсәй Президенты Владимир Путин указы менән составына Рәсәй Геройы Александр Доставалов исемендәге башҡорт батальоны ингән 57-се мотоуҡсылар полкына "гвардиясылар" тигән маҡтаулы исем бирелде. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте.**



Юғары баһаға полк һуғыш яландарында күрһәткән батырлығы һәм ҡаһарманлығы өсөн лайыҡ булды. "Был беҙҙең яугирҙарға ла тулыһынса ҡағыла. Александр Доставалов исемендәге батальон - беҙҙең тәүге һәм иң һуғышсан подразделениеларыбыҙҙың береһе. Уның хәрбиҙәре - республика һәм ил ғорурлығы. Батальонда хеҙмәт иткән бөтә егеттәргә һәм ветерандарҙы ҡотлайым. Ватаныбыҙ өсөн һәләк булғандар беҙҙең мәңгелек хәтерҙә", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Рәсәй Геройы Александр Доставалов исемендәге ирекле башҡорт мотоуҡсылар батальоны 2022 йылда ойошторола. Шул уҡ йылдың июлендә подразделение тантаналы рәүештә МХО-ға оҙатыла.

# СТУДЕНТ ОТРЯДТАРЫ ЭШТӘ



**"Торатау" конгресс-холында Башҡортостан студент отрядтарының өсөнсө хеҙмәт семестрын тамамлауға бағышланған тантана үтте.**

Сарала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты һәм сығышында:

"Системалы ҡараш быйыл проектҡа 10 мең самаһы студентты һәм уҡыусыны йәлеп итергә мөмкинлек бирҙе. Был эшмәкәрлекте артабан да киңәйтәсәкбеҙ", - тип билдәләне.

Башҡортостандың студент отрядтары етәксеһе Элина Саматова һөйләүенсә, республикала йәштәрҙең һөҙөмтәле эшен ойоштороу өсөн Координация советы һәм оператив штаб булдырылған. Дөйөм алғанда, 52 хеҙмәт проекты тормошҡа ашырылған, төбәктә 4 270 яңы эш урыны булдырылған. Яҡынса 850 студент Краснодар крайында, Ҡырымда, Татарстанда, Алтайҙа һәм Камчаткала эшләгән. Яҡынса иҫәпләүҙәр күрһәтеүенсә, студент отрядтары республиканан ситтә 520 миллион һум самаһы аҡса эшләгән һәм республикаға алып ҡайтҡан. Башҡортостан Башлығы наградаһы - иҫтәлекле байраҡ М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының "Көньяҡ ел" хеҙмәт коллективына тапшырылды.

# ҮЗБӘКТӘР МЕНӘН...

**Мәскәү өлкәһендә Рәсәй һәм Үзбәкстан төбәктәренең икенсе советы барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ташкент өлкәһе хакимы Зойир Мирзаев менән эшлекле осрашыу үткәрҙе.**

Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, Ташкент өлкәһе - Башҡортостан өсөн мөһим партнер. "Бекабад" башҡорт-үзбәк технопаркын булдырыу был хеҙмәттәшлектә төп проект булып тора. Тәҡдим ителгән проекттар араһында тәҙәкләндереү элементтары, пектин концентраттары, йылылыҡ энергияһы һәм медицина ҡоралдарын етештереү буйынса заводтар бар. Тағы бер перспективалы йүнәлеш - умартасылыҡ. Ауыл хужалығы продукцияһы менән үҙ-ара тәьмин итеүгә лә ҙур иғтибар бүленә. Уҙған йыл йомғаҡтары буйынса агросәнәғәт комплексы продукцияһының дөйөм әйләнеше 24 мең тонна самаһы тәшкил итте. Республиканың алдынғы предприятиелары - Шишмә шәкәр заводы, "Пищепром", "Дуҫтар" һәм Бөләбәй һөт комбинаты был баҙарҙа әүҙем эшләй.

Ташкент өлкәһе хакимы Зойир Мирзаев Радий Хәбировҡа берлектәге проекттар өҫтөндә әүҙем эш өсөн рәхмәт белдерҙе. Ул шулай уҡ тығыҙыраҡ хеҙмәттәшлек итеү өсөн Башҡортостан һәм Ташкент өлкәһе ҡалалары һәм райондары араһында делегациялар менән алмашыуҙы йәйғә һалырға тәҡдим итте. Радий Хәбиров был тәҡдимде хупланы. "Беҙгә һеҙҙең республика менән эшләүе рәхәт. Радий Фәрит улы менән дуҫтарса мөнәсәбәттәбеҙ. Һорауҙар килеп тыуһа, теләһә ниндәй ваҡытта бер-беребеҙгә шылтырата алабыҙ", - тине Ташкент өлкәһе хакимы.

# ӨЙҘӘН ЭШЛӘ!

**Өфө хакимиәтенең 41 хеҙмәткәре өйҙән эшләүгә күсерелде. Был хаҡта мэриялағы оператив кәңәшмәлә кадрҙар менән тәьмин итеү һәм муниципаль хеҙмәт идаралығы начальнигы Йәлил Вилданов хәбәр итте.**

Уның әйтеүенсә, әлеге сара кадрҙарҙы оптималләштереү менән бәйле түгел. Эш процестарын оптималләштереү бара. Хеҙмәткәрҙәрҙең бер өлөшөн дистанцион форматҡа күсереүҙә чиновниктар Мәскәү өлкәһенең уңышлы тәжрибәһенә таяна. "Өйҙән эшләү формаһын индереү - хеҙмәт һөҙөмтәлелеген арттырыу һәм һәр хеҙмәткәр тураһында хәстәрлек күреү өсөн стратегик ҡарар. Тәү ситтта, хеҙмәткәрҙәр өсөн - аҡсаны һәм ваҡытты экономиялау, көн һайын эшкә йөрөмәү транспорт сығымдарын айына уртаса өс мең һумға кәметә һәм көнөнә сәғәт ярым ваҡытты экономиялай. Тағы бер ыңғай яғы - бюджетты экономиялау. Атап әйткәндә, биналарҙы тәртиптә тотоуға, шул иҫәптән йылыштырыуға һәм коммуналь түләүҙәргә сығымдар аҙая. Эш урындарын техника һәм офис мебеле менән тәьмин итеүгә ихтыяж кәмей", - тип билдәләне спикер.

Йәлил Вилданов әйтеүенсә, хеҙмәткәрҙәрҙең барлыҡ хеҙмәт гарантиялары һаҡлана. Шулай уҡ өйҙән эшләү тотош илдән иң яҡшы кадрҙарҙы һәм һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән белгестәрҙе эшкә алырға мөмкинлек бирәсәк. Дистанцион формат эштең һөҙөмтәлелегенә һәм сифатына йоғонто яһамаҫҡа тейеш, тип билдәләне ҡала мэры Ратмир Мәүлиев. Шулай уҡ хеҙмәткәрҙәргә эш шарттарын булдырырға, мәғлүмәт хәүефһеҙлеген күҙәтеп барырға ҡушты.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә тура бәйләнеш тураһында әйтте. Журналистар һәм республика халҡы тура эфирҙа һәм социаль селтәрҙәрҙә төбәк етәксеһенә үҙҙәрен борсоған һорауҙарын бирә ала. Тура бәйләнеш 11 ноябрҙә киске сәғәт 7-лә башлана, 4 сәғәткә яҡын бара, тине Башҡортостан Башлығы. 2024 йылда Радий Хәбиров тура бәйләнеш ваҡытында 65 ҡатмарлы һорауға яуап бирҙе.

✓Рәсәйҙә Суд хеҙмәткәрҙәре көнө булдырылды. Рәсәй Хөкүмәтенең тейешле ҡарарына Премьер-министр Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. "5 ноябрҙе Суд хеҙмәткәрҙәре һөнәри байрамы итеп билдәләргә", - тиелә документ тексында. Байрам Бөтә Рәсәй Императоры Петр I-нең "Суд формаһы тураһында" указы сыҡҡан көнгә тура килтерелгән. Был указ 1723 йылдың 5 ноябрендә донъя күргән. Документ судтарҙың эштәргә ҡарау тәртибен, граждандар эштәре һәм енәйәт эштәренең күп өлөшө ике яҡтың да туранан-тура ҡатнашлығында ҡаралыуын билдәләне.

✓Башҡортостан Башлығы Бойороғо менән Азат Бадранов Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы ректоры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем ул Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыусы булып эшләне. Уҡыу йортоноң элекке ректоры Данияр Абдрахманов төбәк етәксеһе ярҙамсыһы итеп күсерелде. Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәте етәксеһе вазифаһын Өфө мэры урынбаҫары Денис Ғәниев биләне. Башҡортостан Хөкүмәте Бойороғо менән Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары итеп Сибайҙың элекке мэры Азамат Юлдашбаев тәғәйенләнде.

✓Былтыр 7 октябрҙә Өфөлә "Салют" республика реабилитация һәм белем биреү үҙәге асылғайны. Унда көнөнә 250 кешегә иҫәпләнгән реабилитация үҙәге, медицина блогы менән стационарҙар, Республика балалар клиник дауаханаһының психоневрология һәм эпилептология үҙәге, шулай уҡ 192 урынлыҡ "Йондоҙ" мәктәбе эшләй. Бер йыл эшләү осоронда "Салют"та - 6193, быйыл 4753 балаға ярҙам күрһәтелгән.

✓Пермь крайы Барҙа ауылында Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайының 25 йыллығына арналған тантаналы саралар үтте. Әле Пермь крайы биләмәһендә 13 башҡорт ҡоролтайы эшләй. Урындағы милләттәштәребеҙ - ҙур һәм боронғо Ғәйнә ҡәбиләһе башҡорттары варистары. Ғәйнә ырыуы башҡорттарынан төрлө өлкәләрҙә үҙен танытҡан бик күп күренекле шәхестәр сыҡҡан.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# СИТТӘН КИЛӘЛӘР ИКӘН...

## урындағы йәшәү рәүешен һанлаһындар

**Республикала, бөтә илдәге кеүек үк, сит ил граждандарының һәм граждалығы булмаған кешеләрҙең күбәйеүе теркәлә. Йыл башынан Башҡортостанға 140 меңдән ашыу мигрант килгән, тип билдәләнде Премьер-министр Андрей Назаров рәйеслегендә үткән Башҡортостан Хөкүмәте ултырышында. Унда төбәктә миграция сәйәсәтен тормошҡа ашырыу һәм камиллаштырыу мәсьәләләре тикшерелде.**



Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, былтыр 160 меңдән ашыу сит ил граждандары һәм граждалығы булмаған кешеләр миграция иҫәбенә баҫҡан, ә ағымдағы йылдың 9 айында - 141 мең. Был уҙған йылдың ошо уҡ осорона ҡарағанда 18 меңгә күберәк. Бөтә мигранттарҙың 62 проценттан ашыуы республикаға эшкә килгән.

Премьер-министр урынбаҫары Ирек Сәғитов һүҙҙәренсә, мигранттарҙың төп төркөмдәре - Үзбәкстан, Тажикстан, Ҡаҙағстан, Әзербайжан, шулай уҡ виза илдәре (Һиндостан, Ҡытай, Төркиә, Мысыр) граждандары. Ирек Сәғитов, яҡшы уйланылған миграция сәйәсәте халыҡ һанының кәмеүен, эшсе көстәрҙең етешмәүен еңеп сығырға ярҙам итә һәм мәҙәни-ара бәйләнештәрҙе нығыта, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды. Әммә, уның һүҙҙәренсә, граждандарҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү һәм мәҙәни үҙенсәлекте һаҡлау өсөн легаль булмаған миграция каналдарын туҡтатыу һәм заманса контроль ысулдарын ҡулланыу зарур. Ул мигранттар араһында еңәйәтселек кимәлен тулыһынса интеграциялау һәм төбәктәге йәшәү шарттарына яраҡлашыу юлы менән кәметеүҙең мөһимлеген айырып билдәләне.

Әлеге ваҡытта Башҡортостанда 14 виза иленән 101 һөнәр буйынса сит ил хеҙмәткәрҙәре эшкә йәлеп ителә, улар - еңел сәнәғәт, ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре, тегенселәр, ташсылар, ҡоккорт эшкәртеүселәр. Патенттар нигеҙендә республика компанияларында Үҙәк Азия - Үзбәкстан, Тажикстан һәм Әзербайжан илдәре - граждандары эшләй. БР буйынса Эске эштәр министрлығының Миграция мәсьәләләре буйынса идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, 2025 йылдың 9 айында эшкә 22 меңдән ашыу патент бирелгән. Патенттарҙан йыйылған һалымдар суммаһы 916 миллион һумдан ашҡан, был уҙған йыл менән сағыштырғанда 2 процентҡа күберәк, тип билдәләне БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - спорт министры Руслан Хәбибов.

Ватандаштарға дәүләт ярҙамы программаһы сит илдәрҙән килгән кешеләргә республикаға күсергә ярҙам итә. Программа эшләгән 7 йыл эсендә республикаға 903 кеше килгән, быйыл унда 49 ватандашыбыҙ ҡатнашҡан.

Премьер-министр Андрей Назаров эшсе көстәр етешмәү проблемаһын төбәк өсөн көнүҙәк бурыс тип атаны. Бөгөнгө көнгә республикала 33 меңдән ашыу вакансия асылған һәм бер эшһеҙ гражданға уртаса 3 вакансия тура килә. Айырыуса төҙөлөш тармағында һәм производствола проблема киҫкенлеге һиҙелә, унда бер дәғүәсегә 7-9 вакансия тура килә. Хеҙмәт ресурстары дефицитын кәметеү маҡсатында Башҡортостандың эш биреүселәре сит ил хеҙмәткәрҙәрен әүҙем йәлеп итә, тип билдәләне ул. "Бөгөн миграция - ул һандар һәм рөхсәт мәсьәләһе генә түгел, ә иҡтисадты һәм йәмғиәтте үҫтереү өсөн ҡеүәтле ресурс. Беҙ сит ил белгестәре инвестиция проекттарында партнерҙар, бәләкәй һәм урта бизнес өсөн хәрәкәт итеүсе көс булып торған система төҙөйбөҙ, тик статистикаға ғына түгел. Мөһим бурыс - уларға үҙҙәрен йәмғиәтебеҙҙең бер өлөшө итеп тойорға, тиҙ яраҡлашырға һәм республика һәм ил тормошона үҙ өлөшөн индерергә ярҙам итеү", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Андрей Назаров.

Ултырыш йомғаҡтары буйынса урындағы граждандар талап итмәгән республика предприятиелары һәм ойошмаларының буш вакансияларына сит ил хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итеү буйынса эште көсәйтергә, шулай уҡ алдағы биш йылға мигранттарҙы социомәҙәни яраҡлаштырыу буйынса саралар планын әҙерләүгә тотонорға ҡарар ителде.

**Гөлфиә АКУЛОВА.**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ



# УЛДАРЫН ХӘСТӘРЛӘП...

● **Башҡортостандан атайҙар улдарына гуманитар йөк илтте. Алғы һыҙыҡҡа гуманитар йөктө Хәйбулла районының Һамар ауыл биләмәһе водителдәре Александр Алексеев һәм Виктор Попов ҙур автоколонна составында МХО биләмәһенә гуманитар йөк алып барып тапшырҙы.** Муниципалитет хакимиәте мәғлүмәте буйынса, Попов өсөн был беренсе сәфәр булһа, Алексеев МХО биләмәһенә икенсегә барып ҡайтты. Был гуманитар миссия ир-егеттәр өсөн айырыуса мөһим: фронтта уларҙың "Атом" һәм "Черепаха" позывнойлы улдары хеҙмәт итә.

● **Башҡортостан Башлығы указ менән Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы республиканың дәүләт наградалары менән бүләкләү тәртибе раҫланды.** Документҡа ярашлы, хәрби хеҙмәткәрҙе бүләкләүгә тәҡдим иткәндә уның МХО зонаһындағы ҡаҙаныштарын анаҡ күрһәтергә кәрәк. Бынын өсөн хәрбиҙең шәхси сифаттары тураһында мәғлүмәттәрҙе, шулай уҡ хәрби хәрәкәттәр шарттарында уның үҙен нисек күрһәтеүен баһалауҙы үҙ эсенә алған тулы характеристикаһын бирергә кәрәк. Ғәмәлдәге хәрби хеҙмәткәрҙәр өсөн Башҡортостан Республикаһы Башлығы исеменә ғәскәри часть командирынан юллама бирелә. Хеҙмәттән азат ителгән МХО-ла ҡатнашыусылар өсөн наградаланы муниципалитет хакимиәте башлығы һәм Махсус операция ваҡытында хеҙмәт иткән ғәскәри частың командиры юллай. Хәрби хәрәкәттәр барышында инвалидлыҡ алған яугирҙарға награда документтарын Башҡортостандағы "Ватанды һаҡлаусылар" Дәүләт фонды филиалы әҙерләй.

● **Дәүләт Думаһының пленар ултырышында "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" законға төҙәтеүҙе ҡарайҙар.** Ул Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға колледжда йәки техникумда түләүһеҙ икенсе урта профессиональ белем алыу хоҡуғын бирергә ҡағыла. Бынан алдараҡ Дәүләт Думаһы Махсус операция яугирҙарына белем алыуҙы ябайлаштырыуға йүнәлтелгән бер нисә закон ҡабул итте. Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин билдәләүенсә, был саралар "илде яҡлаусылар өсөн белем алыу мөмкинлеген арттырырға, шулай уҡ хеҙмәтте тамамлағандан һуң уларға тиҙерәк яраҡлашырға мөмкинлек бирергә тейеш". Дәүләт Думаһында белдереүҙәренсә, МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеү эше төүге урында тора. Бөгөнгә ошо маҡсатта 145 закон ҡабул ителгән, даими камиллаштырылған система булдырылған.

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## ? Бөгөн беҙҙең тормошобоҙҙа стресс сығанағы булырҙай ваҡиғалар күбәйҙе. Һеҙҙе нимә тетрәнеүҙәргә килтерә һәм был хәлдән һеҙ нисек арынаһығыҙ?

***Динә СОЛТАНҒУЖИНА, студент:*** Мәктәптә уҡыған ваҡыттарҙа үҙемдең киләсәгем, донъяуи хәлдәр тураһында уйланыуҙар эсте бошора ине. 2012-2014 йылдарҙа, ахырызаман башлана, тигән имеш-мимештәрҙе тыңлап, инде ҡурҡҡаным хәтеремдә. Унан һуң коронавирус осоро башланды бит инде. Үҙемдең дә ауырыуым тәьҫир иткәндер инде, яңылыҡтарҙан күпме кеше ауырығанын, үлгәнен ишетеүе ныҡ ҡыйын ине миңә. 2022 йылда МХО башланыу менән тажҙәхмәт ҡайғыһы китте бит инде. Әлбиттә, һуғыштағы егеттәр, илебеҙҙең киләсәге тураһындағы уйланыуҙар һәр кемдең күңелен болоҡһота. Әммә хәҙер мин ул тиклем ауыр уйҙарға бирелмәйем, уның сәбәбе - дингә килеүем. Маңлайыбыҙға яҙылғанды ил менән бергә күрәбеҙ инде. Аллаһ Тәғәлә һәр кемгә көсөнән килгәнсә һынау бирә. Өс-биш йыл элек минә шуны аңлау ғына етмәгән, күрәһең. Шуға күрә бөгөнгө көндә хәҙерге мәл менән, барыһы өсөн дә Хоҙайға рәхмәтле булып, юҡҡа-барға көйөнмәй генә йәшәргә өйрәнәм. Күңел түремдә теләк-хыялдарым, киләсәккә маҡсаттарым бар, әлбиттә, һәм уларҙы бойомға ашырыр өсөн ҡулымдан килгәнен эшләйем, ә ҡалғанын Аллаһҡа тапшырам.

Һуңғы ваҡыттарҙа яңылыҡтарҙы, донъя һәм илдә ниҙәр булғанын белер өсөн генә, күҙ йүгертеп кенә ҡарап сығам. Ғөмүмән, телевизор ҡарауҙы, интернет селтәрҙәрен бер туҡтауһыҙ гиҙеүҙе сикләнем, сөнки бөгөнгө көндә негатив юҫыҡтағы мәғлүмәт үтә күп һәм унан ваҡытында арынмаһаң, бөтә булған ошо мәғлүмәти тулҡын хатта депрессияға тиклем алып барып еткереүе мөмкин тип уйлайым.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Стәрлетамаҡта "Нелегал-2025" оператив-иҫкәртеү сараһының икенсе этабына йомғаҡ яһалды, тип хәбәр итәләр Рәсәй Эске эштәр министрлығының Стәрлетамаҡ буйынса идаралығынан. Ҡалала миграция ҡануниәтен боҙоуҙың 30-ҙан ашыу осрағы асыҡланған. 15 сит ил гражданына ҡарата илдә булыу ҡағиҙәләрен боҙған өсөн протоколдар төҙөлгән, уларҙың 6-һы Рәсәй территорияһын ташлап китергә тейеш.

✔Россельхознадзор идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, йыл башынан алып Башҡортостандан таможня союзы илдәренә 7,1 мең тоннанан ашыу һөт ризыҡтары оҙатылған. Ҡаҙағстан һәм Ҡырғыҙстан ҡымыҙ, киптерелгән һөт һәм һөт айраны, сыр һәм тундырма һатып ала. Экспортланған һөт продукцияһының төп күләме ҡымыҙға тура килә. Продукция ветеринария хәүефһеҙлеге талаптарына ярашлы лаборатория тикшереүҙәре үтә һәм Таможня союзы һәм импортлаусы илдәр талаптарына тап килә.

✔Ноябрҙә Башҡортостанда пенсия һәм пособиелар түләү графигы үҙгәрә. Социаль фондтың Башҡортостан буйынса бүлексәһе октябрь өсөн түләүҙәрҙе 1 ноябргә күсерә. Был көндә банк иҫәбенә 17 йәшкә тиклемге балаларға һәм йөклө ҡатындарға, 1,5 йәшкә тиклемге баланы ҡарау буйынса эшләмәгән ата-әсәләргә, хәрби хеҙмәткә саҡырылыусы балаға берҙәм пособиелар килә. Почта аша пособиелар ғәҙәти график буйынса килә. Почта аша пенсияны түләү ҙә ваҡытынан алда - 1-е көнө башлана. Банк иҫәбенә пенсиялар 12, 19 һәм 21 ноябрҙә күсә.

✔Башҡортостанда суд Салауат ҡалаһының элекке башлығын төрмәгә оҙатты. Элекке чиновник вазифа вәкәләттәрен артыҡ файҙаланыуҙа ғәйепләнә. Суд билдәләүенсә, 2020 йылдың апреленән октябрәнә тиклем чиновник конкурс үткәрмәйенсә компания менән концессия килешеүе төҙөй. Законды урап үтеп, компанияға муниципаль электр селтәрҙәрен тапшыра. Бынан тыш, муниципаль милек менән идара итеү буйынса килешеүҙәрҙе килешеү процедураһын урап үтеп, уны предприятиенан законһыҙ тартып алыуҙа һәм коммерция фирмаһына тапшырыуҙа ғәйепләнә.

✔Роскомнадзор Башҡортостанда WhatsApp (ул Рәсәй Федерацияһында экстремистик тип танылған Meta компанияһына ҡарай) эшендә тайпылыш сәбәптәрен аңлатты. Роскомнадзор еңәйәтселәргә ҡаршы көрәшеү өсөн WhatsApp һәм Telegram эшен өлөшләтә сикләй. Был хаҡта ТАСС агентлығына ведомстван хәбәр иттеләр. Роскомнадзорҙа белдереүҙәренсә, сит ил мессенджерҙары мутлашыу өсөн ҡулланылған төп сервистар булып тора.

БЫЛ АЙҘА

# ҠЫРПАҒАЙҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘМЕ?

**Бер бите - көҙ, бер бите ҡыш, тигәндәй, ҡырпағай көҙ менән хушлаштырып, беҙҙе ҡышҡы миҙгелгә әҙерләүсе осор. Беҙҙе генә түгел, тәбиғәтте лә: ер туңаҙлана, ҡоштар йылы яҡтарға осоп китеп бөтә, көҙгө әсе ел ағастарҙың һуңғы япраҡтарын өҙгөләй. Тейен, һуҡыр сысҡан, терпе, һыу ҡондоҙо, шәшке кеүек ваҡ урман һәм ҡыр йәнлектәре тырышып-тырмашып ҡышҡылыҡҡа әҙерләнә - аҙыҡ туплай.**



Мәҫәлән, әлгәнйәк тигәне хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәт: ул үҙенең ер аҫтындағы өңөнә бер нисә биҙрәләп ашлыҡ, сәтләүек һәм орлоҡтар ташып ҡуя икән! Һуҡыр сысҡан да унан ҡалышмай, ти: ер аҫты өңөнөң айырсаларына күберәк аҡһымға бай ямғыр селәүсене ташый. Тейен-тәмлетамаҡ иһә сәтләүек, кипкән емеш-еләк, алма, бәшмәк йыя. Был йәнлек хаҡында ла ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр бар. Тейен бәләкәй генә булһа ла, ябай ғына йәнлек түгел, ә бик аҡыллы йән эйәһе һәм уның холоҡ-фиғеле зоологтар өсөн йомаҡ-сер булып ҡала килә. Ошоға тиклем тейендәр тураһында, ҡышҡылыҡҡа үҙ запастарын ергә күмеп ҡалдырып, ҡыш уны эҙләп таба алмауҙары хаҡында уйҙырмалар йөшәп килде, ләкин был һис тә дөрөҫлөккә тап килмәй, ти уны өйрәнеүсе ғалимдар. Аҙығын йәшереп ҡалдырырға тейендең йөҙәрләгән "келәте" була һәм улар билдәле бер тәртиптә тултырыла: тиҙ боҙола торғандарын тәүҙәрәк ашарға һәм оҙаҡ һаҡланыусан аҙыҡ төрҙәрен аҙаҡҡа ҡалдырып бүлеп сыға. Зоологтар күҙәтеүенсә, йәшергән запастарын тейендәр бер ҙә ҡаңғырып эҙләп йөрөмәй, уларҙың 95 проценты аҙығын шунда уҡ таба, сөнки ниндәйҙер билдәләр буйынса ул урынды иҫендә ҡалдыра - бына тәбиғәттең бер мөғжизәһе!

Ҡондоҙҙар ҙа ифрат аҡыллы йәнлектәр. Беҙ уларҙың үткер тешле, егәрле һәм көслө ағас ҡырҡыусылар икәнен беләбеҙ, өҫтәүенә, оҫта төҙөүсе лә булыуҙары ҡайһы берәүҙәр өсөн билдәһеҙҙер ҙә. Яр буйынан һөйрәп төшөрөлгән ағас ҡырҡындылары, ботағын һәм тамырҙарын һыу төбөндәге ылымыҡ менән сырмап, ҡыуыш рәүешендәге йөҙөп йөрөүсе оя төҙөйҙәр. Уның ике сығыу урыны эшләнә, шуларҙың береһе - ҡурҡыныс янағанда һыу төбөнә төшөп китерлек йәшерен тишек рәүешендә ҡалдырыла. Бөтөн эште улар ғаиләләре менән бергәләп башҡара, шулай уҡ аҙыҡ туплауҙа ла. Һауа температураһы минус 20-нән түбәнерәк төшһә, улар йоҡоға тала һәм был аҙыҡты экономиялауға булышлыҡ итә. Эйе, ҡышҡылыҡҡа бына ошондай етди әҙерлек әҙәм балаһына ла ҡамасауламаҫ ине, тик был осраҡта һүҙ һаулыҡты нығытыу, көҙлө-ҡышлы-яҙлы яфалағыс киҙеүҙәргә бирешмәҫ өсөн организмды сыныҡтырыу тураһында барырға тейеш. Был маҡсатта күберәк хәрәкәт итергә, тышта йөрөп организмды кислород менән туйындырырға, ҡояшлы көндәрҙән тәбиғи Д витамины алырға, физик күнекмәләр эшләргә, өйгә ҡайтып ингәс, эҫеле-һыуыҡлы контраст душ ҡойонорға йәки еүеш таҫтамал менән тәнде ҡыҙарғанса ышҡырға, тейешенсә дөрөҫ туҡланырға кәрәклеген бөтәбеҙ ҙә яҡшы беләбеҙ.

Ентекләберәк был хаҡта бөгөн беҙҙе файҙалы һауыҡтырыу кәңәштәре менән дауаларға тырышыусы табип-блогерҙар сығышына ла иғтибар итеү артыҡ булмаҫ. Юғиһә, һауа торошон фаразлаусы бөтөн сайттар ҙа тип әйтерлек ҡырпағайҙың Башҡортостан буйынса тотороҡһоҙ килерен, айҙың һуңғы ун көнлөгөндә киҫкен температура тирбәлештәрен (көндөҙ минус 10, ә төндә -20 градусҡаса), ҡапыл һыуытасағын күҙаллай. Хәйер, уларҙың эше - фаразлау, ә ысынын ҡырпағай үҙе килгәс, күрһәтер.

Тағы бер мәғлүмәт: Халыҡтар берҙәмлеге көнө айҡанлы ноябрҙәге оҙайтылған ял көндәре хаҡында: **1 ноябрь** (шәмбе) ҡыҫҡартылған эш көнө, **2,3,4 ноябрь** ял көндәре булып, был аҙнала тәүге эш көнө **5 ноябргә** тап киләсәк. Был айҙа ла иҫтәлекле тарихи һәм һөнәри байрамдар байтаҡ ҡына. Шуларҙың береһе - яңыса стиль буйынса **7 ноябрҙәге** Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы көнө. Бөтөн донъяны дер һелкеткән был тарихи ваҡиғаға бер быуат та 8 йыл үтеп киткән. Бөгөн ошо датаға ҡарата ике төп ҡараш формалашты: берәүҙәр өсөн ул, ысынлап та, бөйөк прогрессив ваҡиға булһа, икенселәр уны Рәсәй дәүләтенең ҡыйралыуына килтергән Октябрь түңкәрелеше тип атай. Был йәһәттән бәхәсләшеп тороуҙы файҙаһыҙға һанап, һәр кемдең фекерен уның үҙ ихтыярында ҡалдырыу хәйерлерәктер, тик бер нәмәне генә әйтеп китеү кәрәк: ниндәй генә ҡорбандар килтерелеп, ниндәй генә хаталар, юғалтыуҙар аша яуланмаһын, Октябрь социалистик революцияһының иң тәүге төп ҡиммәте уның социаль ғәҙеллек өсөн көрәше ине. Аҙаҡ инде, Ленин вафатынан һуң, революция яҙмышы власть башында ултырыусы ҡулында тупланып, тулыһынса уның ихтыярына бойһондоролдо, шулай булыуға ҡарамаҫтан, революция талап иткәнсә, ер - крәҫтиәндеке, завод һәм предприятиелар эшсе халыҡтыҡы булып ҡала килде. Социаль ғәҙеллек принциптары быуат аҙағында бушбоғаҙлыҡ һәм ил яҙмышына айыҡ ҡараш булмау арҡаһында ҡыйратылды. Унан һуң һиҙҙермәй генә ҡыҫырыҡлап, Октябрь байрамын календарҙың ябай бер көнө итеп ҡалдырҙылар һәм уны байрам итеүҙе лә туҡтаттылар, сөнки яңы власть һәм баҙар ҡатыш капитализм "төҙөү" шарттарында дәүләттеке, тимәк, халыҡтыҡы булған йәмәғәт милке таланып-йолҡоноп, үтә байҙар һәм фәҡирҙәр ҡатламы барлыҡҡа килгәс, тарихи датаның тәү маҡсаты - социаль ғәҙеллек принцибы ла юҡҡа сығарылды - ҡыҫҡаһы, ҡыҙыл датаны халыҡ күңеленән, быуындар хәтеренән алып ташлау өсөн барыһы ла ҡылынды...

Был ай календарының тағы бер үҙенсәлеге - Уландар **(22)** менән Әсә **(30)** көндәренең йәнәш килеүе, әйтерһең дә, махсус бөгөнгө көн өсөн эшләнгән, сөнки әлеге ваҡытта әсәләр һәм улдар яҙмышынан да мөһимерәк, ошонан да һыҙланыулыраҡ

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? *Бөгөн беҙҙең тормошобоҙҙа стресс сығанағы булырҙай ваҡиғалар күбәйҙе. Һеҙҙе нимә тетрәнеүҙәргә килтерә һәм был хәлдән һеҙ нисек арынаһығыҙ?*

***Алһыу ИРҒӘЛИНА, тәрбиәсе:*** Күңел торошона төрлө хәлдәр йоғонто яһай ала. Ҡайһы саҡта яңылыш ҡына ишетеп ҡалған хәбәр ҙә кәйефте ҡырып ҡуя, көнө-төнө баштан сыҡмай йөрөй. Бына һуңғы ваҡыттарҙа МХО-ла һәләк булғандар тураһында мәғлүмәттәрҙән нык ҡыйын миңә. Бер уйлаһаң, бөтөнләй белмәгән-күрмәгән кешеләр тураһында ул хәбәрҙәр, ә барыбер ауыр.

Шулай уҡ был осорҙа күптәр интернет эшләмәү сәбәпле стресс кисерә тип ишетәм. Беҙ был тоҙаҡҡа ныҡлы эләккәнбеҙ. Эшкә бәйле лә, көнкүреш һорауҙары ла күпселеген шунда хәл ителә бит. Хәҙер киренән телефонһыҙ тормошҡа күнегеп китеүе ауыр булып сыҡты.

Тормошомда бер нисә тапҡыр үтә лә тетрәндергес хәлдәр булды, шул саҡта минең өсөн ауырлыҡтарҙан, яман уйҙарҙан арыныуҙың иң еңел ысулы - китап донъяһына сумыу икәнен аңлап ҡалдым. Ҡалын романдарҙы бер тында, айырылмай уҡыйым. Берәүҙәр уны реаль тормоштан ҡасыу тип әйтер, бәлки, хаҡлы ла булыр, әммә миңә был ныҡ ярҙам итә.

Стрестан сығыуҙың башҡа юлдарына килгәндә, ул, әлбиттә, тәбиғәт ҡосағына сығып йөрөп килеү. Һәр миҙгелдә лә үҙең өсөн тыныслыҡ табып була: ямғыр шыбырлауында, ҡояш нурҙары уйнауында, ябалаҡлап ҡар яуыуҙа...

Һәм мин үҙем өсөн ҡулай тип тапҡан ысул - физик күнекмәләр. "Хәрәкәттә - бәрәкәт" тип халыҡ белмәй әйтмәйҙер инде. Бигерәк тә студент саҡта йүгерергә ярата инем, сөнки аяҡ-ҡул эшләгәндә баш артыҡ мыжғыған уйҙарҙан бушанып ҡала. Һәм шулай уҡ университетта уҡығанда, сессия тип, аудитория төбөндә тулҡынланыуҙан йөрәкте ҡайҙа ҡуйырға белмәй торғанда миңә ҡайҙандыр уҡып алған "4-7-8" тигән тын алыу күнекмәһе ныҡ ярҙам итә торғайны: эстән генә һанап, дүрт секунд танау аша тәрән итеп һауа һулайһың, ете секунд тотаһың да, һигеҙ секунд яйлап ҡына сығараһың. Кәрәкһә, бер нисә ҡат ҡабатлайһың. Бәлки, гәзиттә уҡыусы студенттарға файҙалы булыр.

Борсоған проблемалар күп инде ул: береһе хәл ителһә, икенсеһе килеп сығып тора, бирешмәҫ өсөн "Нервы күҙәнәктәре тергеҙелмәй" тип үҙемде киҫәтеп кенә торам инде.

Тормош ҡатмарлы инде, ҡыйын ваҡыттар булмай тормай, әммә һәр кем йәшәй-йәшәй насар күңел торошонан сығыу юлын таба, иң мөһиме, улар кешенең үҙенә зыян килтереүсе булмаһын.

**Айһылыу ДАУТОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Хөкүмәте башлығы Михаил Мишустин киләһе йылда байрам һәм ял көндәре тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, 2026 йылда 118 көн ял итәбеҙ. Байрам һәм ял көндәре: Яңы йыл каникулдары (2025 йылдың 31 декабренән 2026 йылдың 11 ғинуарына тиклем): 12 көн; Ватанды һаҡлаусылар көнө (21-23 февраль): 3 көн; Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө (7-9 март): 3 көн; Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы (1-3 май): 3 көн; Еңеү көнө (9-11 май): 3 көн; Рәсәй көнө (12-14 июнь): 3 көн; Халыҡтар берҙәмлеге көнө (4 ноябрь): 1 көн; Яңы йыл (31 декабрь): 1 көн.

✓Рәсәй банкы 500 һумлыҡ яңы банкнота сығарыу өҫтөндә эш башланы, тип хәбәр итә РИА Новости Үҙәк банк рәйесе урынбаҫары Сергей Беловҡа һылтанма менән. Сирень-шәмәхә төҫтәре шул килеш ҡала, ә дизайн тематикаһы Төньяҡ-Кавказ федераль округына һәм уның үҙәге Пятигорск ҡалаһына бағышлана. Сергей Белов һүҙҙәренсә, сентябрь аҙағында Консультатив советта объекттар исемлеге билдәләнә, һуңынан ул онлайн-тауыш биреүгә сығарыла.

✓Рәсәй Үҙәк банкында 1 сентябрҙә "Динамо", "ЦСКА", "Локомотив", "Спартак", "Хеҙмәт резервтары" физкультура-спорт йәмғиәттәре һәм клубтары хөрмәтенә "Рәсәй спорты" серияһынан иҫтәлекле тәңкәләрҙең әйләнешкә сыға башлауы тураһында белдерҙеләр. Тәңкәләр баҡыр-никель иретмәһенән эшләнгән, диаметры - 27 миллиметр. Һәр береһенең номиналы - 25 һум. Тиражы - 50 мең дана.

✓Башҡортостанда 89,2 мең контейнер ҡуйылған 37, 2 мең ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары йыйыу урыны булдырылған. Шул уҡ ваҡытта 2,15 мең контейнер менән тағы ла 204 майҙансыҡ булдырыу талап ителә. Был хаҡта Хөкүмәттәге кәңәшмәһендә БР экология министры башлығы Нияз Фазылов белдерҙе. Ул республикала ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү системаһын ойоштороуҙың юғары кимәлдә булыуын билдәләне. Ҡалдыҡтар тупланған урындарҙы фотофиксациялау буйынса республика 72,5 процент күрһәткесе менән Рәсәй төбәктәре араһында 2-се урынды биләй.

✓Ваҡлап һатыу тауар әйләнеше буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округында лидерҙар иҫәбендә. Бындай сауҙаның дөйөм әйләнеше республикала 2025 йылдың алты айында 4,7 процентҡа артҡан һәм 785 миллиард һум тәшкил иткән. Күмәртәләп сауҙа итеү әйләнеше 790 миллиард һум кимәлендә. Төбәктә бөтәһе 43 мең сауҙа предприятиеһы эшләй. Башҡортостандың сауҙа һәм хеҙмәтләндереү министры Азат Асҡаров билдәләүенсә, бәләкәй форматлы сауҙа секторы һөҙөмтәле үҫешә.

✓ ***Трамп 26 октябрҙә Канаданың Онтарио провинцияһында Американың 40-сы президенты Рональд Рейгандың тарифтарҙы тәнҡитләүен рекламалаған 1987 йылғы телевизион ролик өсөн был илгә пошлинаны 10 процентҡа күтәрҙе.***



тема юҡтыр. Был тарих тигәндең ҡабатлана торған холҡо бар. 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышына 6-шар, хатта 7-шәр улын һуғышҡа оҙатҡан әсәләр булған. Шуларҙың береһе Төньяҡ Осетияның Дзуарикау ауылынан Тассо Газданова ете улының береһен генә лә көтөп ала алмай, улар бөтәһе лә фашист илбаҫарҙарына ҡаршы яуҙа бер-бер артлы һәләк була. Бер туған ете батыр хөрмәтенә ауылдарында көмөш сылбырҙай ҡуҡҡа ынтылып ҡанат ҡағыусы 7 торна-һәйкәл ҡуйылған. Рәсүл Ғамзатовты халыҡ йырына әйләнгән "Торналар" шиғырын яҙыуға тап ана шул уландар иҫтәлеге рухландырған да инде. Краснодар крайынан Епистиния Степанованың 9 улы ла яу ҡырында ятып ҡалған, ә бына Ростов өлкәһенән Анастасия Шутенконың бәхетенә бөтә 5 улы ла Берлинға барып етеп, һуғыштан иҫән ҡайталар.

Былай әсәләр һәм уландар бөгөнгө көндә беҙҙең Башҡортостанда ла бик күптәр. Мәҫәлән, Бишбүләк районының Каменка ауылынан Нина Никифорова 6 улын Махсус хәрби операцияға оҙата. Шуларҙың береһе ауыр яранан госпиталдә һәләк була. Архангел районынан Рәмилә Миҙхәт ҡыҙының - 4 улы, Дәүләкән районынан Наталия Иванованың - 4 улы, Көйөргәҙе районынан Альбина Рафил ҡыҙының 2 улы яу ҡырында. Менәрләгән әсәләр көн-төн керпек ҡаҡмай, доғалар ҡылып, тиҙерәк тыныслыҡ урынлашыуын теләйҙәр һәм зарығып гәзиз улдарын көтәләр...

Был ай календарында: Бөтөн донъя ирҙәр көнө **(1)**, Килешеү һәм тыныслыҡ; Халыҡтар берҙәмлеге көндәре **(4)**, Бөйөк Октябрь революцияһы **(7)**, Бөйөк Октябрь революцияһының 24 йыллығы айҡанлы Мәскәүҙә, Ҡыҙыл майҙанда хәрби парад үткәрелгән көн **(7, 1941)**, Фашизм, расизм һәм антисемитизмға ҡаршы халыҡ-ара, Ядроға ҡаршы халыҡ-ара акциялар **(9)**, бөтөн донъя йәштәр, Бухгалтер, Тыныслыҡ һәм үҫеш хаҡына Бөтөн донъя фән көндәре **(10)**, Иҡтисадсы, Энергияны һаҡлау көндәре **(11)**, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы **(13)**, Бөтөн донъя мәрхәмәтлек, Бөтөн донъя сифат **(13)**, Бөтөн Рәсәй призывниктар **(15)**, Юл-транспорт фажиғәһе ҡорбандарын иҫкә алыу, Толерантлыҡ көндәре **(16)**, Халыҡ-ара студенттар **(18)**, Ракета һәм артиллерия ғәскәрҙәре **(19)**, Халыҡ-ара тәмәкенән баш тартыу **(20)**, Хәрби ант, Бөтөн донъя сәләмләү, Телевидение көндәре **(21)**, Уландар көнө **(22)**, Моряк **(24)**, Ҡатын-ҡыҙға ҡарата көс ҡулланыуға ҡаршы халыҡ-ара көрәш **(25)**, Бөтөн донъя мәғлүмәт **(26)**, Диңгеҙ пехотаһы **(27)**, Палестина халҡы менән халыҡ-ара теләктәшлек көнө **(29)**, Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналиндың Рогервикка мәңгелек һөргөнгә килеүҙәренә - 250 йыл **(29,1775 йыл)**, Әсәләр көнө **(30)**.

**Ҡырпағайҙа тыуғандар:**

**3 -** педагог,1922-1927 йылдарҙа БАССР мәғариф комиссары урынбаҫары, Башҡорт Академия үҙәге рәйесе **Шәриф Сөнсәләйҙең тыуыуына - 140 йыл** (1885-1959).

**4 -** тарихсы, журналист, БР Милли архивының бүлек мөдире, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты ағзаһы, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты **Азат Ярмуллинға - 50 йәш** (1975).

**5 -** лингвист-ғалим, 1966-1991йылдарҙа БДУ-ның филология факультеты деканы, 2000-2012 йылдарҙа башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты деканы, филология фәндәре докторы, профессор, академик, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Марат Зәйнуллиндың тыуыуына - 90 йыл** (1935-2016).

**5 -** телсе-төркиәт белгесе, яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре, 1988-2002 йылдарҙа Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы, профессор, академик, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры **Зиннур Ураҡсиндың тыуыуына - 90 йыл** (1935-2007).

**11 -** журналист, публицист, яҙыусы, 1982-1996 йылдарҙа "Башҡортостан" гәзитенең бүлек мөдире, мөхәррир урынбаҫары, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шәһит Хоҙайбирҙин премияһы лауреаты **Рәүеф Насировтың тыуыуына - 90 йыл** (1935-2014).

**12 -** журналист, 1981-2011 йылдарҙа "Башҡортостан" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе, БР-ның атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре **Юнир Кинйәбаевҡа - 75 йәш** (1950).

**16 -** йырсы, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт филармонияһы солисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Ш.Бабич премияһы лауреаты **Вәхит Хызыровҡа - 60 йәш (1965)**.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# "БУРЕВЕСТНИК" ҠАНАТ ҠАҒА

**Үткән йәкшәмбе иртә менән Рәсәй Президенты Владимир Путин Берләшкән ғәскәр төркөмдәренең идаралыҡ пункттарының береһендә булды һәм РФ Ҡоралды Көстәренең Генераль штабы начальнигы Валерий Герасимов, шулай уҡ МХО-ла хәрәкәт итеүсе төркөмдәр командующийҙары ҡатнашлығында кәңәшмә үткәрҙе.**

Кәңәшмәлә Генштаб начальнигы ядролы энергетик ҡоролмалы "Буревестник" ҡанатлы ракетаны һынауҙарҙың уңышлы тамамланыуы хаҡында хәбәр итте һәм һынау ваҡытында ракетаның 14 мең км араны үтеүе һәм 15 сәғәтҡә яҡын һауала булыуы хаҡында һөйләне. Уның һүҙҙәре буйынса, "Буревестник" Ракетаға ҡаршы оборона системаларын урап үтә алыу мөмкинлеген күрһәтте. Владимир Путин яңы ҡоралды донъяла тиңе булмаған уникаль ҡоролма, тип атаны. "Беҙ бындай ҡорал эшләнеп ятыуы хаҡында белдергәс, юғары класлы һәм кимәлдәге белгестәр ҙә хатта яҡын киләсәктә бындай проектты бойомға ашырып булмаясағы хаҡында икеләнеүҙәрен белдергәйне",- тип хәтергә төшөрҙө Президент. Кәңәшмәлә Владимир Путин стратегик һөжүм көстәре күнекмәләре сиктәрендә ҡоралланыуҙың башҡа төрлө киләсәкле өлгөләренең дә һынауҙар үтеүе хаҡында белдерҙе һәм быларҙы илдең ышаныслы ядро ҡалҡаны булыуын, ядро ҡоралланыуҙарын туҡтатыуҙа башҡа ядро илдәрендә булмаған заманса көс икәнлеген әйтте.

Мәғлүм булыуынса, үткән аҙнаның 24 октябрендә РФ Президентының махсус вәкиле - Рәсәй Инвестициялар фондының генераль директоры Кирилл Дмитриев, кұстәнәскә тышына Владимир Путин фотоһүрәте төшөрөлгән һәм уның "Рәсәй менән көс ярҙамында һөйләшеүҙән мәғәнә юҡ", тигән һүҙҙәре яҙылған сувенир ҡаплы шоколад кәнфиттәр алып, АҠШ-ҡа рәсми визит менән барҙы. Эш сәфәре Трамп менән Путиндың Будапешта пландалыштырылған осрашыуының билдәһеҙ ваҡытҡа кисерелеүе һәм Рәсәйгә ҡаршы санкциялар иғлан итеүе шарттарында барҙы. 23 октябрҙә, Трамптың ҡайтанан власҡа килеүенән алып төүге тапҡыр, Рәсәйҙең ЛУКОЙЛ менән "Роснефть" компанияларына санкциялар индерелгәйне. Шундай шарттарҙа Дмитриев үҙенең визит маҡсатын Рәсәй-АҠШ диалогын дауам итеүҙә тип белдерҙе. Осрашыу барышында ул АҠШ вәкилдәренә РФ Президенты Владимир Путиндың, "конструктив һәм үҙ-ара ихтирамға ҡоролған һөйләшеүҙәр генә үҙ емешен бирә, ә инде Рәсәйгә баҫым яһарға маташыуҙарҙан мәғәнә юҡ", тигән ҡарашын еткереүе, Рәсәй иҡтисадының яҡшы хәлдә булыуы хаҡында һөйләүен әйтте. Украина конфликтының хәл итеү мөмкинлеген Дмитриев уның төп сәбәптәрен бөтөрөүҙә, тип аңлатты Америка коллегаларына. CNN телеканалына интервьюһында ул Рәсәйҙең дә Украина конфликтын мөмкин тиклем тиҙерәк тамамларға теләүе хаҡында һөйләне. Кирилл Дмитриевтың осрашыуҙар исемлеге иғлан ителмәнә лә, уның әңгәмәләштәренең береһе АҠШ президенты илсеһе Стив Уиткофф икәнлеге тураһында хәбәр итте ҡайһы бер киң мәғлүмәт саралары.

Ә Дональд Трамп иһә үҙ "репертуарында": ул яҡын араларҙа Ҡытай Халыҡ Республикаһы рәйесе Си Цзиньпин менән планлаштырылған осрашыуында Ҡытайҙың Рәсәй нефтен алыуын кәметеүе мәсьәләһен күтәрмәксе. Ул шулай уҡ Һиндостандың Рәсәй нефтен һатып алыуҙы туҡтатырға әҙер булыуын белдерҙе, ләкин Пекин да, Дели ҙа Трамптың был "хыялын" бойомға ашырыуға ризалыҡ биргәндәре юҡ әле. Рәсәйҙең нефть килемдәрен сикләргә маташыу Американың беҙҙең илгә баҫым яһау ысулы, ләкин бынан кем күберәк зыян күрәсәк һуң? "Әгәр донъя баҙарында беҙҙең нефть һәм нефть продукттары күләме кәмеһә, хаҡтар артасаҡ. Был иһә нефть һәм нефть продукттарының, шул иҫәптән, бензин ҡойоу станцияларында ла, хаҡтарҙың ҡырҡа артыуына килтерәсәк һәм был хәл АҠШ-тың үҙенә лә ҡағыласаҡ", - тине Владимир Путин.

Әйткәндәй, бигерәк тә Германияның зыян күрәсәге фаразлана, сөнки көтмәгәндә "Роснефть"тең бүлендек предприятиеһы ГФР-ҙы ҙур күләмдә нефть продукттары менән тәьмин итеүе асыҡланды. Шунлыҡтан Германия канцлеры Мерц, "ярлыҡау" һорап, Америка алдында тик теҙләнмәй генә. АҠШ тарафынан "Роснефть"кә Германия өсөн нефть һатыуҙы ғәмәлдә ҡалдырырҙар, моғайын, тип өмөтләнә канцлер.

Шул уҡ ваҡытта Трамп ут күршеһе Канаданы ла тыныслыҡта ҡалдырмай: ул 26 октябрҙә Канаданың Онтарио провинцияһында Американың 40-сы президенты Рональд Рейгандың тарифтарҙы тәнҡитләүен рекламалаған 1987 йылғы телевизион ролик өсөн был илгә пошлинаны 10 процентҡа күтәрҙе. Онтарио премьер-министры Дут Форд шунда уҡ рекламаны туҡтатып, сауҙа һөйләшеүҙәренә әҙер булыуын белдерһә, ә бына Ҡытай делегацияһы АҠШ вәкиллеге менән һөйләшеүҙәрҙә үҙ иле мәнфәғәттәрен яҡлап нык торҙо һәм һөҙөмтәлә ике яҡ та нигеҙ килешеүгә килә алды, тип яҙа kommersant.ru баҫмаһы. АҠШ менән ҠХР делегациялары күп мәсьәләләр, шул иҫәптән, экспорт контроле һәм пошлиналар, наркотиктарҙың законһыҙ әйләнеше менән көрәш, сауҙа бәйләнештәрен үҫтереү буйынса һөйләшеүҙәр алып барҙы. Ике яҡ та үҙ илдәре мәнфәғәттәрен ҡәнәғәтләндерерлек һөҙөмтәләргә өлгәшеү юлдарын таба алды, тип белдерҙе ҠХР-ҙың коммерция министры урынбаҫары Ли Чэнган.

Хәбәр ителеүенсә, Украина армияһы составында һуғышыусы сит ил яллансылары күпләп һәләк була. Күптән түгел Рәсәйҙең "Герань" дрондары Украинаның Черноморск портындағы складтарҙы шартлатты. Һөҙөмтәлә көнбайыштан килтерелгән ҡорал юҡҡа сығарылған һәм юғары чиндағы НАТО вәкиле - Британияның хәрби кәңәшсеһе һәләк булған, тип хәбәр итә подполье координаторы Сергей Лебедь. Был шартлау ваҡытында шулай уҡ Британияның тиҫтәләгән ябай граждандары - Рәсәйгә ҡаршы һуғышырға килгән яллансылар ҙа юҡ ителгән. Асылда иһә, рәсми булмаған мәғлүмәттәр буйынса уларҙың һаны меңдән ашыу, тип яҙа MKRU.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Һуңғы 4 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһына 49 круиз судноһы килгән, улар 5,5 мең туристы ташыған. Был хаҡта Өфө мэрияһындағы оператив кәңәшмәлә ҡаланың йылға аша сығыу хеҙмәте директоры Нина Федорова һөйләне. 2025 йылда 16 теплоход ҡабул иткәндәр, был иһә рекордлы күрһәткес булып тора, тип билдәләне ул. "Быйыл Өфөгә үҙәк Рәсәйҙән 2 меңгә яҡын турист килде", - тине спикер. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Өфөлә "Виссарион Белинский", "Александр Бенуа", "Россия", "Н. А. Некрасов", "Александр Пушкин" һәм башҡа теплоходтар "ҡунаҡта булды".

✓Өфөнөң Ленин һәм Совет райондарында 5 км трамвай юлдарын ремонтлау планлаштырыла. Юлдарҙы һәм һалма ҡоролмаларҙы ремонтлау һәм ҡарау идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, шпалдар һәм рельстарҙы тулыһынса алмаштырыу ҡарала. Әлеге ваҡытта Свердлов һәм Аксаков урамдары буйлап юлдарҙы капиталь ремонтлау проекты (1,7 км) дәүләт экспертизаһы үткән. Революция (2 км), Минһажев һәм Зорге (1,17 км) урамдары буйындағы юлдар буйынса проекттар экспертизала.

✓31 октябргә тиклем Көньяҡ Кореяла Face of Asia-2025 халыҡ-ара моделдәр конкурсы ойошторола. Конкурс 20-се тапҡыр үткәрелә. Башҡортостан был проектта төүге тапҡыр ҡатнаша. Республикабыҙҙан Face of Bashkortostan-2025 төбәк конкурсы еңеүсеһе, Өфө моделдәре Луиза Эшрокова, Ярослав Ткаленко һәм Екатерина Киселева сығыш яһай. Финал шоуында моделдәр "Агиҙел" предприятиеһы һәм Башҡорт дәүләт филармонияһының милли кейемдәрен күрһәтә. Проектта Азияның төрлө илдәренән һәм төбәктәренән бөтәһе 60 модель ҡатнаша.

✓5 ноябргә тиклем Ҡытайҙа "Мисс Халыҡтар дуҫлығы Интернешнл-2025" халыҡ-ара матурлыҡ конкурсы ойошторола. Рәсәй исеменән "Башҡортостан Һылыукайы-2023", Өфө агентлығы моделе Алина Фәрхетдинова ҡатнаша. Алинаға 19 йәш, Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының II курс студенты. Яҡташыбыҙ инглиз һәм испан телдәрен яҡшы белә, ғәрәп һәм ҡытай телдәрен өйрәнә. Ул эстетик гимнастика тренеры ла. Быйыл йәй Һиндостанда Miss Glam World халыҡ-ара конкурсында еңеү яулаған. Конкурста донъяның 60 иленән ҡыҙҙар ҡатнаша.

✓5 ноябргә тиклем Төньяҡ Осетияла "Алтын-Майдан Алания" Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр инклюзив фестивале үтә. Башҡортостан исеменән сығыш яһаған йәш артистар француз яҙыусыһы Эрик-Эммануэль Шмитттың "Оскар һәм Алһыу Ханым" хикәйәһе буйынса спектакль күрһәтә. Спектаклдең режиссерҙары - Катрина-Ҡарлуғас Дүшәнбаева һәм Илшат Ҡаҙаҡбаев. Төп ролдәрҙә Катрина Дүшәнбаеваның актерҙар студияһы уҡыусылары уйнай.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Ер аҫты ҡаҙылмалары менән файҙаланыуға лицензия алыу өсөн иң тәүҙә Рекультивация фондына аҡса күсерергә кәрәк. Был аҡсалар дәүләт банкында һаҡланасаҡ. Эштәр тамамланғас, аҡтарылған ер тәртипкә килтерелергә тейеш.***



*ТУРИСТ ҺУҠМАҒЫ*



# ҠЫҘЫЛТАШ ҠАЯҺЫ

**Инйәр буйының иң матур урынын биҙәй ул. Бәлки, киреһенсә, Ҡыҙылташ ҡаяһы булғанға тәбиғәт был ерҙә шул тиклем йәмле һәм үҙенсәлекле.**

Өфө - Белорет юлынан барып, Асы тарафына боролорға кәрәк. Ауылға еткәс, тимер юлы аша сығып, мәктәп эргәһенән һулға боролаһың һәм, йылғаға йәнәш барып, урманға инәһең. Бара биргәс, йәйәүләүгә күсәһең. Егерме минуттай атлайһың һәм бына - ҡаршында Ҡыҙылташ ҡаяһы!

Юҡ, әле ҡаяның үҙенә барып етмәйһең, йылға үҙәне буйлап бер саҡрымдайға һуҙылған алһыу-ҡыҙғылт бейек таш диуарын ғына күрәһең. Тимер юлсыларҙың ташландыҡ йортонан бер нисә һуҡмаҡ китә. Шуларҙың береһенән тау яғына барырға кәрәк. Үргә тартҡан һөҙәк юлдан атлау ауыр түгел. Дуғалай бөгөлгән текә ҡая аҫтынан буйлап үткәндә, тәбиғәттең ҡеүәтен, мөһабәт бөйөклөгөн тояһың.

Тағы егерме минуттай атлағас, тирә-яҡтың иҫ киткес күренешен асҡан майҙансыҡҡа барып етәһең. Улар өсәү һәм һәр ҡайһыһынан Инйәр йылғаһының бөгөлөшө, алыҫтағы тау һырттары, Ҡыҙылташ ҡаяһы бөтә матурлығында күҙ алдына килеп баҫа.

Ҡайҙан алған һуң ҡая ташы бындай алһыу төҫтө? Ғалимдәр иҫбатлауынса, Ҡытайҙағы Төҫлө тау урынында ҡасандыр ғәйәт ҙур күлдәр булған, улар ҡороған, ер ҡыртышы, геологик процесстар һөҙөмтәһендә бер-береһенә ҡатланып, тауҙар хасил иткән, тәрәндә ятҡан тау тоҡомдары көн битенә асылған.

Билдәле булыуынса, Урал тауҙары урынында ла бынан миллиард йылдар элек, палеозой дәүерендә, боронғо Рифей диңгеҙе йәйрәп ятҡан. Сама менән 350 миллион йылға һуҙылған дәүерҙә бөгөн беҙ күреп белгән ландшафт формалаша башлай, диңгеҙ төбө өҫкә күтәрелә. Нәҡ Ҡыҙылташ ҡаяһы торған тарафтарҙа марганецты әүҙем үҙләштергән строматолит тигән ылымыҡ күпләп үҫкән, миллион йылдар дауамында ҡалыная барған ҡатлам тығыҙланған, тау тоҡомо булып ҡатҡан. Ылымыҡтарҙың ташҡа әүерелгән һүрәтен дә табырға мөмкин ҡаяла.

Ҡыҙылташтан бихисап шишмә ер өҫтөнә бәреп сыға. Уларҙың күбеһе шифалы, минераллы. Нәҡ шуларҙың береһе янында данлыҡлы Асы шифаханаһы төҙөлгән дә инде. Тәбиғәт матурлыҡтары менән һоҡланып йөрөп ҡайтыу менән бер рәттән, минераллы һыу ҙа алырға мөмкин үҙең менән өйгә. Ҡоҙоҡ Асы ауылы урамында ҡаҙылған.

Өфөнән юлланған сәйәхәтселәр, "Өфө - Инйәр" электр поезында килеп, Ҡыҙылташ ҡаяһына Берештамаҡ ауылы аша барып етә ала. Ул Инйәр йылғаһы буйлап Асы менән Йөйәк ауылдары араһында ята. Юл сама менән өс сәғәтлек.

Башҡортостанда тағы бер Ҡыҙылҡая тауы бар. Ул Нуриман районындағы Павловка һыуһаҡлағысы янында урынлашҡан. Тауға менеү өсөн ҡулай урынға сиҙәм юлынан Павловка ауылы аша барырға кәрәк. Тик уның буйлап юлһыҙ ерҙәрҙә йөрөү өсөн ҡулайлаштырылған машина менән генә үтеп була. Ҡая өҫтөндә тирә-яҡты күҙәтеү өсөн ҡулай ике-өс майҙансыҡ бар. Уларҙан һыуһаҡлағыс, гидроэлектр станция, Ҡариҙел йылғаһы буйы бик яҡшы күренә.

Тауҙың үҙенә иһә Павловканан Ҡыҙыл Шишмә (Красный Ключ) ауылына үткән асфальт юлдан быҒырға мөмкин. Тик ул яҡтан өҫкә үрмәләү үтә лә хәүефле. Шуға, юл урау, насар булһа ла, үрҙә әйтелгән маршрутты һайлау хәйерле.

Тауҙың Ҡыҙылҡая тип аталыуына килгәндә иһә, ул, ысынлап та, ҡыҙғылт булып күренә һәм был төҫтө уға таштарҙа үҫкән мүк бирә.

Павловка һыуһаҡлағысы үҙенең ҙурлығы менән һушты ала - оҙонлоғо 150 километр! Унда ла туризм инфраструктураһы ныҡ үҫешкән, ял итеү өсөн махсуслашҡан бик ҡулай базалар бихисап.

Был тарафтарға халыҡ ерҙән урғылып сыҡҡан донъялағы иң ҡеүәтле шишмәләрҙең береһен күреү өсөн дә килә. Ҡыҙыл Шишмә Рәсәйҙәге бындай тәбиғәт ҡомартҡыһы булараҡ беренсе урында тора. Ул секундына ер аҫтынан 15 кубометр һыу урғылта.

Ғәжәйип был тәбиғәт күренеше ер ҡуйынындағы карст бушлыҡтар менән бәйле, тип аңлата ғалимдар. Ҡаратау һыртында баш алған Яманйылға һыуы, һигеҙ саҡрым ара үткәс, ер аҫтына инеп юғала. Ул 40 саҡрым шулай карст бушлыҡтарҙан аға. Ҡыҙыл Шишмә - уның көн битенә сыҡҡан урындарының иң ҡеүәтлеһе. Ике карст соҡоронан урғыла шишмә. Бәләкәсенең тәрәнлеге - 20, ҙурыныҡы - 38 метр. Ҡышын да, йәйен дә һыуы 5 - 6 градус йылылыҡта булғас, һыуыҡтарҙа ла йылға туңмай.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН әҙерләне.**

*ДЕПУТАТ ҺҮҘЕ*

# ЕР АҪТЫ БАЙЛЫҠТАРЫ...

## яңы тәртип буйынса файҙаланыла

**Ошо көндәрҙә Рәсәй Дәүләт Думаһына тәбиғәтебеҙҙе һаҡлауға йүнәлтелгән мөһим закон проекты индерелде. Был закон өҫтөндә 2019 йылдан алып эшләйем. Ул рекультивация үткәреү өсөн гарантия рәүешендә Рекультивация фондына аҡса индермәйенсә, ойошмаларға файҙалы ҡаҙылмалар сығарыуға лицензия биреүҙе тыйыуҙы күҙ уңында тота.**



Инициативаны формаль рәүештә генә индереү менән сикләнмәнек. Маҡсатҡа өлгәшеү өсөн иң тәүҙә федераль ведомстволар менән килешеү юлын эҙләнек. Ковид сикләүҙәре бөткәс һәм бизнес буйынса норматив документтар әҙерләнгәндән һуң, 2024 йылдың июленән федераль ведомстволар етәкселегенә һәм ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыусылар менән тиҫтәләгән кәңәшмәләр, эшлекле һөйләшеүҙәр үткәрҙек. Был осрашыуҙар барышында киҫкен мәсьәләләрҙе хәл иттек.

Әлеге закон Башҡортостан һәм бөтә Рәсәй өсөн бик әһәмиәтле. Файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу тамамланғандан һуң, ерҙәрҙе рекультивациялау йыш ҡына үткәрелмәй ҡала. Хозур болондар, ҡалын урмандар урынына тәрән соҡорҙар, вәхшиҙәрсә ҡырылған мөхит кенә тороп ҡала. Бесәнлектәр юҡҡа сығарыла, шишмәләр ҡорой, йылғалар бысрана, үҙәнен үҙгәртә - тәбиғәткә ҡот осҡос ҙур зыян килтерелә! Ғәмәлдәге нормалар буйынса, бындай ерҙәрҙе рекультивациялау бурысы муниципалитеттарға һәм ил субъекттарына йөкмәтелгән, әммә уларҙың был эшкә аҡсаһы юҡ.

Минең закон проектында тәҡдим ителгән механизм асылы ябай: ер аҫты ҡаҙылмалары менән файҙаланыуға лицензия алыу өсөн иң тәүҙә Рекультивация фондына аҡса күсерергә кәрәк. Был аҡсалар дәүләт банкында һаҡланасаҡ. Эштәр тамамланғас, аҡтарылған ер тәртипкә килтерелергә тейеш. Артабан Тәбиғәттән файҙаланыу өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт, муниципаль берәмек һәм субъекттың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы вәкилдәре ҡатнашлығындағы комиссия эштәрҙең сифатын тикшерәсәк. Әгәр рекультивация үткәрелмәһә йәиһә сифатһыҙ башҡарылһа, Фондтағы аҡса ерҙәрҙе тергеҙеүгә йүнәлтеләсәк.

Был намыҫһыҙ компанияларҙың эшмәкәрлегенә сик ҡуясаҡ. Минең фекеремсә, әгәр ҙә ойошманың Рекультивация фондына күсереү өсөн аҡсаһы булмаһа, уға файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу менән шөғөлләнергә ярамай. Эйе, әлеге мәлдә беҙгә ҡарата етди көстәр ҡаршы сыға, әммә был законды ҡабул итеү өсөн ныҡышмалы рәүештә эшләйәсәкбеҙ. Ошо закон проектының ҡабул ителеүе киләсәк быуындарға гүзәл тәбиғәтебеҙҙе һаҡлап ҡалыу, уңайлы йәшәү мөхите булдырыу мөмкинлектәрен бирәсәк.

**Зариф БАЙҒУСҠАРОВ,**
**Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# АУЫЛДА ЙӘШӘЙҺЕҢМЕ?

## Пенсияңа өҫтәмә түләү ал!

**Башҡортостанда ауыл халҡына пенсияға өҫтәмә түләүҙәр ҡаралған.**

Өҫтәмә түләүҙәр ауылда 30 йылдан кәм булмаған ваҡыт эшләгән һәм пенсия тәғәйенләнгән ваҡытта ауыл ерендә йәшәгән эшләмәгән пенсионерҙарға тәғәйенләнә.

Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе мәғлүмәте буйынса, бөгөн республикала 39 меңдән ашыу кеше ауыл хужалығында оҙайлы эш стажы өсөн пенсияға өҫтәмә ала.

Өҫтәмә түләү күләме страховка пенсияһына билдәләнгән түләүҙең 25 процентын тәшкил итә. 2025 йылда был - 8907,70 һум, ауыл хужалығында эшләгән өсөн өҫтәмә түләү - 2 226,93 һум.

Өҫтәмә түләү ҡартлыҡ йәки инвалидлыҡ буйынса страховка пенсияһын рәсмиләштергәндә тәғәйенләнә һәм өҫтәмә ғариза биреүҙе һәм документтар йыйыуҙы талап итмәй. Әгәр билдәләнгән юғары түләү хоҡуғын раҫлаусы документтар элек граждандарҙы түләү эшенә индереү өсөн тапшырылмаһа, пенсионер уларҙы теләһә ҡайһы ваҡытта пенсияны ҡайтанан иҫәпләү өсөн үҙе тапшырырға хоҡуҡлы.

Түләү ауыл һәм ауыл халҡы өсөн генә рәсмиләштерелә, әммә уны алыусы һуңынан ҡалаға күскән осраҡта ла һаҡлана. Хеҙмәт эшмә-кәрлегенә ҡайтҡан пенсионерға ауыл стажы өсөн өҫтәмә түләү туҡтатыла. Әммә эштән бушатылған осраҡта эш биреүсе биргән мәғлүмәттәр нигеҙендә яңынан ғаризаһыҙ билдәләнә.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

# КИРЕ ҠАЙТАРЫП БУЛМАЙ

**Башҡортостан парламенты Дәүләт Думаһына ҡарауға "РФ Граждандар кодексының икенсе өлөшөнөң 578-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" федераль закон проектын тәҡдим итә. Төбәк депутаттары һуңғы ҡарарҙы 30 октябрҙә пленар ултырышта ҡабул итәсәк, тип хәбәр иттеләр Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәтенән.**

Бынан алда был закон проекты концепцияһын Рәсәй закон сығарыусылар Советы хупланы. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында аңлатыуҙарынса, закон проекты бүләкләнеүсе вафат булған осраҡта мөлкәтте кире ҡайтарыуҙы бөтөрөү тәртибенә ҡағыла. Хәҙерге көндә, әгәр ҙә бүләкләнеүсе вафат булһа, бүләк итеүсе мөлкәтте бер яҡлы тәртиптә кире ҡайтара ала. Бының өсөн бүләк итеү килешеүендә тейешле пункт булырға тейеш. Ләкин ҡануниәттә мөлкәтте кире ҡайтарыуҙың ваҡыты билдәләнмәү сәбәпле, бындай осраҡтар хоҡуҡи ҡатмарлыҡтар тыуҙыра.

Мәҫәлән, бүләк итеүсе күсемһеҙ милекте кире үҙенә ҡайтарыуҙы оҙайлы ваҡыт рәсмиләштермәй, ә вариҫтар уны үҙҙәренеке тип һанай һәм фатирҙы (ерҙе, башҡа күсемһеҙ милекте) һатыуға йәки залогка ҡуйырға мөмкин. Әммә күпмелер ваҡыттан һуң фатирҙы бүләк итеүсе уны үҙенә кире ҡайтарыуҙы юллай башлай һәм ошо ваҡытта ҡатмарлыҡтар килеп тыуа ла инде. Мәҫәлән, бындай фатирҙы һатып алыусылар киләсәктә проблемалар менән осрашырға мөмкин.

Башҡортостан Ҡоролтайында бындай хоҡуҡты ғәмәлгә ашырыуҙың сикләнгән ваҡытын, атап әйткәндә, алты айҙы, билдәләргә тәҡдим итә. Шул саҡта вариҫтар һәм башҡа ҡыҙыҡһынған кешеләр бүләк итеүсе күсемһеҙ милекте үҙенә кире ҡайтарырмы, әллә ул тулыһынса мираҫ булып күсерме икәнен аныҡ белеп эш итәсәк.

Әйткәндәй, Рәсәй Дәүләт Думаһы пошлина түләгәндә ҡулланылған ташламаларҙы киңәйтеү йәһәтенән РФ Һалым кодексына үҙгәрештәр индергән федераль закон проектын һуңғы уҡыуҙа ҡабул ите. Был закон проекты ла Башҡортостан парламенты тарафынан Дәүләт Думаһына ҡарауға индерелгәйне.

*✓ Абыз тигәндә - уҡымышлы кеше, фәләнсә абыз тигәндә - дәрәжәле шәхес, ауыл, ер-һыу атамаларына шундай шәхестәрҙән күскән исем, ә абыз ағай, абыз бабай тип әйтеүҙәрҙә өлкәнерәк, абруйлыраҡ мәғәнәләре аңлашыла.*



*ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА*

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**



***Салауат Хәмиҙуллин:*** Шулай итеп, Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыу датаһы XIX быуатта уҡ билдәле була. Тик 1573 йылда башҡорттарҙан кемдәрҙең ҡәлғә төҙөтөү инициативаһы менән Мәскәү хөкүмәтенә һәм, иң мөһиме, ни сәбәпле мөрәжәғәт итеүе билдәһеҙ ҡала. Батшаның Нуғай кенәзе Урус менән яҙышыуынан Башҡортостан үҙәгендә 1586 йылда Мәскәү батшалығы форпосы төҙөлөүен төбәктә сәйәси ситуацияның ҡыҫҡенләшеүе менән бәйләп аңлатып була.

1581 йылда атаман Ермак үҙенең легендар Себер походына китә. Бер үк ваҡытта Себер ханы Күсем ғәскәрҙәре Чердын һәм Соликамск өйәҙҙәренә һөжүм итә. Тарихсы Николай Карамзин ошо хаҡта былай тип яҙа: "...князь Пелымский с вогуличами, остяками, сибирскими татарами и башкирцами нечаянно напал на берега Камы, выжег, истребил селения близ Чердыни, Усолья и новых крепостей Строгановых...".

***Булат Аҙнабаев:*** "Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалынғанға тиклем 100 йыл алдараҡ уҡ Себерҙә хакимлыҡ итеүсе ике йорт араһында етди сәйәси көрәш бара. Уларҙың береһе Сыңғыҙ хан нәҫеленән булып, Шибан ханға барып тоташа, шуға күрә хакимдарҙың ошо линияһын Себер Шибанидтары, тип атайҙар. Уларға дошман булған хакимдар династияһы Тайбуға кенәз вариҫтарына ҡарай. Заманында Сыңғыҙ хан алдындағы хәрби хеҙмәттәре өсөн уға Себер йорто бүләк ителә, был ерҙәр Шибанидтар йортонан төньяҡтараҡ урынлашҡан була. Ошо ҡаршы тороуҙа башҡорттар пассив позиция биләмәй: Урал арьяғы башҡорттарының бер өлөшө сәйәси ориентир итеп Шибанидтар линияһын һайлаһа, икенселәре Тайбуғаны һәм уның вариҫтарын үҙ итә.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Табын, Һеңрән, Бәкәтин һәм башҡа бер башҡорт ырыуҙары Шибанидтарҙы үҙҙәре өсөн законлы династия тип таный һәм Күсем хан байрағын өҫтөн күрә. Салйоғот, Ҡатай, Ҡунғрат кландары Мәскәү менән яҡынлашыу яғында торған Тайбуға нәҫеленән булған Себер кенәзе Йәҙегәрҙе (Едигер) һайлай. Нуғай урҙаһы хакимы кенәз Урус, Күсемдең союздашы булмаған хәлдә лә, Урал-Волга төбәгендә Мәскәү батшалығы йоғонтоһоноң көсәйеүен шулай уҡ өнәмәй. Шундай ҡатмарлы ситуацияла Мәскәү хөкүмәте, воевода Михаил Нагойға һәм уның отрядына ваҡытында ярҙам итә аласағына ышаныс булмағас, бер бәләкәй генә стрелецтар төркөмөн Башҡортостанға ебәрергә баҙнат итер инеме һуң?

Өфө ҡалаһынан 30 саҡрым алыҫлыҡта, Ҡырмыҫҡалы районында Салйоғот ауылы бар. Уның исеме Һалъюғут (Салжиут) йә иһә Һалъют (Салъют) тигән башҡорт ырыуы этнонимы менән бәйле, һалйоттарҙың тарихи йәшәү ареалы бынан алыҫ Урал арьяғында, атап әйткәндә, хәҙерге Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы ерҙәренә ҡарай. Бындай топонимдың Башҡортостандың Урал алдына ҡараған тарафта ҡулланылыуы ошо кландың бынан байтаҡ алыҫ йылдарҙа миграцияға дусар ителеүе хаҡында һөйләй. Күсем хан менән көрәштә еңелгәндән һуң Салйоғот һәм Ҡатай кландарының Мәскәү менән килешеү яҡлы бер өлөшө Урал алды территорияһына күсеп китергә мәжбүр була.

Моғайын, тап улар 1573 йылда, рус гарнизонына һәр төрлө ярҙам итәсәктәрен вәғәҙә итеп, Өфө ҡәлғәһен төҙөтөү хаҡында мөрәжәғәт иткәндәрҙер.

***Булат Аҙнабаев:*** Был үҙе бер ҙур уйынды хәтерләтә, бер нисә көс уның субъекттары булып тора. Был осраҡта беҙ бер-береһенә ҡаршы тороусы ике дошманды, мәҫәлән, Русь батшалығын һәм Нуғай урҙаһын, йә иһә Күсем ханды, уның вариҫтарын һәм шул уҡ Нуғай урҙаһын ғына күҙ уңында тотмайбыҙ. Ысынбарлыҡта бында бер юлы бер-береһенә дошман булған бер нисә субъектты атап үтергә була. Ватан историографияһында, ни сәбәптәндер, башҡорттарҙы ошо сәйәси бәрелештәр барышында зыян күреүсе итеп кенә ҡарау өҫтөнлөк итә. Әммә документтар башҡорттарҙың да ошо ваҡиғаларҙа үҙ ихтыяры менән ҡатнашҡан субъект булыуын дәлилләй. Шул уҡ Салйоғот һәм Ҡатай ырыуҙары башҡорттары аңлы рәүештә Мәскәү яҡлыларҙы үҙ итә. Быны уларҙың билдәле бер сәйәси принциптары булыуына дәлил итеп ҡарау фарыҙ. Уларҙың хакимы, йәғни сәйәси етәксеһе булған Йәҙегәр кенәз рус подданствоһын алған икән, уға үҙ ихтыяры менән буйһонған башҡорттар ҙа биргән анттарына тоғро ҡала.

(Дауамы. Башы 37-42-се һандарҙа).

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# БАШҠОРТ АБЫЗДАРЫ ҺӘМ БАТЫРҘАРЫ

Былӑрҙан күренеүенсә, абыз һүҙенә төрлөрәк мәғәнә һалынғанлығы абайлана. Ғөмүмән, абыз тигәндә - уҡымышлы кеше, фәләнсә абыз тигәндә - дәрәжәле шәхес, ауыл, ер-һыу атамаларына шундай шәхестәрҙән күскән исем, ә абыз ағай, абыз бабай тип әйтеүҙәрҙә өлкәнерәк, абруйлыраҡ мәғәнәләре аңлашыла. Хәҙер тарихи һүҙ булып яҙма әҙәбиәттә һирәк ҡулланылған абыз һүҙе башлыса әүәлге иҫке белемле, уҡымышлы кеше, тигән уртаҡ төшөнсәне бирә. "Башҡорт теленең һүҙлеге"ндә "абыз - иҫке, уҡымышлы, белемле кеше", тип кенә аңлатыла.

Ғәмәлдә, "абыз" атамаһы боронғо һүҙ булып, төрлө быуаттар һүҙымында мәғәнәһе берсә киңәйеп, берсә тарайып, хатта танымаҫлыҡ булып үҙгәреп киткән. Боронғо төрки телендә абыз тип иң уҡымышлы, ғалим кешегә әйтер булғандар. Ҡаҙаҡ халҡында абыз тип Кесе Урҙалағы табын ырыуының бер аймағын атағандар. Аҙағыраҡ был һүҙҙә Ислам динен, Ҡөрьәнде яҡшы белгән Ҡөрьән-хафиз кешегә ҡарата ҡулланғандар. Шиһабетдин Мәржәни абыз һүҙенең сығанағын ана шул ғәрәп һүҙе хафиз менән бәйләй. Төрки телдәренең сағыштырма һүҙлеген төҙөгән рус лексикографы Л. З. Будагов та абыздың хафиз мәғәнәһендә генә ҡулланылған был һүҙ халыҡ телендә абыз рәүешендә үҙгәреп, мәғәнәһе лә уҡымышлы, белемле кеше төшөнсәһен алып киңәйеп киткәнен, тел ғилемендә ҡайһы бер өндәрҙең төшөп ҡалыу ҡанунын таный.

XIX быуатта Л. З. Будагов, В. В. Радлов тарафынан сығарылған төрки һүҙлектәрендә "абыз" һүҙенә "уҡымышлы, белемле кеше" мәғәнәһендә аңлатма бирелә. Тимәк, абыз һүҙе мулла, мөҙәрис атамалары кеүек дин шөғөлө менән бәйле тар мәғәнәләге төшөнсә түгел, бәлки, уҡымышлылыҡтың донъяуи мәғәнәһен дә үҙ эсенә алған киң төшөнсәле атама. XVII-XVIII быуаттарҙа башҡорттар халыҡ мәнфәғәтен яҡлаған иң абруйлы, иң белемле кешеләрҙе генә абыз тип атаған. Ундай абыздар ырыу-йорт мәнфәғәтен яҡлап йыйындарҙа сығыш яһап, йәмәғәт ихтыяждары, талаптары хаҡында ҙур түрәләргә хаттар, шикәйәттәр яҙыр, волостарҙа, өйәҙҙәрҙә писарь йә тылмас (тәржемәсе) вазифаһын да башҡарыр, мөғәлимлек итер булғандар.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**

(Дауамы. Башы 42-се һанда).

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Ҡышҡылыҡҡа ҡорттарҙы баҙға йәки махсус төҙөлгән ярым ер өйгә урынлаштырғандар. Ҡалын һәм ныҡлы умарталар умарталыҡта ҡышлауға ла ҡалдырылған. Баҙҙарҙың насар ҡоролошо һәм ҡорттарға даими тәрбиә булмау йыш ҡына уларҙың ҡышын күпләп үлеүенә килтергән. Умарталар бары тик яҙын, улар утарға сығарылғас ҡына ҡаралған. Уларҙа бал запасы наҡыҫланһа, бал ҡорттарын өҫтәмә туҡландырғандар. Уларға иҫке бал йәки һыуҙа иретелгән бал, шәкәр иретмәһе биргәндәр. Бал ҡорттары ҡуйылған шыйыҡлыҡҡа батып үлмәһен өсөн уларҙың өҫтөнә бер аҙ һалам һалғандар.

Умарталыҡта башҡорттар һирәк кенә ҡыуыш һәм таҡта аласыҡ ҡорған, бик йыш ҡараусылы йәшәгән һәм умартасылыҡ өсөн кәрәк булған ҡорамалдар ҡуйылған йорт төҙөгәндәр. Умарталыҡтар һәр ваҡыт ат башы һөлдәһе ултыртылған ситәндәр менән кәртәләп алынған. Ат башы һөлдәләре күҙ тейеүҙән һаҡлаған һәм шулай уҡ айырым умарталарға һалынған, ағастарға элеп ҡуйылған.



Айырым умарталыҡтарҙы ҡороу һәм уларҙы тотоу сығымдар талап иткән. Шуға күрә умарталары аҙ булған башҡорттар уларҙы баҡсаларында, йорт алдарында йәки йорт ихаталарында тотҡан **(һүрәт)**. Һуңғылары тотош Башҡортостан буйынса, бигерәк тә саф һыулы йылғалар буйында урынлашҡан ауылдарҙа, күҙәтелгән.

Малсылыҡ кәм тигәндә беҙҙең эраға тиклем II мең йыллыҡтың икенсе яртыһынан алып Башҡортостан халҡының төп шөғөлө булған. Ауылдарҙа (Баламбаш һ.б.) йорт атының, һыйырҙың, суҫҡаның, һарыҡтың һәм кәзәнең һөйәктәре табыла. Был ултыраҡ малсылыҡ күрһәткесе. Шуны уҡ беҙҙең эраның II мең йыллыҡтың һуңында һәм I мең йыллыҡтың беренсе тәүге йөҙ йыллыҡтарындағы малсылыҡ тураһында ла әйтергә мөмкин; скифтар заманында Евразия далалары халҡы малды күпләп үрсетеп, күсмә малсылыҡҡа күсә. Был ваҡытта Башҡортостан халҡы, уның көньяҡ һәм көнбайыш Урал арьяғы ялан райондарынан тыш (Ананьин мәҙәниәте ваҡыты), ултыраҡ көтөү малсылығы менән шөғөлләнеүен дауам иткән. Сармат, һунн һәм артабанғы дәүерҙәрҙә, скифтар ваҡытындағы кеүек үк, күсмә малсылыҡ ялан Башҡортостанында ғына йәшәгән. Урман-ялан районында ла ул ярым күсмә көтөү малсылығы төрөндә булған.

Әйтелгәндәрҙән шундай һығымта яһарға мөмкин: **барлыҡ башҡорттарҙың бары тик күсмә тормош алып барыуы тураһындағы ғына күҙаллауҙар - хата. Малдарҙың йыл һүҙымында аяҡ аҫтындағы үлән менән туҡланып йөрөгән күсмә малсылығы сағыштырмаса һуңыраҡ, беҙҙең эраға тиклем I мең йыллыҡтың тәүге өстән беренсе өлөшөндә барлыҡҡа килгән һәм һуңынан Башҡортостандың тотош территорияһына таралмаған. Өҫтәүенә, башҡорттар бер урында ла таҙа күсмә халыҡ булмаған, хатта ялан райондарында ла ярым күсмә тормош алып барған, тип күҙалларға барлыҡ нигеҙ бар.**

Башҡортостандың күпереп үлән үҫкән болондары һәм ҡуйы үләнле көтөүлектәре булған иркен ерҙәре малсылыҡты үҫтереү мөмкинлеге биргән. Башҡорттар, хужалыҡтарының нигеҙе итеп булмаһа ла, төп элементтарының береһе итеп, ә ялан райондарында хатта нигеҙ итеп, бик күп мал тотҡан.

(Дауамы бар).

***✓ Вахта ысулы менән Себер тарафтарында эшләү инде тормошобоҙҙоң ғәҙәти бер күренешенә әүерелде. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында киң таралыу алды ул. Хәҙер икенсе быуын үҙ атайҙарының юлын дауам итә.***

# СИТ ЕРҘӘРҘӘ

**Беҙҙең халыҡта ер тойғоһо, илһөйәрлек көслө. Ватаным, тип ата-бабаларыбыҙ яу сапҡан, аҫабалыҡ хоҡуғын ҡаты алыштарҙа даулап алған һәм артабан уны күҙ ҡараһылай һаҡлаған. Революциянан һуң ерле автономияны ла көрәштә, үҙ армияһын булдырып, тәү башлап башҡорттар ала, башҡаларға юл яра.**

## Ни хәлдәһең, ауыл?

Статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, бөгөн дә, урбанизация киң ҡолас йәйгән дәүерҙә лә, халҡыбыҙҙың күпселеге тыуған еренә, ырыуы төйәгенә тоғро. Ә ауыл иһә, туған тел, милли мәҙәниәт, гөрөф-ғәҙәттәр һағында тора, глобалләшеү барған, ассимиляция киң таралған дәүерҙә был үтә лә мөһим, тигән ышаныу киң таралған. Ситтән ҡарағанда, һандарға, рәсми отчеттарға нигеҙләнеп кенә фекер йөрөткәндә шулайҙыр, бәлки, ә инде ауыл мөхитен эсенә инеп байҡаһаң, күңел төшә, ирекһеҙҙән, йән әсеткес һығымталарға киләһең. Ысынбарлыҡ үтә лә аяныслы - беҙҙең күҙ алдында милләтебеҙ бишеге бөлә һәм юғала, ул үлем түшәгенә ятҡан ҡартайған кеше хәлендә бөгөн. Быны йөрәк аша ҡабул итеүе бик ауыр. Айыҡ аҡыл иһә, беҙ йәмғиәтебеҙҙең башҡаға төрләнеү, бер сифаттан икенсеһенә күсеү осоронда йәшәйбеҙ, тәрән үҙгәрештәр, тетрәнеүҙәр шаһитыбыҙ, тип һығымталай.

***Ҡайҙа барһаң да, ауылдарҙа бушап ҡалған өйҙәр берәү-икәү түгел, ә тиҫтәләгән. Ҡарауһыҙҙары вайран булып емерелеп ята, ул харабаларҙы йыйыштырыу урындағы властарҙың, кешеләрҙең уйына инеп тә сыҡмай. Йәштәр юҡ кимәлендә, иҫкергән йорттарҙа күп осраҡта ололар яңғыҙ үҙҙәре генә ғүмер кисерә.***

"Нишләп улай?" Был һорауға яуап һәр кемдең теле осонда - ауылда эш юҡ. Икенсе бәлә - ауыл кешеһе социаль йәһәттән, ҡаланыҡылар менән сағыштырғанда, ныҡ үгәйһетелгән. Оптимизация һылтауы менән мәктәптәр, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары ябылып бөттө, йә ябылыу өҫтөндә. Ятып дауаланыу түгел, хәҙер табипҡа күренер өсөн дә район үҙәгенә барырға кәрәк. Элек иһә совхоз үҙәктәре булған ауылдарҙа ла дауаханалар эшләп торҙо ла бит...

Өсөнсө ҙур бәлә (бәлки, иң ҙурылыр) - юлдарҙың үтә лә насар хәлдә булыуы. Үткән йылда миңә республикабыҙҙың иң ҙур райондарының береһе буйлап арҡырыбуй йөрөп сығырға тура килде. Тормош ихтыяжы мәжбүр итте. Дөрөҫөн генә әйтәм: иҫ-аҡылым китте - юлдар, ғөмүмән, юҡ. "Юҡ" һүҙенә баҫым яһарға кәрәк был осраҡта. Сөнки ҡырсын түшәлгән шоссе юлдарҙан да 40 саҡрымдан артыҡ тиҙлек менән йөрөп булмай. Соҡор өҫтөндә соҡор, исмаһам, грейдер менән үтһәләрсе. Юлдар яҡшы булһа, техника заманында мәктәптәрҙең, дауаханаларҙың алыҫлығы бик үк беленмәҫ тә ине. Барып етеүе ауыр булғанға, төпкөл ауылдарҙа магазиндар ҙа юҡ иҫәбендә. Бер кем дә, ыҙа сигеп, машинаһын онтап, насар юлдан тауар ташырға теләмәй.

Ошо сәбәптәр һуңғы йылдарҙа эске миграцияны уғата йылдамлатты. Оло юлдан ситтә ятҡан бәләкәй ауылдарҙа ул бигерәк ныҡ күҙгә салына. Кешеләр, балабыҙҙы уҡытабыҙ, дауаханаға яҡыныраҡ йәшәйбеҙ, тип, район үҙәктәренә, яҡындағы ҡалаларға күсенә.

Вахта ысулы менән Себер тарафтарында эшләү инде тормошобоҙҙоң ғәҙәти бер күренешенә әүерелде. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында киң таралыу алды ул. Колхоз-совхоздар бөлөп, хеҙмәт өсөн түләмәй башлағас, ирҙәр аҡса табыу, ғаиләһен аҫырау мохтажлығынан ситкә китә башланы. Хәҙер икенсе быуын үҙ атайҙарының юлын дауам итә. Тәүгеләр, тыуған төйәктәренә тоғро ҡалып, күп осраҡта әле лә үҙ нигеҙендә йәшәп ятһа, йәштәр ҡалаларҙа, һис юғында, район үҙәктәрендә төпләнеүҙе хуп күрә.

Юғары белем алған дипломлы йәштәр Өфөлә ҡала, йә Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларына, илебеҙҙең башҡа тарафтарына юллана. Үкенескә ҡаршы, ауылда, мәктәптән башҡа уларға эш урыны юҡ. Һирәкләп кенә амбулаторияға - фельдшер, мәҙәниәт йортона, ауыл хакимиәтенә белгес кәрәк булыуы ихтимал. Әлбиттә, район үҙәктәрендә төрлө ойошмалар, дәүләт учреждениелары күп. Тик, пенсия йәше күтәрелгәс, ул урындарҙа башлыса өлкәндәр ултыра, хаҡлы ялға сыҡһалар ҙа әле вазифанан китергә ашыҡмайҙар - аҡса ҡартына ла, йәшенә лә берҙәй кәрәк бит. Заманы шулай.

Ҡайһы яҡтан ҡараһаҡ та, ауылдың киләсәге өмөтһөҙ кеүек, сөнки унда йәшәргә теләүселәр һирәгәйә, ә ололар баҡыйлыҡҡа күсә.

## Малы барҙың, һыйы бармы икән?

Беренсе Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов йыш ҡына: "Ауылда йәшәүселәр эшһеҙ була алмай", - тиер ине. Уның был һүҙҙәренән, ерҙә йәшәйһегеҙ, уны эшкәртегеҙ, мал аҫрағыҙ, шунан табыш алығыҙ, тигән мәғәнә табырға мөмкиндер. Ысынлап та, совет власы осоронда, дөйөмләштереп, ерҙә колхоз-совхоздар ғына эшкәртһә, малдан халҡыбыҙ бер ваҡытта ла өҙөлгәне булманы. Ә ит, һөт, ҡаймаҡ-май - һәр заманда ла кешегә кәрәк көндәлек ризыҡтар.

Боронғо заманға ҡағылмай, һуғыш йылы һәм унан һуңғы осорҙарҙы ғына алһаҡ та, күп ғаиләләрҙе аслыҡ тырнағынан һыйыр ҡотҡарып ҡалған. Был турала иҫтәлектәрҙә, әҙәби әҫәрҙәрҙә бик күп яҙылған, оло быуын туғандарыбыҙҙан да ишетеп беләбеҙ уны. Совет осороноң артабанғы йылдарында мал, иш янына ҡуш, тигәндәй, етеш тормош сығанағы булды. Күптәр, ике һыйыр аҫрап, йыл да башмаҡтарының берәүһен һуғымға тотонһа, икенсеһен һатты, шул аҡсаға һыуытҡыс, телевизор, диван-шкаф кеүек ҡыйбатлы әйберҙәр алды, йыйып барып, хатта машиналы булды. Ауыл магазиндарына һөт, ит ризыҡтары килтермәнеләр, ҡалала аҡ май, колбаса дефицит аҙыҡ-түлек иҫәбендә йөрөнө, күп ерҙә уларҙы талон менән генә бирҙеләр. Бесән сабыу йәй мәленең иң ҙур һәм төп эштәрҙән береһе һаналды, ә һуғым осоро байрамға әүерелер ине.

Хәҙер ауылдарҙа мал тотоусылар кәмей, хатта, бөтә бара, тип тә әйтергә мөмкин. Тыуған яҡҡа ҡайтҡанда күрә йөрөйбөҙ - ҡайҙа ла көтөү ун тапҡыр самаһы ҡыҫҡарған. Көтөүсенең юҡлығына әллә ҡасан күнгәндәр, уны эҙләмәйҙәр ҙә, 40-50 баш һыйырҙы сиратлап көтәләр. "Малдан файҙа юҡ"... "Өйрәнгәнбеҙ, шуға ғына бөтөрмәйбеҙ"... "Берәүгә ҡалдырҙыҡ, һыйырһыҙ ишек алды бигерәк толҡаһыҙланыр ул"... Сәбәптәре тураһында кемдән генә һораһаң да, шундайыраҡ яуап ишетәһең. Элек совет аҡсаһы менән баҙарҙа ит 5 һум торҙо. Бөгөн ул уртаса - 500-600 самаһы. Иҡтисадсылар иҫәпләүенсә, элекке бер һум яҡынса әлеге 250-300-гә торошло. Тимәк, ит 1250-нән дә төшмәҫкә тейеш. Тик был хаҡҡа уны кем алып ашар икән?

Баҙар ҡанундарына ҡаршы килеү мөмкин түгел. Һорау иткә хаҡты күтәреү форсатын бирмәгәс, ауыл кешеһе уны үҙе өсөн ҙур файҙа менән һата алмай. Шулай ҙа һөт ризыҡтарын, итте үҙҙәре баҙарға сығарғандар табышһыҙ ҡалмай. Малдың ишле булыуы ла шарт был осраҡта. Асылда бит, бер һыйыр өсөн дә, бишәүҙе ҡарарға ла таң менән торорға кәрәк. Һүҙ юҡ, ауыр хеҙмәт ул. Бер башты һатып, кеҫәгә һалған аҡса күләменең бәләкәс кенә өлөшө түккән хәләл көсөңдө ҡаплай. Ҡалғаны - бесән, ем, башҡа тотоноуҙарға киткән сығымдар. Шуға, көсәнеп тир түгеү табыш менән ҡайтарылмай, малды кәсеп итеүҙән фәтүә юҡ, тип һығымталай күптәр.

"Һыйлы көнөң - һыйырҙа", ти халыҡ аҡылы. Был раҫлау хәҙерге тормошҡа тап киләме һуң? Элек ауылда ғаиләләрҙең туҡланыуы, аш-һыуының муллығы туранан-тура шәхси хужалыҡтарға бәйле булһа, хәҙер магазиндарҙа бөтәһе лә бар (оло юл буйында ятҡан ауылдарҙа, әлбиттә). Сағыштырмаса арзан да, сифаты инде - икенсе мәсьәлә. Ғөмүмән, һыйырҙа йән аҫрар мохтажлыҡ юҡ бөгөн. Йәштәр ситкә киткәс, ауыл ҡартая. Ололар иңенә мал бағыу ауыр йөк булып ята, күптәренең кәзә тоторлоҡ та хәле булмағас, ҡура бушап ҡала.

Тағы бер сәбәбе бар был күңелһеҙ күренештең - мал бит һине үҙенә бәйләй, эргәһенән ебәрмәй. Бер көнгә ҡунаҡҡа барып киләм тиһәң дә, кемдер йорт-ҡураңа күҙ-ҡолаҡ булып торорға тейеш, ә оҙайлы ялға, сәйәхәткә китеү тормошҡа ашмаҫлыҡ хыялдың ғына булып ҡала. Хәҙерге заман кешеһе өсөн был - ҙур юғалтыу, тиң-тоштарың рәтенән төшөп ҡалыу. Хатта ауырырға ла форсатың юҡ һинең.

Шулай итеп, шәхси хужалыҡтарҙа малдың ныҡ ҡыҫҡарыуы ауылдарҙың бөтә барыуының бер билдәһе булыуҙан тыш, уның һәм тотош илебеҙҙең социаль-иҡтисади йөҙөнөң бөгөнгө сағылышы ла. Дәүләт сәйәсәте, баҙар иҡтисады ҡанундары, бөгөнгө тормош ҡиммәттәренең, кеше фиғеленең, йәшәйешкә ҡараштың үҙгәреүе шундай һөҙөмтәгә килтерҙе.

***Малсылыҡ, мал бағыу иҡтисади төшөнсә булыуҙан тыш, мәҙәни, әхләҡи-мораль, тәрбиәүи йөкмәткегә эйә икәнен дә онотмайыҡ. Улар менән бергә быуаттар һуҙымында формалашҡан ғөрөф-ғәҙәт, йолалар, милли кәсептәр, милли ризыҡтар әҙерләү серҙәре юғала.***

Бала саҡта көтөүсенең быуын-быуын үрелгән оҙон ҡайыш сыбыртҡыһын күреп, быны нисек эшләйҙәр икән, тип аптырай инек. Ундай оҫталар һәр ауылда булды. Хәҙер ул кәсеп өлгөһөн сувенир магазиндарында ғына табырға мөмкин. Эйәр-өпсән, сбруя яһау, сана табаны, дуға бөгөү ҙә онотолған инде. Башҡортостанда йөҙ милләт вәкиле йәшәй, шулар араһынан тик башҡорттар ғына ҡорот ҡайната, тултырма, ҡаҙы тултыра, ҡымыҙ бешә. Хәл былайға барһа, был ризыҡтарҙың нимә икәнен дә оноторбоҙ. Йүрмәне бит хәҙер эшләмәйҙәр. Ас эсәкте түгел, эс-ҡарынды ла тотошлайы менән ташлай ҙа ҡуялар бит. Бысранғылары килмәй. Баш-тояҡты ла өтөп ыҙаланмайҙар.

Һуғым һуйыу, ҡаҙ өмәләрен үткәреүҙең үҙ йолалары, эш рәттәре бар. Улар ҙа йәйләп онотола. Мал салған ирҙәр ҙә юҡ иҫәбендә. Ошоға бәйле ғибрәтле бөгөнгө бер тормош хәленә туҡталып китәйем.



***✓ Ер мөнәсәбәттәрен, бүленгән пайҙарҙы рәсмиләштереү үтә лә мөһим ул. Был мәсьәләгә ҡул һелтәп ҡарау, халҡыбыҙ бишеге һаналған ауылдарҙың яҙмышын, ысынлап та, тамырынан хәл итеп ҡуйыуы ихтимал.***



Ҙур ауылдарҙың береһендә яңғыҙ йәшәгән тол ҡатын көзгә ҡарай күп итеп бройлер тауыҡтары үҫтереп ала. Уларҙы эш итеп ҡуйыр ваҡыт етә. Йолҡоп-таҙаларға ике әхирәтенә әйтә. Тик салырға ир кеше таба алмайҙар. Һирәк ҡалған белештәре, күршеләре төрлө сәбәптәр менән баш тарта, ундай эште белмәйем, тип тураһын әйтеүселәр ҙә була. "Йә, ни эшләйбеҙ, әхирәттәр?" - ти хужабикә. Инде ологая барған өс ҡатын бер-береһенә ҡараша. "Әллә инде, үҙем самалап ҡарамаһам", - тип яуаплай аптырағандан уларҙың береһе.

***Ҡатын-ҡыҙҙар башҡарыуында был ғәмәл беҙҙең халыҡ өсөн ситен, әлбиттә. Сараһыҙҙан хәҙер гүзәл зат өсөн дә мал ҡаны сығарыу ғәҙәти булып китмәһен ине ул.***

## "Тупраҡ башҡорт бәхетелер, бәхетебеҙҙең тәхетелер..."

Ауыл ул - йәшәү урыны, рухиәт сығанағы ғына түгел, ә ер биләү ҙә. Ер иһә - ижтимағи-сәйәси һәм иҡтисади төшөнсә. Тәүге әһәмиәтенә ҡағылмай, икенсеһе тураһында һүҙем.

Ерҙән файҙаланырға һәм табыш алырға була. Аҡсаға күсерелгән хаҡы ла бар уның. Малсылыҡ менән халҡыбыҙ үҙ йорт хужа-

## Бар ул өмөт, бар!..

Минең "Сиктең сигендә" тип аталған хикәйәмдә бөгөнгө ауыл яҙмышы һүрәтләнә. Унда шундай урын бар:

"...Рәсихҡа ҡараһам, ул тын ғына илай. Һыҡтамай ҙа, һыуҡылдамай ҙа. Күҙҙәренән йәштәр генә тама.

- Нишләп илайһың, Рәсих? - тип һорайым ғәжәпләнеп.

- Ауыл үлә, - тине ул. - Һин ҡайтып, ошолайтып күңелеңде баҫып китәһең. Ә беҙҙең балаларыбыҙ ҡайҙа ҡайтыр? Тыуған тупрағым, тыуған төйәгем, тип...

- Күпме эҙләһәм дә, бала саҡ һуҡмаҡтарымды таба алманым мин дә, Рәсих. Һаҡлай алмағанбыҙ уларҙы. Арттан килгән балаларға нимә ҡалыр?.. Белмәйем яуапты был һорауға.

- Улар ҡайтмаясаҡ. Еребеҙ ҙә китһә...

- Ике йылдан пенсияға сығам. Ҡайтып, ауылда төпләнергә иҫәбем.

- Бында һинә нимә бар?.. Үлергә йөрөгән ауылда.

- Ер алам, тырыштырып ҡарайым. Бәлки, башҡа фермерҙар менән берләшеп, ауылды күтәреп булыр. Киләсәк быуын хаҡына..."

Әҫәремдә күтәрелгән проблеманы хәл итеүҙә этәргес булырҙай юлдарҙың береһенә ишара яһайым. Ул да булһа - аҙмы-

***ренсенән, республикала билдәле шәхестәрҙең тыуған төйәге менән бәйләнештәрен нығыта, уларҙы ауылды борсоған проблемалар менән яҡындан танышырға этәрә. Икенсенән, ауылдың ысҡын мәсьәләләрен хәл итеү майҙансығы булып тора. 2024 йылда, мәҫәлән, "Атайсал" проекты сиктәрендә төрлө эштәргә үҙ эсенә алған 22 мең сара ғәмәлгә ашырылған.*** Ҡайҙалыр социаль объекттар, мәктәптәр, балалар баҡсалары, китапханалар бинаһары төҙөкләндерелгән, мәсеттәр һалынған, һуғыш ветерандарына обелисктар, балалар майҙансыҡтары ҡуйылған, зыяраттар, инештәр таҙартылған һәм уратып кәртәләп алынған.

## Кооперация - колхозға кире ҡайтыу түгел ул

***Әгәр хөкүмәт, тейешле хаҡын ҡуйып, халыҡтан һөт, ит, йәш мал һатып алыуҙы ойошторһа, бәлки, хәл яҡшыға үҙгәрер ине. Тик был әлеге шарттарҙа - тормошҡа ашмаҫ хыял ғына. Шулай ҙа мәсьәләне сисеүҙең юлы бар, ул - ауылдарҙа ауыл хужалығы буйынса ҡулланыусылар кооперацияһын булдырыу.***

Мин үҙем йыш барып йөрөгән ауылда (исемен атап тормайым) һөтсөлөк йүнәлешендә өс фермер эшләй. Дөйөм ал-

атай йортон ҡарауылы тоторға тырыша. Йәйҙәрен ҡайтып йәшәп киткәләр, туғандары менән йыйылышып, атай-әсәй рухына аяттар бағышлайҙар, балалары күңеленә тыуған ер төшөнсәһен һалалар.

***Киләһе быуын ата-бабалар төйәгенә тартылмаҫ, тип кем әйтә ала? Һәр замандың бит - үҙ зауығы, донъяны ҡабул итмеше, ижтимағи өҫтөнлөктәре, иҡтисади ҡанундары. Яҡшы юлдар, көслө һәм ышаныслы техника, инновациялар, үҫешкән элемтә саралары, интернет, һанлы технологиялар, яһалма зиһен (интеллект) - былар яҡын киләсәктә тормошто ңайырлылыҡ бер өлөшө булаҫаҡ. Шундай шарттарҙа, бәлки, мегаполистарҙа йәшәү урынһыҙ һаналыр, кеше үҙ асылына ынтылыр, тәбиғи мөхиткә тартылыр. Ошо хәлдә киләсәк быуындың, был - ата-бабаларым, тимәк, минең ерем, тип әйтер һәм ҡайтыр урыны булһын ине.*** Гәзитебеҙҙең быйылғы 11-се һанында Хәйбулла районы Әбделнасир ауылынан сыҡҡан, хәҙер Өфөлә йәшәгән алдынғы ҡарашлы йәштәр менән әңгәмә ҡорғайны Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай. Унда химия фәндәре кандидаты, Республика инженер лицей-интернаты уҡытыусыһы, Башҡорт дәүләт медицина университетының дөйөм химия кафедраһы доценты,

# СОЛТАН БУЛҒАНСЫ...

лығында ҡайһы заманда ла өҙөлмәй шөғөлләнде. Ә ер, өй тирәһендәге баҡсанан, картуфлыҡтан тыш, коллективлаштырыу осронан алып йә дәүләттеке, йә колхоздыҡы булды. Хәҙер ер биләү, уны эшкәртеү закон менән тыйылмай, киреһенсә, хуплана ғына. Ал, эшкәрт, мәнфәғәтен күр! Бының өсөн тәүшарт та бар - ауылда йәшәгән һәр кем пай биләмәләренә эйә. Тик үҙ хужалығыңды үҫтереү, фермерлыҡҡа, йә башҡа кәсепкә тотоноу бөтәһенен дә ҡулынан килмәй шул. Ер һөрөү, сәсеү, уныш йыйыу өсөн техника кәрәк, ә уны ҡайҙан алмаҡ. Кеше психологияһын да иҫәптән сығарып ташлап булмай. Совет власы осоронда тейешенсә түләнгән эшкә йөрөп, хеҙмәт хаҡы алып йәшәп өйрәнгәс, күптәр яңыға күнегеп китә алманы. Тәбиғәт тә ҡырыҫланды бит хәҙер. Урал арьяғы төбәген алһаҡ миҫал өсөн, бәлә яңғыҙ йөрөмәй, тигәндәй, ул яҡтағы райондарҙа колхоз-совхоздарҙың юҡҡа сығыуы йәйҙәрҙең рәткә ҡоро килеүе менән бергә барҙы. Һуңғы ике тиҫтә йылда ер ҡорғаҡһып кипте, йылға-күлдәр тартылды, йә бөтөнләй ҡороно. Климаттың глобаль үҙгәреүе касафатылыр инде ул. Крәҫтиән хужалыҡтары ойошторорға йөрьәт итеп, иген сәскән, күпләп мал баҡҡан фермерҙар артыҡ мандып китә алманы. Ҡул һелтәп, ситкә эш эҙләп сығып киткәндәр ҙә аралараһында юҡ түгел.

Буш ятҡан баҫыуҙарға, бөгөн булмаһа, иртәгә хужа табылыр. Тәбиғәт тә, бәлки, йомшарыр, бынан ары шифалы ямғырҙарын йәлләмәҫ. Шуға ла ер мөнәсәбәттәрен, бүленгән пайҙарҙы рәсмиләштереү үтә лә мөһим ул. Был мәсьәләгә ҡул һелтәп ҡарау, халҡыбыҙ бишеге һаналған ауылдарҙың яҙмышын, ысынлап та, тамырынан хәл итеп ҡуйыуы ихтимал. Һәм ул беҙҙең халыҡ файҙаһына булмаясаҡ. ***Ситтән килеп, пай ерҙәрен оҙайлы ваҡытҡа ҡуртымға алыусылар йышая. Закон ҡуртым килешеүен 49 йылға тиклем төҙөү хоҡуғын бирә. Ярты быуаттан һуң ул ерҙәрҙең кемдән кемгә, нисек күскәнен кемдәндәр тикшереп йә юллап йөрөүе бик икеле. XVII һәм XIX быуаттарҙа башҡорт ерҙәрен нисек законлы (төрлө вәғәҙәләр, алдау юлы менән) һәм туранантура законһыҙ тартып алһалар, тарих ҡабатланмаҫ, тип кем әйтер. Был инде - үрҙә атап кителгән ижтимағи-сәйәси юҫыкта ятҡан мәсьәлә.***

күпме бол туплаған һәр кемдең үҙ тыуған бишеген һаҡлап алып ҡалыу өсөн малынан өлөш сығарыуы, көсөн сарыф итеүе.

Ситтә эшҡыуарлыҡ өлкәһендә уңыш ҡаҙанған, эшләгән аҡсаһын тыуған ауылы үҫешенә һалған ир-уҙамандарыбыҙ байтаҡ. Йылайыр районы Матрай ауылынан яҡташым Ирек Фәхретдин улы Мәксүтов шундайҙарҙан. Ул үҙе Ямал-Ненец автономиялы округының Ноябрьск ҡалаһында йәшәй, "Лидер Транс" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең генераль директоры булып тора. "Башҡорт" совхозы бөлөп, баҫыуҙар, мал фермалары хужаһыҙ ҡалғас, Ирек Фәхретдин улы тыуған төбәгендә ауыл хужалығы тармағын тергеҙергә ҡарар итә. Бөгөнгө көндә фермер хужалығы 4 мең гектарҙан ашыу ерҙә иген, мал аҙығы культуралары сәсә, фермала 700 баш мал аҫрай. Бынан тыш, Ирек Мәксүтов тыуған ауылына һәм районына даими ярҙам күрһәтә, мәҙәни, спорт сараларының бағымсыһы булараҡ билдәле. Ул - Башҡортостанда 2021 йылда башланған һәм бөгөн киң ҡолас алған "Атайсал" проектын күтәреп алған уҙамандарҙың береһе лә.

Быйыл май айында үткән "Атайсал - Ватан көсө" республика форумында Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Солтан ауылында тыуып үҫкән Камил Хәйруллин "Солтан - бында ауылды тергеҙәбеҙ" проекты тураһында һөйләне. Ул үҙе күп балалы ғаиләлә буй еткерә, 50 йылға яҡын Санкт-Петербургта йәшәй. Ата-бабалары XIX быуаттан бирле ғүмер иткән Солтан ауылының бөтә барыуын күреп йәне әсенгән Камил Әгзәм улы, уны һаҡлап ҡалырға ниәт ҡыла. Үҙ иҫәбенә торлаҡ йорттар төҙөй һәм балалы йәш ғаиләләргә бушлай ҡуртымға бирә, сыр ҡайнатыу заводы аса, урындағы ауыл хужалығы етештереүселәренә ярҙам ҡулы һуҙа. Был мәктәпте һәм балалар баҡсаһын һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Зыялы милләттәшебеҙ хәҙер өлкә властары менән ауылға асфальт юл һалыу тураһында һөйләшеү алып бара, 10 миллион һумға төшкән уның проектын үҙ иҫәбенә эшләткән дә инде. Был турала "Киске Өфө" гәзите 20-се һанында мәғлүмәт биргәйне.

***Әйткәндәй, атап үтелгән "Атайсал" проекты ауылдарға иғтибарҙы көсәйтеү йәһәтенән ҙур әһәмиәткә эйә. Бе-***

ғанда сама менән 100-гә яҡын һыйыр һауа улар. Ун ике саҡрымда урынлашҡан һөт эшкәртеү цехы былтыр ябылып ҡуйҙы. Ни ҡылырға белмәй аптыраған фермерҙарҙың береһе ҡаймаҡ-майын, ҡорот-эремсеген ҡалаға алып барып, урамда тороп һата, икенсеһе һөттө фәлән менән үҙ машинаһында көн һайын 60 саҡрым арағa ташый. Өсөнсөһө башҡа юлын тапҡан. Ғөмүмән, ыҙалап етештерәләр, ыҙалап һаталар һәм, әлбиттә, килемдәре лә самалы ғына. Ауылда итселек йүнәлешен алып барған тағы бер егет бар. Әгәр ошо дүрт крәҫтиән хужалығы, кооперацияға берләшеп, һөт, ит ризыҡтары етештереүҙе генә түгел, һатыуҙы ла бергәләшеп үҙҙәре ойошторһа, кәсептәре күпкә отошлораҡ булыр ине.

***Ҡабул ителгән махсус закондар нигеҙендә кооператорҙарға дәүләт һәр яҡлап ярҙам күрһәтеүен әйтеп үтергә кәрәк. Шәхси хужалыҡтарҙың да ошо рәүешле берләшеүе һәр йәһәттән хуплана. 1995 йылдың 8 декабрендә ҡабул ителгән "Ауыл хужалығы кооперацияһы тураһында"ғы 193-сө һанлы федераль законға ярашлы, ауыл хужалығы етештереү кооперативы тип ауыл хужалығы продукцияһын етештереү, эшкәртеү һәм һатыу буйынса берлектәге эшмәкәрлек өсөн граждандар тарафынан булдырылған ауыл хужалығы кооперативы таныла. Етештереү кооперативы ағзаларының һаны 5 берәмектән дә (фермер йәки шәхси хужалыҡтар) кәм булмаҫҡа тейеш.***

Ғөмүмән алғанда, зарланып ултырырға түгел, ә ысынбарлыҡты нисек бар шулай ҡабул итеп, ауылда мал бағыуҙы яңыса ҡороу тураһында уйларға ваҡыт. Шул саҡта киләсәккә ышаныс та уяныр.

## Ата-бабалар нигеҙе ҡоромаһын

*"Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,*
*Бүтәнсә юҡ сарабыҙ.*
*Тупраҡ китһә, һау бул, донъя,*
*Өҙөлмәктер самабыҙ",* - тип халҡыбыҙға оран һала Шәйехзада Бабич үҙенең "Тупраҡ" шиғырында.

Киң тарала барған тағы бер матур күренештән сығып, бәлки, ауылдар яҙмышы улай уҡ өмөтһөҙ түгелдер, тиген уй килә. Бик күптәр, ситтә йәшәп тә, бушап ҡалған

Башҡортостан Республикаһы Олимпиада хәрәкәте наставниктары ассоциацияһы наставнигы Айнур Ғүмәров бына нимә ти: "Әле килеп техник прогресс шундай тиҙлектә бара: бер нисә йылдан шул уҡ Хәйбуллаға ике-өс сәғәттә капсулаға ултырып, поезд менән осоп барып етергә мөмкин буласаҡ. Ул осраҡта мин мотлаҡ рәүештә Хәйбуллала, шул уҡ Әбделнасирҙа йәшәйәсәкмен. Мин ауылдан Өфөгә эсдүрт көнгә килеп, ял көндәренә тыуған яғыма ҡайтасаҡмын. Был көн ҡотолғоһоҙ рәүештә киләсәк. Хәҙер деурбанизация процесы башланды. Элек кешеләр Урал арьяғынан, Ирәндек буйынан белем алыр өсөн, тормош кимәлен күтәрер өсөн ҡалаларға юлланһа, хәҙер кире ағым башланасаҡ. Ул сағында шул уҡ концерт, спектакль премьераһын ҡарарға Өфөгә генә түгел, Ирәндек буйҙарынан шул уҡ Мәскәүгә лә барып, шул уҡ көндө кире әйләнеп ҡайтыу мөмкин буласаҡ. Ул сағында, һеҙ әйткәнсә, фән үҫеше ауылды һаҡларға булышлыҡ итәсәк".

***Тыуған ауыл, тимәк, халҡыбыҙҙың үткәне менән бәйләнештең быуа-быуа өҙөлөргә тороуын аңлап, ғаиләлә, туғандар, ырыу-аралар ҡоронда, бер уйға килеп, берҙән-бер дөрөҫ ҡарар ҡабул итеү зарурлығы килеп тыуҙы бөгөн. Ул да булһа - һәр кемдең ер хоҡуҡтарын рәсмиләштереүе, ҡулына тейешле документтар алыуы, атай-әсәйҙән ҡалған пай майҙандарын мираҫ итеп үҙенә теркәүе. Сит ерҙең гөлөнән үҙ ереңдең дегәнәге артыҡ, тип юҡҡа әйтмәгән бит халҡыбыҙ.***

Ҡайҙа ғына юҡ хәҙер башҡорт. Ил буйлап ҡына түгел, бөтә донъяға һибелгән. Юғары хәрәкәттә булған заманда йәшәгәс, был хәлгә кеше артыҡ аптырамай ҙа. Ләкин килер бер көн: тыуған тупраҡ көсө, ата-бабалар аманаты, тәхәт бирмәй, һәр башҡортто Уралына әйҙәр. "Ай Йола" төркөмөнөң "Һомай" йыры шул саҡырыуға ишара түгелме ни? Аталы-ҡыҙлы Шәйхетдиновтар үҙҙәре лә сит ерҙәргә төрлө телдәрҙә ҙур сәхнәләрҙә уңышлы сығыш яһай. Ә кин танылыу туған телдә башҡарылған, "Урал батыр" эпосы мотивтарына бәйле йыр аша килә. Ошо түгелме ни тупраҡ көсө? Уйланырға урын бар, һис шикһеҙ.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН.**

***✓ Һуңғы оло ҡайғы килгәндән һуң, әсәйемдең әсе күҙ йәштәре түгеп илағаны һаман хәтеремдә. "Бөтә балаларым да, бабайым да имен саҡта ауыр тойолған заманалар иң бәхетле көндәрем булған икән..."***



# ИСЕМЕМ - АЛАҠАЙ

Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ

(Донъяуи хикәйә)

Әле лә, шул күренеште иҫкә төшөрәм дә, илайым. Миненсә, атайым үҙен бер ваҡытта ла, бер ҡасан да, хатта һуғыш мәлендә күҙе йәрәхәтләнгән саҡта ла, меҫкен итеп күрһәтмәгән. Тик шул ваҡытта, бер мәртәбә генә, ул үҙенең йомшаҡ күңелле, бирешеүсән кеше була белеүен дә күрһәтте. Бына шуға илайым да инде, сөнки атайым бихисап кеше араһынан тик миңә генә үҙенең асылын тулыһынса күрһәтергә баҙнат итте. Тимәк, уның иң яратҡан кешеһе мин булғанмын. Илауымдың сәбәбе шунда: үҙе иҫән саҡта уға ҡарата йөрөткән тойғоларымды әйтеп өлгөрә алмай ҡалдым. Бөгөн, һуңлап булһа ла, әйтәйем: атайым, атаҡайым, мин дә һине бик ярattым! Бик-бик яраттым!

Әйткәнемсә, ала һыйыр ҙа һатылды, уның артынса уҡ тормошобоҙҙан ҡот та китте. Ышанһағыҙ - ышанығыҙ, ышанмаһағыҙ - ышанмағыҙ, Ҡоттоң китеүенә беҙ өс кеше шаһит булдыҡ. Ул мәлдә Алаҡайыбыҙ иҫән ине әле: һатылырына ярты йыл самаһы ваҡыт ҡалғайны. Ике ағайым өйҙә юҡ: улар Сибайға уҡырға киткәйне инде.

Ҡышҡы төндәрҙең береһендә, йоҡлап ятһам, кемдер, ышыра баҫып, тышҡа сығып китте. Өй ишеге асылғаны, солан ишеге шартылдап ябылғаны бик асыҡ ишетелде. Ҡабаланмай ғына һалмаҡ атлағанлыҡтан, сығып китеүсе йә атайым, йә әсәйемдер, тип уйланым. Бер ни тиклем ятҡас, кәүҙәмде бороп, уңайлабыраҡ ятайым тиһәм, төпкө бүлмәнән әсәйемдең тауышы ишетелде: "Самат! Самат!" "Мин бында", - тип яуапланым ятҡан урынымдан. "Кем сығып китте һуң?" "Атайҙыр, - тинем, - мин уға оҡшаттым". "Атаң бында лаһа, - тине әсәйем, бер аҙ ризаһыҙлыҡ менән. - Һин сыҡҡанһыңдыр. Шул арала сыға һалып та индеңме?" Был юлы минең яҡтан ризаһыҙлыҡ белдерелде: "Мин урынымдан торғаным да юҡ!" Шул саҡ төпкө бүлмәнән атайымдың да тауышы ишетелде: "Кемдер сыҡты. Ҡана ҡарап инәйем әле". Ул минең яҡҡа килеп сыҡты, бүлмәне яҡтыртты. Мин дә торҙом. Ҡараныҡ: ишек келәһе кис эленгән көйө. Соланға сыҡтыҡ - шул уҡ хәл. Солан ишеген асып, тышҡа күҙ һалдыҡ. Ай яҡтыһында йымылдап ятҡан аҡҡош мамығы кеүек үтә күренмәле елбәҙәк ҡар өҫтөндә эҙ-фәлән юҡ ине. Кире өйгә индек. Аптырашып, ошо хәл хаҡында оҙаҡ ҡына һөйләшеп яттыҡ. Өсөбөҙ ҙә асыҡ ҡына ишеткәйне шул: кемдер тауышланып сығып китте, ә кем икәне билдәһеҙ.

Ахыр сиктә әсәйем иҙәндә йоҡлап ятҡан һеңле-ҡустыларыбыҙҙы ла барлап сыҡты - улар урынында ине. Өсөбөҙ ҙә, ни әйтергә лә белмәйенсә, яңынан йоҡоға талдыҡ. Был ваҡиға яйлап онотолдо. Ошо хәтирәләремде яҙып ултырғанда, шул ваҡытта аптырағандарыбыҙ яңынан иҫкә төштө. Мин бөгөн шундай һығымтаға киләм: ана шул төндә йортобоҙҙан Ҡот сығып китте. "Бәхетле заманаларығыҙ үтеп бара, хөрмәтлеләрем. Мин һеҙҙе ташлап китәм, әҙер булығыҙ", - тип әйтергә теләгәндер Ул үҙ телендә.

Бәхетле йәшәгәнебеҙҙә теүәл бер тиҫтә йән инек беҙ. Бөгөн шуларҙан алты йән ҡалдыҡ. Китkәндәргә лә ауыр, имен ҡалғандарына ла еңел түгел. Һуңғыларына донъяның әсеһен, сөсөһөнә ҡарағанда, күберәк татырға тура килде. Һуңғы оло ҡайғы килгәндән һуң, әсәйемдең әсе күҙ йәштәре түгеп илағаны һаман хәтеремдә. "Бөтә балаларым да, бабайым да имен саҡта ауыр тойолған заманалар иң бәхетле көндәрем булған икән... Йонсоу көндәрҙә һеҙҙең ҡойоға батҡан итектәрегеҙҙе йыуып арығандарымда ниңә генә уфтандым икән, Хоҙайым! Соҡорайышып ҡатҡан ете пар итегегеҙ яңынан теҙелешеп ултырыуын бик теләр инем дә бит, кире ҡайтарып булмай шул үткән көндәрҙе!" Әсәйем ошо һүҙҙәрҙе әйтеп һыҡтағанда, йөрәкәйҙәрем ярылып китә яҙҙы. Минең өсөн дә ул йылдар үтә ҡәҙерле ине шул...

Ала һыйырҙың рәнйеүҙәре иң алда атайымдың башына төштө. Иткә тапшырылыуына ун өс ай үтеп өлгөрҙөмө-юҡмы, уның йәне лә Алаҡайҙыҡы артынан осоп китте. Һуңғы дүрт көнөнөң өс көнөндә ул тәгәрәп йөрөп ауырыны. Дүртенсе көнөндә матур итеп кейенде, балалары менән ипле генә итеп, йылмайып хушлашты ла Баймаҡҡа китте. Иртәгеһенә үк кире әйләнеп ҡайтты, тик үлек хәлендә. Шул йылда уға ни бары дүрт тиҫтә лә дүрт йәш кенә тулғайны. Шулай ҙа яҙмыш уға ҡарата мәрхәмәтлерәк булды - ғаиләһенә төшәсәк ҡайғыларҙы күреүҙән Аллаһ Тәғәлә уны азат итте.

Атайым иҫ киткес түҙемле, сабыр һәм тырыш кеше булды. Мөәзин булған өсөн атаһы Фаруҡты Өфөгә килтереп һәләк иткәстәр, иң өлкән бала булараҡ, үҙенән бәләкәйерәк ҡусты-һеңлеләрен аҫрау өсөн, ун бер йәшенән өлкәндәр менән бер ҡатар эшләп йөрөргә тура килә уға. Яҙҙарын, боҙло һыуҙа яланаяҡ тороп, Кейәүештенән һал ағыҙа, йәйҙәрен бесән саба, мал ҡарай. Уҡыуға ла бик һәләтле була. "Атаң өс синыф белеме менән, дүрт йыл уҡымай йөрөп, алтынсыла беҙгә килеп ҡушылып уҡып китте, - тип һөйләй торғайны әсәйем. - Әммә беҙҙе бик тиҙ ҡыуып етте: йыл аҙағына иң яҡшы уҡыған балалар рәтендә йөрөнө". Атайым күп һөйләргә яратманы, күҙ ҡарашы менән генә етәкселек итте беҙҙе тәрбиәләгәндә. Эште, ялды дөрөҫ сиратлаштырып, бөтә нәмәне тейешенсә башҡарырға өйрәтте ул балаларын. Үҙенең тормошо, һуғышта күргән михнәттәре хаҡында бер ауыҙ һүҙ әйткәне булманы. Шул уҡ ваҡытта тырызы тиҙ ҡубыусан булды. Үсекһә, аҙналар буйы яҙыла алмауы менән әсәйемдең теңкәһен ҡорота торғайны. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ уны хөрмәт иттек һәм яраттыҡ.

Алаҡайҙың һөтөн иң күп имгән бала булғанғалыр инде, Фәрит ағайыма һынауҙарҙың иң ҡатылары төштө. Уға ун бер йыллыҡ уҡыу, өс йыллыҡ хәрби хеҙмәт эләкте. Хәрби хеҙмәттә саҡта китер алдынан ғына танышҡан ҡыҙы фажиғәле һәләк булды.

Имен сағында ул ҡыҙҙы мин бер тапҡыр ғына күреп ҡалдым. Башланғыс мәктәп уҡытыусыларын әҙерләгән уҡыу йортонда тәүге йыл ғына уҡый инем мин ул мәлдә. Кемдер мине, әйҙә, еңгәнде күрһәтәм, тип, күшеләге ятаҡҡа алып китте.

Яҙғы йылы иртә ине. Сәғәт ун бер тирәһе булғандыр. Яҡты, таҙа бер бүлмәгә килеп индек. Бүлмә эсендә яҡтылыҡ менән күләгә бер-береһе менән шаярышып уйнай ине. Тәҙрә эргәһендә үҫкән бейек тирәктәр елгә сайҡалған саҡта, ҡояш бәпкәләре йә осоп китәләр, йә кире урындарына килеп ҡуналар. Мине алып йөрөгән кеше бүлмәләге өс ҡыҙ менән бер аҙ күңелле генә һөйләшеп торҙо ла, миңә күрһәтеп: "Фәриттең ҡустыһы Самат була был", - тине. Сәрүәр бүлмә уртаһындағы өҫтәл артында тора ине. "Фәриттең ҡустыһы" тигәнде ишеткәс, ул иғтибар менән миңә ҡараны. Мин дә, йылмайып, уға текләнем.

Бик һөйкөмлө башҡорт ҡыҙы булып сыҡты Сәрүәр! Бөтә булмышынан, ҡарашынан, һынынан, тәненән көс һәм ирәбәлек бөркөлөп тора ине уның. Буласаҡ еңгәм бөхтә итеп үтекләнгән ап-аҡ күлдәк һәм ҡап-ҡара йөбәләк кейгәйне. Сәрүәрҙә иң һоҡландырғаны уның ирендәре булды. Улар ер еләге кеүек ҡыҙыл һәм тулы ине. Берберебеҙгә ҡарашып торғандан һуң, ул көлөп ебәрҙе. Ҡара сәстәрен нәзәкәтле хәрәкәт менән артҡа ташланы ла, аҡ йөҙөн тәҙрә яғына бороп, ҡапыл шул яҡҡа атлап китте... Сәрүәрҙең хәрәкәттәрендә, тышҡы күренешендә, ҡылыҡтарында минең өсөн бик яҡын да һәм, шул уҡ ваҡытта, бик һағындырғыс та, бойоҡторғос та бер нәмә бар ине. Ҡапыл, нишләптер, күңелем тулып китте, мине оло һағыш солғап алды. Ошо ҡыҙ минең өсөн үтә ҡәҙерле лә, үтә яҡын да булған кемделер хәтерләтте. Кем булырға мөмкин ине һуң ул?!

Ҡапыл иҫемә төштө: Сәрүәр миңә Алаҡайыбыҙҙы хәтерләтте! Әйе, ул да шул ике төҫтөң - ҡара менән аҡтың - ҡабатланмаҫ берҙәмлегенән торҙо бит! Ә атлап китеүҙәре: икеһенә лә шул уҡ еңеллек, әйтеп бөтөргөһөҙ күркәмлек хас. Айырма тик шунда ғына: Алаҡайҙың башын гәрәбә төҫөндәге мөгөҙ осҡоналары биҙәгән булһа, Сәрүәрҙе еләк кеүек тулып бешкән ирендәре матурлап торҙо...

Яҙҙың һуңғы айының тәүге көнөндә Сәрүәр Талҡаҫ күлендә батып үлде. Кемдәрҙер менән ул да күл уртаһына йөҙөп киткән. Кәмә тишек булып, бөтәһе лә һыу эсендә тороп ҡалған. Егеттәр араһынан бер генә ҡорбан да булманы, ә бына Сәрүәрҙе күл тереләй йотто. Уның кәүҙәһен бер нисә көн таба алманылар. Аҙағыраҡ ҡына һалҡын тулҡындар уны ярға килтереп һары ҡамыштар өҫтөнә һалып киткән.

...Мәйеттәр һаҡланған йорт беҙҙең ятаҡ эргәһендә генә булып сыҡты. Мин дә, шунда барып, ағайыма - ҡатын, миңә - еңгә, атай-әсәйемә - килен булырға яҙмаған ҡыҙға һуңғы тапҡыр ҡарап торҙом. Уның кәүҙәһенә мин баш яғынан яҡынлаштым. Күкрәгенән түбән яғы ҡалын туҡыма менән ябылғайны. Туҡыманың өҫкө сите Сәрүәрҙең ҡалҡыу күкрәктәре өҫтөнән үткәне хәтерҙә. Тере саҡта ап-аҡ итеп йыуылған һәм бөхтә итеп үтекләнгән күлдәге таушалып, һарғылт төҫкә ингәйне. Күлдәк урыны-урыны менән Талҡаҫ ҡомонан сыбарланғайны. Йөҙө тыныс, үтә тыныс ине Сәрүәрҙең. Йомоҡ күҙҙәренә ҡараһаң, йоҡлағандай ята ине ул. Ирендәре һис кенә лә матурлығын юғалтмағайны, тик саҡ ҡына сөгөлдөр төҫөнә ингәйне. Мин, ағайымдың балаларына - әсә, үҙемә еңгә булырға яҙмаған ҡыҙ менән өнһөҙ генә хушлашып, тышҡа сыҡтым. Керпектәрем ҡоп-ҡоро булһа ла, күҙ йәштәренән торған ҡайнар диңгеҙ эскенәләремдә аяуһыҙ өтә ине.

Ғаиләбеҙҙәге ете бала араһынан йолҡоп алынған тәүге йән Әхәт ағайымдыҡы булды. Ағайым менән үҙемдең арала булған мөнәсәбәттәрҙе әле лә аңлап етә алмайым. Икәүбеҙ айырылғыһыҙ дуҫлашып киткән мәлдәр ҙә, урам тултырып тас та тос һуғышып киткән саҡтар ҙа йыш булды. Бығa шул сәбәпсе булғандыр: арабыҙҙағы йәш айырмаһы ике йылға ла тулмай ине бит. Бер үк әйбергә дәғүә иткән, бер үк ҡыҙҙы яратҡан, бер үк китапты икебеҙ бер юлы уҡыған мәлдә көс һынашырға тура килде, ә бер үк дошман менән көрәшкән, ауыр эште тиҙ башҡарырға кәрәк булған мәлдәрҙә татыулашып китә торғайныҡ.

Ғаиләгеҙҙәге иң аҡыллы кеше кем булды, тип һораһағыҙ, шикләнмәйенсә әйтә алам: ул Әхәт ағайым булды. Ун биш йәшендә беҙҙән, бала-сағанан, ғына түгел, атайымдан да уҡымышлыраҡ булып китте ул. Урыҫ телен ул шундай яҡшы белде, хатта юғары белемле тел уҡытыусылары ла уны һоҡланып тыңлай торғайны. Әсәйем уға иркәләп "Ҡушбаш" тип өндәште. Бының сәбәбе шунда: Әхәт ағайымдың башы ике өлөштән торҙо. Башы алдан ҡәҙимге генә башланып китһә лә, йомороланырға тейешле урында тағы ярты баш самаһы артҡа сығыбыраҡ торғаны иҫтә ҡалған. Сәстәре бик матур ине уның: ҡарағусҡыл төҫтә булды һәм еңелсә генә бөҙрәләнеп торҙо улар. Йөҙгә лә ҡупшы ине ағайым. Шуны онота алмайым: туйымда ҡайынбикәләремдең береһе миңә күҙ һирпеп алды ла, йәлләберәк: "Әхәт ҡоҙа Сибайҙың иң матур ире икән", - тип ҡуйҙы. Кәйефем бер аҙға ҡырылып торҙо ла аҙаҡ яҙылды - дөрөҫ һүҙгә ни әйтәһең инде!

Етмеш етенсе йылдың ҡышында беҙ Әхәт ағайымдың утыҙ йәшен билдәләп үттек. Мәжлескә туғандарҙың һәммәһе лә килгәйне. Инде табынды асайыҡ тиһәк, баш өҫтөндә янып торған өс шәмдең иң яҡтыһы һүнде лә ҡуйҙы. Әхәт ағайым, бер аҙ сабыр итегеҙ, туғандар, тип шәмде яндырыу менән мәшғүл булып китте. Тик, күпме генә тырышмаһын, яндыра алманы. Мәжлесте шул һүрәнерәк яҡтылыҡта башлап ебәрергә тура килде. Мин, ағайыма бүләккә тип, ҡумтаға һәйбәтләп тултырылған ҡоралдар йыйылмаһы алғайным. Биш ай үттеме-юҡмы, шул ҡоралдар араһынан бәләкәй генә сүкеште алып, ҡыҙыл бәрхәт менән көпләнгән табуттың бер мөйөшөндәге сөйҙәрҙе яҡшылап ҡатып сыҡтым. Табут эсендә Әхәт ағайымдың йәнһеҙ кәүҙәһе ята ине.

Үлер алдынан ағайым бөтә ҡаланы урап сыҡты: ҡайһы бер туғандарына инеп бурыстарын бирҙе, бәғзеләре менән һөйләшеп кенә ултырҙы. Бығa мин, әлбиттә, үҙем шаһит булманым - аҙаҡ ишеткәндәрҙе йомғаҡлап ҡына әйтәм. Беҙгә килеп ингәндә, Әхәт ағайым әҙерәк арыған һымағыраҡ ине. "Эшкә бармаҫҡа ла уйлағайным, ниңәлер эс йомшабыраҡ тора. Шулай ҙа барырға булдым. Бөгөн төнгөләккә - ике сәғәт ярымдан ер аҫтына төшәбеҙ", - тигәне иҫтә ҡалған. Сығыр алдынан ул ишекте асты, асҡан көйө нурлы йөҙөн бороп миңә бер аҙ ҡарап торҙо. Мин дә уға ҡарап йылмайып ултырҙым. Ни өсөндөр миңә бик-бик рәхәт ине. Ағайым сыға биргән һымағыраҡ итте лә, кире инеп: "Ҡана, ошо тотҡаны һөртәйем әле. Балаларға минән ауырыу йоғоп ҡуймаһын", - тине. Ошо һүҙҙәрҙе әйткән мәл-

✔ ***Шулар араһында тик бер генә кеше бәхетле. Ул кеше - мин. Бәхетемдең серен шуның менән аңлатам: йәшәйеш серҙәрен сисергә өйрәндем мин. Шуға ла бер нимәнән дә, бер кемдән дә ҡурҡмайым.***



дә йәшел бишмәтенең сабыуы менән ишек тотҡаһын һөртөп торҙо.

Ағайым сығып китте, уның артынса уҡ мунсаға юлландым. Йыуынып сығыуыма тәбиғәт йонсһенеп киткәйне, сөнки әле генә йәйлы ямғыр яуып үткәйне. Болоттарҙың ҡойроғо, ямғыр һыҙаттарын ҡыя төшөрөп, Ирәндек яғына китеп бара ине. Шул саҡ көслө шартлау яңғыраны. Файҙалы ҡаҙылдыҡтар сығарыу өсөн өңөлгән ғәләмәт ҙур соҡор өҫтөнә ҡап-ҡара төтөн бағанаһы ҡалҡып сыҡты.

Әүлиә булһам, ошо ямғырҙың һәм шул төтөндөң ни тиклем дә хәүефле икәнен һис шикһеҙ аңлар инем. Ағайым эшләгән урынға йүгереп барып етер ҙә, аяғына ҡолап: "Төшмә, зинһар өсөн, төшмә бөгөн ер аҫтына! Төшмә!!!" - тип ялбарыр инем. Улай эшләмәнем шул: бөгөн дә әүлиә түгелмен, ул мәлдә лә әүлиә түгел инем. Бер нәмә лә уйламай, ҡайтып киттем. Ҡайтып етеп сәй эсеп ултырғанымда ла ағайым иҫән булған әле. Киске биш тирәһендә уның эргәһендә барған мөһабәт кәүҙәле урыҫ егете өнһөҙ генә ергә ауған. Уға ярҙамға ташланған ағайым да, ағыулы һауа һулап, иптәше эргәһенә тауышһыҙ ғына барып йығылған. Ҡалған ирҙәр, аҡылдан яҙғандай, киреҡ яҡҡа һыпыртҡан. Улар бөтәһе лә имен ҡалды, ә ағайым менән урыҫ егетенең йәндәре, парланышып, беҙ белмәгән яҡтарға осоп китте. Ошо ике йән, тәғәйенләнгән урындарына осоп барғанында, үҙ исемдәрен ҡысҡырған тауыш ишетә. Ағайым менән урыҫ егетен ҡотҡарам тип һәләк булған Шәфҡәт исемле батыр егеттең йәне булып сыға был.

Шәфҡәт төп тәрҡөмдән арттараҡ килгән була, һәм ҡасып барыусы ирҙәр уның эргәһенән йән-фарман йүгереп үтә. Кемеһеләр, бер аҙға ғына туҡтап: "Һауа... ағыуланған... кире борол", - тип бышылдай ҙа башҡалар артынан төшә. Шәфҡәт әрнеүле тауыш менән: "Ҡурҡаҡтар!" - тип ҡысҡыра ла, ағыулы һауаны үткәрмәй торған битлектең мөштөгөн ауыҙына ҡабып, ағайым менән урыҫ егетенең кәүҙәләре ятҡан яҡҡа ташлана. Тик, дуҫтарына ун биш-егерме самаһы аҙым ҡалғас, Шәфҡәт тә иҫһеҙ килеш ергә ауа, сөнки ни сәбәптәндер ауыҙынан мөштөгө ысҡынып китә.

Ағыуланған һауа һулап, өс егет ана шулай, ғазапланмайынса ғына, яҡты донъянан китеп барҙы. Уларҙың иң олоһо Әхәт ағайым булды - уға утыҙ йәш тулғайны. Ҡәҙерләп үҫтергән ҡыҙы Әлфиә менән улы Айрат етем ҡалдылар. Шәфҡәт иһә тәүге балаһының, ҡыҙ ғынаһының, тыуыуына шаһит булырға ла өлгөрә алмай ҡалды, ә урыҫ егетенең тәүге балаһы, ҡыҙына, бер йәш тә тулмағайны...

Азат ҡустым да беҙҙең арала оҙаҡ йәшәмәне. Алты малай, бер ҡыҙ араһындағы иң изгелекле йән ул булғандыр. Уның ҡыҫҡа ғына ғүмеркәйҙәре ситтә үтте. Ҡустымдың яҙмышын мин, нишләптер, Туҡай яҙмышына оҡшатып ҡуям. Ғаилә йылылығы татырға, үҙен яратҡан, үҙен аңлаған кешеләр араһында йәшәргә насип булманы уға. Донъяға бишенсе бала булып килгәнлектән, ҡустымды сабый көйө генә өләсәйем тәрбиәһенә бирҙеләр. Ҡайтып бер аҙ үҙебеҙҙә йәшәгәйне, әсәйем, "кеше итәм" тип, уны Өфөнөң атаҡлы йыйылма мәктәбенә ебәрҙе. Был мәктәпте ҡустым яратманы. Яҙған хаттарының береһендә әйтелгән ошо ике һөйләм әле лә мейемдә әйләнеп йөрөй: "Эштәр һәйбәт бара. Салбарҙы хәҙдөләр..."

Ике йыл хәрби хеҙмәтен тултырып ҡайтҡас, уға димләп кәләш алып бирҙек. Юл аша ғына йәшәгән ҡайны-ҡәйнәһе, өйөндәге ҡатыны менән тиҫтә йыл самаһы мәшәҡәтләнгәндән һуң, Азат ҡустым үҙ теләге менән алыҫтарға, әҙәм заттарына таныш булмаған яҡтарға, китеп барҙы. Үҙенең күңелен йылыта алмаған ғаиләне, күҙҙәренән һалҡынлыҡ бөркөлөп торған яңы туғандары менән ипле генә хушлашҡандыр ҙа дөмҡара донъяға һикергәндер...

* * *

Алаҡайҙы иткә тапшырыр алдынан, һыйырыбыҙҙы ла индереп, теүәл бер тиҫтә йән инек беҙ. Әле шуларҙың алтауһы, фани донъяның һүрән генә рәхәтлектәренән аҙ-маҙ ауыҙ итеп, ҡайғы-хәсрәттәрен һемереп эсеп, яҙмыштың көн дә асылып-ябылып торған биттәрен уҡый-уҡый, ғүмер итә. Шулар араһында тик бер генә кеше бәхетле. Ул кеше - мин. Бәхетемдең серен шуның менән аңлатам: йәшәйеш серҙәрен сисергә өйрәндем мин. Шуға ла бер нимәнән дә, бер кемдән дә ҡурҡмайым. Хатта әҙәми заттарҙы дерелдәтеп тотҡан Әжәл дә бер ниндәй хәүефләнеү уятмай миндә. Дөрөҫөрәге, иң тоғро кәңәшсемә әйләнде Ул.

Йәшәйеш серҙәрен сисергә нисек өйрәндем һуң? Иң алда эсеүҙе бөтөнләйгә ташланым. Беренсе аҙымым шул булды. Мәжлестәрҙә, башҡа шуның кеүек урындарҙа эскән кешеләрҙең нисек хайуанға әйләнеүен күҙәтеп ултырған һайын, араҡының ни тиклем дә ыштырғаныс, ни тиклем дә хәшәрәт нәмә икәненә ныҡыраҡ төшөнә барҙым. Икенсе аҙымым шул булды - быйыл ике йыл инде ауыҙыма ит тә, балыҡ та, йомортҡа ла алғаным юҡ. Ауыр аҙыҡ ашамағас, үҙемде тымыҡ һауала еңелсә генә елберҙәп йөҙгән үрмәкес ауына оҡшатам.

Икенсе аҙымымды туғандарымдың, таныштарымдың күбеһе оҡшатып етмәй. "Башҡорт борон-борондан ит ашаған, ә һин ашамайһың. Тимәк, һин башҡорт түгел", - тиҙәр ҡайһы берәүҙәре. Мин - башҡорт. Ошондай тыныс та, түҙемле лә, эскерһеҙ ҙә халыҡ араһында тыуғаныма, тәрбиәләнеүемә яҙмышыма сикһеҙ рәхмәтлемен. Халҡымды мин бөтә күңелем менән яратам, тик тойғоларымды нисек әйтеп бирергә генә белмәйем. Бәлки, бер заман өйрәнермен.

Өсөнсө аҙымың нимәнән мәслихәт, тип һорарһығыҙ, бәлки. Әлегә әйтә алмайым. Мин бит үҙем һөйләмәйем - ала һыйыр бәйән иткәндәрҙе ҡағыҙ биттәренә төшөрә генә барам. Әле бына һыйырҡайым ҡолағыма шыбырлай: "Ошо әйткәндәрҙе яҙ ҙа туҡта. Нөктә ҡуй".

Алаҡайҙы тыңламай булдыра алмайым, сөнки ҡаныма, тәнемә, йәнемә, рухыма һеңешкән ул. Исемем дә Самат түгел. Исемем - Алаҡай.

Яҙып бөттөм 2002 йылдың ун етенсе ғинуарында.

**(Аҙағы. Башы 38-42-се һандарҙа).**

**КӨЛӨП АЛАЙЫҠ!**

# ҺЫҢАР НӘСКЕЙ ОНОТОЛҒАН



Бөгөн эшкә барышлай ФОК-ка инеп сығырға булдым әле. "Нишләп?" - тиһегеҙме. Нишләп... тип шул инде... шампунь ятып ҡалған. Берәүгә лә әйтә күрмәгеҙ. Сөнки барыбер кемдер, әй, әттәгенәһе, башыңды нисек онотманың, тип әйтәсәк. Ә минең күңел нескә генә. Бындай ауыр һүҙҙәрҙе, нишләптер, ауыр кисерәм. Шуға башҡаларҙың белмәүе хәйерле булыр. Ә шампунь кисә кис волейбол уйынынан һуң тороп ҡалған. Күңелле итеп уйнаныҡ. Аҙаҡ душ индек. Бына шул мәлдә шампунь онотолоп ҡалған да инде. Үҙемә ҡалһа, сумкама һалып алған һымаҡ инем. Ҡайтып ҡараһам, юҡ шампунь. Онотҡанмын. Бына шул ҡәһәр һуҡҡан шампунды алырға инеп барам әле ФОК-ка. Ирҙәрҙең сисенеү-кейенеү бүлмәһенә барып инһәм, йыйыштырыусы апай беҙҙең бүлмәнең иҙәнен йыуып йөрөй. Итәғәтле генә һаулыҡ һораштым.

- Һаумыһығыҙ!

Апай эшенән туҡтамай ғына миңә яуап бирә.

- Һаубыҙ, һаубыҙ.

Бүлмә иҙәнен бер аҙ тызый биргәс, эшен туҡтатып, ҡараштарын миңә юнәлтә.

- Йә, нәмәнде онототтоң?

Мин тик торғанда ҡаушап алдым да киттем.

- Теге... ней... кисә... шампунь тороп ҡалған... шуны алам, тип ингәйнем.

Апай көләмһерәп ҡуя.

- Аһ-аһ, нишләп тороп ҡалды икән ул? Әйҙә, ҡайттыҡ, тип әйткәйнеңме һуң?

Аптырағас, яуырындарҙы һикертеп ҡуям.

- Әйтеүен әйтмәгәйнем дә ул. Ә былай сумкаға һалған һымаҡ инем...

Минең һөйләп бөткәндә апай көтмәй. Ул тәҙрә төбөнә ымлай.

- Йә, ҡайһыһы һинеке?

Мин бер мәлгә аптырап ҡалам. Сөнки тәҙрә төбөндә өс шампунь ултыра. Ә ҡайһыһы икән минеке? Бынау ситтә ултырғаны микән? Әллә теге яҡ ситтәгеһе микән? Әллә уртала урын алған ҡыҙыл төҫтәгеһе микән? Былай бына шул ҡыҙылы күңелгә ятышлы ғына. Ә шулай ҙа, ошо минеке, тип әйтергә, нишләптер, күңел тартмай. Минең аптырап ҡалғанды күреп торған апай ҡыҙыл шампунды ҡулына ала.

- Күрәнме, бер ал... (алйотоғоҙ, тип саҡ әйтмәне, шикелле) аҡыллы башығыҙ ҡатынының шампунын тотоп килгән!

Мин күҙҙәрҙе селт-селт йомоп алам. Ә тап уның ҡатындарский икәнен ҡайҙан белде икән был апай?! Миңә ҡарап, апай ауыр уфтанып ҡуя.

- Уф, ошоларҙы.... Һеҙ аңыштырҙы... (артығыраҡ әйткәнен аңлап, ауыҙына усы менән һуғып-һуғып ала) үлтерә һуҡһаң да үс ҡанмаç. Исмаһам, һүрәтенә ҡарар инен.

Ысынлап та, ҡыҙыл төҫтәгеһенә бер апай һүрәте төшөрөлгән ине. Ә мин, алйот, тап шуны алырға тип уҡталып тора инем. Оятҡа ҡалына ине. Ярай әле Хоҙай араланы был бәләнән. Бындай ҡыуаныслы уйҙарҙан апайҙың һүҙе айнытып ебәрә.

- Йә, хәҙер әйт, ҡайһы шампунь һинеке?

Хәҙер тәҙрә төбөндә ике шампунь ултыра. Ҡайһыһы икән минеке? Мин күҙ йомоп, уң яҡта ултырғанын алам. Шулай ҙа апай әйтеп ҡуя.

- Смәтри, малай, кеше шампунын тотоп ҡайтып китһәң...

Әммә ҡулға алған нәмәне кире биреп тороп булмай ҙа инде.

- Минең шампунь ошо!

Апай ҡулын һелтәп, көрһөнөп ҡуя. Шунан миңә ошолай өндәшә.

- Ҡайһы шампунь һинеке икәнен әйтәм, әгәр...

Үҙем дә һиҫмәҫтән, ҡулымдағы шампунға ҡарап ҡуям. Әллә минеке түгел микән?! Шул арала апай әйтә башлаған һүҙен тамамлап ҡуя.

- Әгәр минең бер генә һорауға дөрөҫ яуап бирһәң...

Ниндәй һорау икән? Дөрөҫ яуап бирә алырмын микән? Әммә мах биреп тороп булмай. Шуға мин эре генә сит телдә генә яуап бирәм.

- Ноу проблем!

Апай көләмһерәп яуап бирә.

- Ферштейн!

Ҡара әле, мин генә түгел, ә был апай ҙа сит телдә апаруҡ һупалай икән. Һиҙгәнһегеҙҙер, ферштейн тигәне беҙҙең телдә, килештек, була. Шул арала бүлмәнең төп яғына үтәбеҙ. Ҡара әле, апаруҡ нәмә тороп ҡала икән беҙҙән һуң. Кемдер таҫтамалын, кемдер футболкаһын, кемдер тағы әллә нәмәһен онотҡан. Шул арала апай ҡулына нәскей ала.

- Минең һорау ошолай - нисек һыңар нәскейҙе онотоп була?

Мин үҙем дә һиҙмәҫтән, салбар балаҡтарын бер аҙ өҫкә тарта биреп, нәскейҙәргә күҙ һалам. Шунан еңел һулап ҡуям. Аллаға шөкөр, кейгәнмен икән нәскейҙәрҙе. Шул арала апай һүҙен дауам итә.

- Шуныһы аптырамалы, нишләптер нәскейҙең һыңары ғына ятып ҡала. Уны нисек онотоп була икән? Үлтер, ә бына шуға баш етмәй.

Минең уйланып ҡалғанды күреп, апай һүҙен дауам итә.

- Ярай, бер нәскейҙе аяғына кейҙең, ә икенсеһен кеймәнең икән, тей. Шул килеш ишек төбөнә барып еттең икән, тей. Ботинкаларыңды кейә башланың икән, тей. Бына шул мәлдә икенсе аяҡта нәскей юҡ икәнен нисек күрмәҫкә була?..

Башты тырнап алғандан һуң, мин ҡыуаныстан ошолай яуап бирәм.

- Ә ул алмаш нәскей алып килгән. Һәм...

Шул мәл апай ихлас көлөп ебәрә.

- Өс нәскейен онотҡан! Буш нәмә һөйләп, кеше көлдөрмә әле.

Нисек дөрөҫ яуап табырға? Баш уйлай, әммә төплө яуап таба алмай. Ә шулай ҙа мин яуапһыҙ сығып китмәнем.

- Бының өсөн оҙайлы күнекмәләр кәрәк. Бары шунда ғына һөҙөмтә...

Әммә апай миңә һөйләп бөтөргә ирек бирмәй. Ул мине итәғәтле генә этеләп-төртҡөләп тигәндәй бүлмәнән сығарып ебәрә.

Әле бына шампунь тотоп, өйгә ҡайтып барам. Шуныһы бер аҙ күңелдә ҡыра. Мин тәүҙә уны яңылыш алғанмын икән. Минеке тип ҡулыма алғаны, шайтан алғыры, гель для душа тигән нәмәкәй булған икән. Уныһын ҡулымдан апай һыпыра тартып алды. Шунан минең шампунды тоттороп ҡуйҙы. Ә шулай ҙа апайҙың теге һорауы баштан сыҡмай. Ысынлап та, һыңар нәскейҙе нисек онотоп була икән? Бәлки, дөрөҫ яуапты гәзит уҡыусылар араһынан кемдер белелер.

**Был хәбәр һөйләүсене**
**Әғләм ШӘРИПОВ тыңлап торҙо.**

*✓ Икенсе балаларынан һуң һауығып та өлгөрмәгән көйө туҡмалғас, әсәһенә ҡайтып китә Вәсилә. Әммә Рәзифтең ҡулы ҡаты булһа ла, теле татлы була шул, айырылышырға тигән ҡарарға килһә лә, Вәсилә уның һүҙҙәренә ышана.*



ИНТЕРНЕТТАН



# УЙЫНСЫҒЫҢ НИНДӘЙ?

■ Ҡытайҙа етештерелгән уйынсыҡтарҙың 90 проценты - сәләмәтлек өсөн зарарлы. Уларҙың йә хәүефһеҙлеген билдәләүсе документтары юҡ, йә санитар-химик, токсикологик күрһәткестәре тап килмәй, йә маркировкаһы дөрөҫ түгел. Шулай уҡ "дөрөҫ булмаған" уйынсыҡтарҙың тауышы ла ҡолаҡты ярып алып бара, ти белгестәр. Магазин кәштәләрендә составында фенолформальдегид кеүек ағыулы матдә табылған уйынсыҡтар ҙа осрай. Бындай уйынсыҡтар балаларҙың тын юлына насар тәьҫир итә, аллергия тыуҙыра.

■ Сағыу төштәрҙе йыш күрәһегеҙме? Тимәк, һеҙҙең интеллект кимәлегеҙ бик юғары. Америка ғалимдары фекеренсә, төҫлө төштәр күрергә һәм уларҙы иҫтә ҡалдырырға интеллектары юғары булған кешеләр генә һәләтле. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә ике меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Уларҙың ҡайһы берҙәре йоҡлаған саҡта төш күрһәләр ҙә, уянғас уны иҫләмәүҙәре тураһында белдергән. Тикшереүҙә ҡатнашыусыларҙың бер өлөшө бөтөнләй төш күрмәүҙәрен әйткән. Тик аҙҙар ғына даими рәүештә төш күргән һәм уларҙы деталләп һөйләй алған. Был һынауҙар үткәс, тикшеренеүселәр уларҙың интеллектуаль һәләттәрен тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән дә инде.

■ Канада тикшеренеүселәре белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күңелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һүрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотонор алдынан эксперттар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

■ Ғалимдар әйтеүенсә, эш ваҡытында килеп тыуған көсөргәнештән эш өҫтәле янынан китмәй генә ҡотолорға була. Бының өсөн улар өс ысул тәҡдим итә. Беренсеһе - өҫтәл тартмаһына фисташка, кешью, миндаль һәм грек сәтләүегe һалып ҡуйығыҙ. Был сәтләүектәр стресты еңеләйтеү көсөнә эйә. Уларҙың составындағы витаминдар, аминокислоталар һәм антиоксиданттар стресс гормоны кортизол тәьҫирен баҫып, бәхет гормоны - серотонин бүленеп сығырға ярҙам итә. Икенсе ысул - акупунктур массаж. Белгестәр нервыларҙы тынысландырыу өсөн ҡолаҡ япраҡтарына массаж яһарға тәҡдим итә. Массаж мәлендә ҡолаҡта урынлашҡан биологик әүҙем нөктәләргә яһалған баҫым организмдағы бөтөн процестарҙы яйға һала, эске ағзалар эшмәкәрлеге яҡшыра, кәйеф күтәрелә. Бер сынаяҡ ҡара сәй ҙә нервыларҙы тәртипкә килтерергә булышлыҡ итер. Был эсемлектә файҙалы матдәләр һәм антиоксиданттар бик күп. Шуға ла сәй эсеүгә өс-дүрт минут ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ.

■ Бөгөн киң танылыу алған 3D-сеанстарға барыһы ла йөрөй алмай, сөнки фильм ҡараған ваҡытта уларҙың башы әйләнә. Белгестәр был сирҙе кибер ауырыу тип атай. Баҡтиһәң, кинотеатрҙарҙа бирелгән күҙлектәрҙең линзаһы менән күҙ хәрәкәттәре тура килмәй. Йәғни экрандағы объект кешегә ҡарай хәрәкәт иткән саҡта күҙ алмалары мөйөшө үҙгәрә, ә линзалар - юҡ. Шуға ла кеше экранға ни тиклем яҡыныраҡ ултыра, шул тиклем тиҙерәк ул үҙен насарыраҡ тоя башлауы ихтимал. Япония тикшеренеүселәре әйтеүенсә, ауырлы ҡатындарға, ололарға, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусыларға бындай сеанстар бөтөнләй тыйыла.

ӘЙ, ЯҘМЫШ!

# НИҢӘ ТУҠМАЛЫП ЙӘШӘЙҺЕҢ?



**Район ауылдарының береһендә ауыл хакимиәте вәкиле, айыҡ тормош өсөн етди эш алып барылыуға ҡарамаҫтан, ауыл халҡының һаман эскелектән арына алмауына зарланып: "Шуның арҡаһында күпме ғаилә емерелә, балалар етем ҡала, енәйәт ҡылына. Саҡматаштай ир-егет, донъя биҙәге булырҙай ҡатын-ҡыҙ меҫкенлеккә төшә. Бынау Вәсиләме һуң инде шулайтып йөрөрҙәй кеше..." - тине.**

Вәсилә - биш балалы ҡатын. Эскелек арҡаһында яҙыҡ юлға баҫып, төрмәлә лә ултырып сыҡҡан. Ауылдаштары хәтерләүенсә, килен булып төшкәндә ҡурсаҡ кеүек булған ул. Ә нимә этәргән һуң уны боҙоҡ юлға баҫырға? Башҡаларға ғибрәт булмаҫмы тип, эскесе тигән даны сыҡҡан күп балалы ҡатындың йортона ыңғайланым.

Төбәп килгән йорттоң ҡоймаһы тәпәш кенә. Баҡса ла, ихата ла ус ааһындай күренеп тора. Баҡсаның буйынан-буйына матур итеп кер йыуып эленгән, йәш бала кейемдәре лә күренә. Түтәлдәрҙең тәрбиәле, ихатаның бөхтәлеге йорт хужаларының уңғанлығы тураһында һөйләй. Яңылыш килдем, ахыры, тип уйлап та өлгөрмәнем, ихатала башына аҡ яулыҡ ябынған ҡатын күренде. Ҡайҙан, ниндәй маҡсат менән килеүемде әйткәс, уның йөҙөндә ризаһыҙлыҡ сырайы сағылды. Шулай ҙа ҡапҡаны асып, мине ихатаға үткәрҙе. Бармаҡтары бер туҡтауһыҙ ҡалтырауы, ирен ситтәре тартышып ҡуйыуы һис тә "бахмур"ҙан булыуынан түгел, ә уның үткәндәргә ҡайтырға теләмәүенән тип аңланым. Буяуы күптән ҡояшҡа, ямғырға уңған, әммә таҙа итеп йыуылған тупһаға ултырҙы ла хәтер йомғағын һүтә башланы.

...Вәсилә Рәзифкә 16 йәштә генә кейәүгә сыға. Төҫкә матур, эшкә тилбер, һүҙгә оҫта егетте ысын күңелдән ярата. Иртәнән кискә тиклем урман эшендә йөрөгән ирен һағынып көтөп ала. Иркә ҡатындың ире эштән иртә ҡайта тигәндәй, Рәзифе лә эштән ашҡынып ҡайта. Тик уның һәр ваҡыт өйгә атлығып тороуының сәбәбе икенселә була: йәш ҡатынын тәүҙә сабыйынан, шунан күршеләренән, тора-бара туғандарынан, хатта үҙ атаһынан көнләшеүенән.

Икенсе балаларынан һуң һауығып та өлгөрмәгән көйө туҡмалғас, әсәһенә ҡайтып китә Вәсилә. Әммә Рәзифтең ҡулы ҡаты булһа ла, теле татлы була шул, айырылышырға тигән ныҡлы ҡарарға килһә лә, Вәсилә уның һүҙҙәренә ышана. Әсәһе лә, абынмаҫ - аяҡ, ярылмаҫ тояҡ булмаҫ, төҙәлер, тигәс, кире ҡайтырға ҡарар итә.

Тик өмөтө аҡланмай. Ире көнләшеүенән туҡтамай. Шул сәбәпле эшкә лә сығармай, үҙе өйҙә юҡ саҡта ҡатыны берәйһе менән осрашыр тип, иртә ҡайта, хатта эшкә бармай, һарай башында йәшенеп, "көндәшен" һағалап ятҡан саҡтары ла йыш була. Береһен дә тотмаһа ла, ҡатынын гел шулай нахаҡҡа рәнйетә, айныҡ килеш тә кеше ҡарағыһыҙ итеп туҡмап һалып ҡуя. Кеше күҙенә күренергә оялып, һыу алырға ла сыҡмаған ғәрсел ҡатынына бите күгәргән, танауы һынған, ирене шешкән ваҡытта ғына бер кем менән дә йөрөмәүенә ышана. Шул мәлдә ул Вәсиләгә айырым иғтибар, наҙ күрһәтә, ярата, иркәләй, балаларын тәрбиәләргә ярҙам итә, йорттағы бөтә эште йүгереп йөрөп үҙе эшләй. Тик Вәсиләһе уныҡы ғына булһын. Һыу эскеһеҙ булып һыҙланған ҡатынына йыш ҡына еңел булыр тип, араҡы ҡойоп бирә. Йәш ҡатын шулай эскегә өйрәнә. Был ваҡытта ғаиләлә биш бала була.

Күпме бау, бысаҡ, балта аҫтында ҡалһа ла, Вәсилә Рәзифкә яза биреү тураһында уйламай. Ул ғына ла түгел, хатта туғандарына, күршеләренә лә был хаҡта зарланмай. Ҡарынындағы һигеҙ айлыҡ баланы тибеп үлтергәндә лә, йығылдым, тип алдаша. Йөрәк тәңгәленә өс тапҡыр сәнселеп, үлем хәлендә дауаханаға эләккәс кенә бөтәһен дә һөйләп бирә. Янъялсы дүрт йылға иркенән мәхрүм ителә. Балаларының ауыҙынан өҙөп, иренә күстәнәс ташыйым тип, төрмә юлын күпме тапауын үҙе генә белә. Шул уҡ ваҡытта балаларын да ҡарай, йорт-ҡураһын да тәртиптә тота, колхозда ла эшләй - бөтәһенә лә өлгөрә. Тик зарарлы ғәҙәте - эскелектән генә арына алмай. Иҫереклеге менән урлашып, бер йыл төрмәлә лә ултырып сыға. Был ваҡытта балалары үҙ-үҙен ҡарар хәлдә була инде.

Рәзифтең ҡайтыр ваҡыты етә. Ултыртҡаны өсөн Вәсиләнән нисек үс алырға белмәгән ир төрмәнән үҙ өйөнә ҡайтмай, икенсе ҡатынға өйҙәш булып инә. Тик бының менән генә Вәсиләнең ҡара көндәре бөтмәй әле, Рәзиф ҡайҙа ғына барһа ла уны эҙәрлекләй, күҙәтә, туҡмай, ғәфү үтенә. Йөҙ түгел, мең тапҡыр ғәфү итә уны ҡатын. Ни өсөн шулай эшләгәнен үҙе лә аңламай Вәсилә.

Һылыулығын әле лә юғалтмаған был ҡатындың йөҙөндә, муйынында, ҡулында яра эҙҙәре күренә. Былары, әлбиттә, күҙгә күренгәне, ә күренмәгәне? Күңел яраһы күпме? Күпме күҙ йәше, ҡан түгелгән?

Яҙ көнө ҡаты ауырып, Вәсилә дауаханаға ята, уға ҡатмарлы операция тәғәйенләнә. Йәй - ҡыҙыу эш осоро булғас, операцияны көҙгә ҡалдырыуҙарын үтенә.

- Быйыл яҙ, ниһайәт, Рәзиф менән айырылыштым, - был һүҙҙәрҙе әйткәндә тәү тапҡыр уның йөҙөндә йылмайыу саҡҡыһы күренде. - Балаларға ваҡытында, бәлки, улар теләгәнсә ярҙам итә, терәк була алмағанмындыр. Хәҙер ошо һаулыҡта уларҙың балаларын ҡарашырға насип итһен ине. Ситтән ҡараһаң, был, моғайын, боронғоларҙың "Һыуҙың тәме шишмә ҡороғас беленер" тигән һымаҡтыр. Шулай ҙа мин ҡалған ғүмеремде башҡасараҡ йәшәргә уйланым...

- Юҡ, Вәсилә апай, шишмәң ҡоромаған әле һинең. Ул ҡороһа, баҡсаңдағы сәскәләрең күптән һулыр ине, - тим.

- Көнләшеү - ул ауырыу, күңел сире. Уны дауалап булмай. Бер кем дә ул сиргә юлыҡмаһын һәм бер кемгә лә башҡа уның ҡорбаны булырға яҙмаһын ине, - тине ҡатын хушлашҡанда...

**Әйткәндәй, халыҡ араһында иренән айырылған ҡатынды ғәйепләп ҡараусылар ҙа осрай. Айырылған ҡатын, тигән данды күтәрмәйем, балаларҙы атайһыҙ итмәйем, тип, ошо Вәсилә һымаҡ яҙмышты үҙ иткәндәр тураһында ни әйтмәк кәрәк? Дөрөҫмө был? Бер тапҡыр ғына бирелгән ғүмерҙе шулай ҡорбан итергә тейешме кеше? Ә бындай ғаиләлә үҫкән балалар ниндәй тәрбиә ала? Шул уҡ ваҡытта беҙҙең депутаттар әллә нисәмә йылдар, әллә нисәмә тапҡыр "Ғаиләлә көс ҡулланыу тураһында" ғы законды ҡарауға сығарып та, уны ҡабул итеүгә өлгәшә алмай...**

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

***✓ Йоҡоһоҙлоҡ - шулай уҡ сир түгел, ә мейе эшмәкәрлегенең ритмы көйләнеүе, йоҡо "тәҙәлешә"нең үҙгәреүе, шуға күрә уйлап-нитеп тормаҫтан, дарыу эсергә кәрәкмәй.***



СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ҠАРТЛЫҠ - СИР ТҮГЕЛ!

**"Күпселек сир - ул ауырыу түгел, ә ҡартлыҡтың тәбиғи сағылышы", ти Пекиндағы бер дауахана директоры һәм өлкән йәштәгеләргә бер нисә кәңәш бирә.**

- Һеҙ ауырымайһығыҙ, ә ҡартаяһығыҙ. Ҡайһы бер хәл торошоғоҙҙо сир тип иҫәпләп, яңылышаһығыҙ. Был сир түгел. Ә организмдың ҡартайыуы тураһында сигнал. Насар хәтерегеҙ ҙә Альцгеймер түгел, ә ҡартайыуса мейегеҙҙең үҙ-үҙен һаҡлау механизмы. Әгәр ҙә һеҙ аҫҡысығыҙҙы ҡайҙа һалғанығыҙҙы онотаһығыҙ, ләкин аҙаҡ үҙегеҙ үк уны табып алаһығыҙ икән - был деменция түгел. Әкрен ҡыбырлап йөрөү, аяҡ быуындарығыҙҙың бөлтерәүе фалиж түгел, ә мускулдар туҡымаһының тарҡалыуы. Унан ҡотолоу юлы - дарыу эсеүҙә түгел, ә хәрәкәтләнеүҙә.

Йоҡоһоҙлоҡ - шулай уҡ сир түгел, ә мейе эшмәкәрлегенең ритмы көйләнеүе, йоҡо "тәҙәлешә"нең үҙгәреүе, шуға күрә уйлап-нитеп тормаҫтан, дарыу эсергә кәрәкмәй. Йоҡо дарыуҙарын һәм башҡа препараттарҙы оҙаҡ ҡулланыу йығылыу хәүефен көсәйтә һәм аралашыу-фекерләү һәләтенең боҙолоуына килтерә. Иң һәйбәт "йоҡо дарыуы" - ул көн дауамында күберәк ҡояш һәм режимдың даимилығы. Тән һыҙлауы шулай уҡ ревматизм түгел, ә нервылар системаһы ҡартайыуының этнәкәһе.

Өлкән йәштәге күп кешеләрҙән: "Ҡайһы ерем генә ауыртмай - ҡулдар, аяҡтар..." - тип зарланыуын ишетергә тура килә, ләкин был ревматизм да, гипертаратез да түгел. Һөйәктәр, әлбиттә, муртлана һәм йоҡара төшә, тик "ауыртыу тойғоһо" 99 проценты менән сир түгел, ә нервы импульстары үткәргесенең әкренәйеүе. Был өлкәндәрҙең физиологик үҙгәрештәрендә була торған "үҙәк сенситизация" тип атала. Был торошто ла дарыуҙар менән түгел, ә күнегеүҙәр ярҙамында дауалап була.



Холестерин. Өлкәндәрҙә холестерин кимәле, гәҙәттә, бер аҙ юғарыраҡ була. Ә инде ул бик түбәнәйеп китһә, был иммунитетты көсһөҙләндерә. Ҡарттар йәшенә яраҡлы ҡан баҫымы кимәле 150/90, ә йәштәрҙә ул 140/90 самаһы.

Өлкәндәр һәм уларҙың балаларына бер нисә һүҙем бар. Беренсенән, шуны хәтерҙә тотоу кәрәк: тормошобоҙҙағы бөтөн яйһыҙлыҡтар ҙа сир түгел. Икенсенән, өлкәндәрҙең күбеһе "ҡурҡыуҙан" ҡурҡа. Анализдар һөҙөмтәһенән йәки сирҙәр хаҡында һөйләүсе ролик-рекламаларҙан ҡурҡырға кәрәкмәй. Өсөнсөнән, быныһын балалар өсөн әйтеүем: атай-әсәйҙәрегеҙҙе дауаханаға ғына түгел, ә һауа һуларға, ҡыҙыныурға сыҡҡанда ла алып йөрөгөҙ, эрғәләрендә йышыраҡ булығыҙ, һөйләшегеҙ, уларға яҡынайығыҙ. Ҡартайыу - дошман түгел, ә бына торғонлоҡ - дошман! Сәләмәт булығыҙ!

Бразилия онкологы әйткән: урта йәштәр 50-лә башланып, 70-тә тамамлана, ҡартлыҡ - 80-дән 90-ға тиклем, оҙон ғүмерлелек - 90-дан үлгәнсегә тиклем. Өлкән йәштәгеләрҙең төп проблемаһы - яңғыҙлыҡ. Ирле-ҡатынлылар, ғәҙәттә, икеһе бер юлы китмәй, кемеһелер тәүҙә китә. Тороп ҡалған кеше ғаиләгә йөк була. Шуның өсөн дуҫтар менән бәйләнештә булыу мөһим, күберәк аралашырға кәрәк һәм балаларығыҙ, ейәндәрегеҙ өсөн ауырлыҡ һалырға тырышмағыҙ, гәрсә улар был хаҡта туранан-тура әйтмәһәләр ҙә. Минең кәңәшем - үҙ ғүмерегеҙгә контролде юғалтмағыҙ. Был, тимәк, ҡасан һәм кем менән йөрөргә сығырға, нимә ашарға, нимә кейергә, кемгә шылтыратырға, ҡасан йоҡларға ятырға, нимә уҡырға, ни менән шөғөлләнергә, нимәләр һатып алырға, ҡайҙа йәшәргә һәм башҡа шундай мәсьәләләрҙе үҙаллы хәл итеүегеҙ.

Уильям Шекспир әйткән: "Мин һәр ваҡытта ла бәхетлемен! Ә беләһегеҙме, ни өсөн? Сөнки мин берәүҙән дә бер нәмә лә көтмәйем". Көтөү - ул һәр ваҡыт яза. Проблемалар мәңгелек түгел. Улар ҡасан да булһа хәл ителә. Беҙ проблемаларыбыҙҙа үҙебеҙҙе гәйепләүсәнбеҙ. Дарыуы булмаған берҙән-бер проблема - ул үлем. Нимәгәләр фекер-ҡарашығыҙҙы белдерер алдынан тәрән итеп һулағыҙ. Һөйләрҙән алда - тыңлағыҙ. Тәнҡитләрҙән алда - үҙегеҙгә күҙ һалығыҙ. Яҙырҙан алда - уйлағыҙ. Һөжүм итерҙән алда ... бирелегеҙ. Үлем алдынан... ҡулығыҙҙан килгәнсә матур тормош менән йәшәгеҙ! Яҡшы мөнәсәбәттәр идеаль кеше менән түгел, ә ҡыҙыҡлы һәм матур тормош ҡора белгәндәр менән булырға тейеш. Башҡаларҙың етешһеҙлектәренә иғтибар итегеҙ, ләкин улар менән һоҡланығыҙ, уларҙың яҡшы яҡтарын да күрегеҙ һәм бының өсөн маҡтағыҙ. Бәхетле булыр өсөн кемделер бәхетле итеү кәрәк. Кемдәндер ниҙер алырға теләһәгеҙ, тәүҙә үҙегеҙ бирегеҙ. Үҙегеҙҙе һәйбәт, ихлас һәм ҡыҙыҡлы кешеләр менән уратып алығыҙ һәм уларҙың береһе булығыҙ. Ауыр ваҡыттарҙа ла хатта тороп баҫығыҙ һәм йылмайып: "Бөтәһе лә һәйбәт, сөнки беҙ - эволюция процесы емештәре",- тип әйтегеҙ.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡала ҡарлуғаһы**

**(Городская ласточка)**



Арҡа өлөшө күгелйем ҡара, ҡойроғоноң өҫтө һәм ҡорһағы ап-аҡ. Алыҫтан уҡ танытып торған сағыу билдәһе лә уның "биле"нең сағыу аҡ булыуы. Тәпәйҙәре тырнаҡтарына тиклем йөн менән ҡапланған. Миҙгелгә ярашлы ҡиәфәтен үҙгәртмәй. Ата ҡош менән инә ҡош айырылмай. Йәш ҡоштарҙың арҡаһы ололарҙыҡы кеүек күк түгел, ә һоро, түштәре һәм ҡабырғалары аҡ түгел, ә ҡыҙғылт таптар менән ҡапланған. Йәйелгән килеш ҡанатының киңлеге 29-33 см.

Уны яғымлы ғына итеп "тирч" йәки "трик-трик" тип саҡырыуынан танырға була. Ғөмүмән, ҡала ҡаплуғасы сутылдамай, йыры ла ошо тауыштарҙан тора.

Тотош Евразияла тиерлек осрай. Башҡортостанда - ҡарлуғастар араһында иң һирәк осрай торған төр. Ул таулы райондарҙа ла, Урал арьяғында ла юҡ, ғалимдар Өфө һәм Бәләбәйҙә генә теркәгән.

Яҙын осоп ҡайтҡан мәле бик һуҙылып китә, саҡ йәшеллек күренә башлағас ҡайта башлай һәм был мәл майға тиклем дауам итә. Тик ҡаяларҙа ғына оя ҡороп йәшәгән ҡош яйлап таш йорттарға күсә һәм әлеге мәлдә бейек ҡала йорттарын үҙ итә.

Колониялар менән йәшәй, унда тиҫтәнән алып йөҙгәсә оя булыуы ихтимал. Еүеш батҡаҡ, балсыҡтан йомро итеп кәрниз аҫтына оя яһай.1967 йылда ғалим М. Баянов Өфөлә Цюрупа менән Октябрь революцияһы урамы киҫелешендәге йорттоң һәр орнаменты - таш сәскә - 6-8 оя менән уратып алынғанын күҙәтә.

Башлыса иҫке ояларҙы үҙләштерәләр. Башта ата ҡош оя таба һәм унда инә ҡошто алып ҡайта, йәки үҙе генә ояны йүнәтә башлай. Әгәр ҙә осоп ҡайтышлай уҡ парлашҡан булһалар, оя йүнләү мәшәкәтен икәүләп башҡаралар. Ояның төбөнә киптән үлән, мүк, мамыҡ йәйелә. 4-5 йомортҡа һала, икәүләп 15 көн тирәһе баҫалар. Бәпкәләр енелсә генә йөн менән ҡапланған, ауыҙҙары - һап-һары. Оло ҡоштар уларҙы 19-26 көн ҡарай. Аҙаҡтан да йәш ҡоштар ашау өсөн ояларына ҡайтып йөрөй.

Һауала осоп барған килеш ваҡ бөжәктәрҙе тота. Көн насар булғанда ояһында ултыра. Әгәр ҙә бөжәк осмай торған ямғырлы көндәр һуҙылып китһә, ҡала ҡарлуғастарының күбеһе һәләк була.

Йылы яҡҡа төркөмләп, көндөҙ осалар. Африка һәм Азияла ҡышлай. Йыл һайын үҙенең былтырғы ояһына ҡайта.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# САЛАУАТ ӘЙТЕҮ

Салауат ул - яратҡан Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһис-сәләмде маҡтап, Уға Аллаһтың рәхмәтен теләү.

Фәрештәләр ҙә, Аллаһ Тәғәлә Үҙе лә Бәйғәмбәребеҙҙе маҡтай. Барлыҡ мосолмандар һәр намаҙҙа салауат әйтә. Доғаларыбыҙ ҡабул булһын тиһәк, уны ҡалдырмайыҡ. Әгәр ҙә доға ҡылғас, Бәйғәмбәребеҙгә салауат уҡымаһаҡ, ул ер менән күк араһында ҡала. Шуға доғаларҙы салауат менән башларға һәм тамамларға кәңәш ителә.

Салауат әйтеүҙең файҙаһы һәм сауабы ҙур. Ул - илаһи хазиналарға, Аллаһ бәрәкәтенә асҡыс, көнделе тынысландырыусы, ике тормош мәшәкәтенән, һағыштан арындырыусы.

Ислам динен тотоусылар, ниндәй генә хәлдә булһа ла, бөтә ерҙә салауат уҡып йөрөргә тейеш. Был - мосолман әҙәбе, бурысы, шулай уҡ Аллаһ Тәғәләгә яҡынайыу юлы ла.

Хәҙистәрҙән билдәле булыуынса, әгәр беҙ бер тапҡыр салауат әйтһәк, Аллаһ Тәғәлә беҙгә ун бәрәкәт яҙа (Әбү Һурайра бәйән итеүенсә, Сахих Мөслим хәҙистәр йыйынтығынан). Салауатты ҡабатлаған һайын кешенең Раббыбыҙ алдында дәрәжәһе арта.

Кемдәр был доньялыҡта күп тапҡыр салауат әйтә, Яуап көнөндә улар Бәйғәмбәр Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһиссәләмгә яҡын торасаҡ. Салауатты күп тапҡыр әйтеүсенең Яуап көнөндә йөҙө, айҙай яҡты булып, нурланып торор. Ул кешене Раббыбыҙ барлыҡ мохтажлығынан ҡотҡарыр.

Миҫал өсөн бер салауатты килтерәбеҙ: "Аллаһүммә салли ғәлә сәййидинә Мөхәммәдин үә ғәлә әлиһи үә әсхаабиһи әджмәғин" (тәржемәһе: "Йә Аллаһ! Әфәндебеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһис-сәләмгә, әһеленә үә сәхәбәләренә, өммәтенә рәхмәттәреңдең иң өҫтөнлөгө менән рәхмәт әйлә!").

# ВАФАТ БУЛҒАН АТАЙ-ӘСӘЙГӘ ЛӘ ИЗГЕЛЕК ҠЫЛ!

Бәйғәмбәребеҙ янына бер кеше килә һәм: "Атай-әсәйемә уларҙың вафатынан һуң изгелектәр ҡыла аламмы?" - тип һорай. Бәйғәмбәр уға: "Эйе, улар өсөн доға ҡылыу, истиғфар биреү, уларға биргән вәғәҙәләренде үтәү, улар аша туған булған кешеләр менән араны һаҡлау һәм уларҙың дуҫтарына ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү", - тип яуап ҡайтарған (Әбү Даут риүәйәте).

Бәйғәмбәребеҙ, Хәҙисәһе вафат булғандан һуң, һарыҡ һуйылһа, иң тәмле өлөштәрен уның туғандарына бирҙергән. Ул: "Әсәйҙең ҡыҙ туғаны - әсәй урынында булыр", - тигән (Бохари).

Әгәр кешенең атай-әсәйе иҫән булмаһа, уларҙың яҡын туғандарына изгелек ҡылһын. Был ғәмәл үҙ атай-әсәйен һөйөндөргән кеүек булыр.

Ғабдуллаһ ибн Ғөмәр һөйләүенсә, бер ваҡыт Бәйғәмбәр янына бер кеше килгән һәм: "Аллаһтың илсеһе, мин оло гонаһ эшләнем, миңә тәүбә бармы?" - тип һораған. Алдан күрә белеүсе унан: "Әсәйең бармы?" - тип белешкән. Ул: "Юҡ", - тигән. Бәйғәмбәр: "Әсәйеңдең ҡыҙ туғаны иҫәнме?" - тип һораған. "Эйе", - тигән. Бәйғәмбәр: "Уға изгелек ҡыл", - тигән кәңәш биргән (Әхмәт, Тирмизи риүәйәттәре).

✔ *Ғаилә бәхетенә һуҡыр ҡатын менән һаңғырау ир генә өлгәшә ала, тип әйткән кеше бик аҡыллы булғандыр.*

*(М. Монтень).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ТӘҮГЕ ОПЕРАЛАРҘЫ УЛАР ЯҘҘЫ




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**41-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Амбар. Әхтәмов. Мортазин. Ғәлиәм. ТСТ. Ылаҡ.Нарком. Ошве. Перельман. Айыт. Норд. Шрек. Имашев. Абрам. Әйлән. Ағас. Рота. Иҫәп. Аҙау.

**Вертикаль буйынса:** Турпыша. Метеорҙар. Дуҫлашма. Әхәт. Ғайсин. Алыу. Мэтьюз. Кәсер. Онн. Олпа. Ныҡыш. Лифт. Риони. Арпа. Ғәйнетдинов. Алаша. Ирек. Мәхмүтов.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# ЯНҒЫН!

● **"Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы пансионатында 27 октябрҙә янғын сыға. Был турала Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин хәбәр итте.** Бинанан медицина персоналы һәм пансионатта йәшәгән пациенттарҙың туғандары - 63 кеше - эвакуациялана. Улар "Медик" мәҙәниәт йортона урынлаштырыла.18 квадрат метр майҙанға таралған ут тиҙ арала һүндерелә. Бөтәһе 37 кеше һәм 17 берәмек техника йәлеп ителә. Зыян күреүселәр юҡ. Медицина учреждениеһы штатлы эшен дауам итә.

● **Башҡортостандың ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетынан белдереүҙәренсә, быйыл Башҡортостанда 1300 гектарҙан ашыу майҙанда 380 тәбиғәт янғыны сыҡҡан.** Был һандар һуңғы йылдарҙағы уртаса күрһәткестән түбән. Ғәҙәттән тыш хәл 50 район биләмәһендә теркәлгән. Күпселек осраҡ ул Краснокама, Хәйбулла һәм Әбйәлил райондарында булған. Иң ҙур янғын Хәйбулла районында 800 гектар майҙанды ялмап алған.

● **Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Өфөнөң Кооператив яланы бисҭәһендәге Болон тыҡрығындағы ике ҡатлы торлаҡ йорттоң ҡыйығын ут ялмап ала.** Янғын һүндереүселәр 40 квадрат метр майҙанда сыҡҡан янғынды тиҙ арала һүндерә. Зыян күреүселәр юҡ. Урында эшләгән Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының тәфтишсеһе хәл-ваҡиғаның сәбәптәрен асыҡлай.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**31 октябрь "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш, Ф. Ғарипов), музыкаль комедия. 12+

**1 ноябрь "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим, А.Абушахманов), драма. 12+

**3 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев, А. Абушахманов), музыкаль комедия. 12+

**4 ноябрь "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+

**5 ноябрь "Амеля"** (Н.Крашенинников, А.Абушахманов, инсц. А.Балғазина). 12+

**6 ноябрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова, А. Абушахманов), мелодрама. 16+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**31 октябрь "Холодное сердце"** (В. Гауф, , М. Күлбаев), әкиәт. 11:00. 6+

**1 ноябрь "Седина в бороду или невеста из Имеретии..."** (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 12+

**2 ноябрь "Волшебная мельница"** (М.Кәрим). 12:00. 12+

**4 ноябрь "Сказание о семи батырах"** (Д. Юсупов, Р. Хакимов), фэнтези. 12:00. 6+

**4 ноябрь "Аҡһаҡ"** (М. Ғиләзов, Ф. Ғәрипов), драма. 18:00. 12+

**5 ноябрь "Золушка"** (Г. Корнелиссон, М. Күлбаев), әкиәт.11:00. 0+

**5 ноябрь "Униженные"** (З. Биишева, М. Күлбаев), драма. 19:00. 12+

**6 ноябрь "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев, М. Күлбаев), әкиәт. 11:00. 0+

**6 ноябрь "Гарнир по-французски"** (М. Камолетти, А. Шрайнер), комедия. 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**31 октябрь "Руслан и Людмила"** (А.Пушкин). 19:00. 6+

**1 ноябрь "Руслан и Людмила"** (А.Пушкин). 12:00 һәм 15:00. 6+

**1 ноябрь "О чем поет осень?"** (В. Щербакова). 14:00. 0+

**2 ноябрь "Гуси-лебеди".** 12:00 һәм 15:00. 0+

**2 ноябрь "Озеро заколдованного коня"** (Г. Шафиков). 17:00. 12+

**6 ноябрь "Тьма египетская"** (М. Булгаков). 19:00. 16+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**31 октябрь Римма Амангилдинаның** концерты. 12+

**1 ноябрь Олег Киреев һәм джаз-квартет "Мәскәү".** Концерт. 16+

**5 ноябрь XIX Халыҡ-ара "SAUERFEST"** орган фестивале сиктәрендә **Александр Фисейский** концерты (орган / Мәскәү). 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**5 ноябрь "Йәнекәйем, мин өйләнәм"** (С. Юзиев), лирик комедия. 16+

**6 ноябрь "Метранпаж мажаралары"** (А.Вампилов), трагикомедия. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**31 октябрь "Ятка бирер йәрем юҡ"** (В. Красногоров), комедия. 16+

**2 ноябрь "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**24, 25 октябрь "Светофорный детектив"** (А.Кружков), әкиәт. 12:00. 0+

**24 октябрь "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 19:00. 12+

**25 октябрь "Алты ҡыҙға бер кейәү"** (Т. Миңнуллин), драмеди. 16+

**28 - 30 октябрь "Ҡанатлы генерал"** (Х.Ирғәлин, Д. Нурғәлин), драма. 12+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**3 ноябрь Рөстәм Шаһбаловтың** концерты. 6+

**5 ноябрь Ирек Ноғомановтың** концерты. 6+

## БР Милли музейы

**24 октябрь "Археология бөтәһе өсөн дә"** 2025 йылда ялан эштәре һөҙөмтәһе тураһына пресс-конференция. 11:00. 12+

*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# СӘХНӘЛӘ - ТАРПАНДАР!

**Сибай филармонияһы үҙ тамашасыларын әленән-әле өр-яңы һәм үҙенсәлекле концерттар, театрлаштырылған тамашалар, шоу-программалар менән ҡыуандырып тора.**



Әлеге ваҡытта бөтә ижади коллектив яңы миҙгелде асыу тамашаһы өҫтөндә эшләй. Мәҫәлән, "Тарпан" этно-фолк төркөмө 30 октябрь көндө филормония сәхнәһендә үҙенең беренсе концертын тәҡдим итәсәк. Берекмәлә өсөнсө йыл уңышлы эшләп килгән был төркөм башҡорт халыҡ йырҙарын, көйҙәрен һәм йолаларын өйрәнеү, онотолоп барған йәки аҙ билдәле өлгөләрҙе табыу һәм уларҙы хәҙерге заман тыңлаусыһына ҡыҙыҡлы һәм аңлайышлы итеп еткереү йүнәлешендә әүҙем эшләй. Төркөмдөң составына музыкаль етәксе һәм идея ойоштороусыһы Йәғәфәр Нәҙершин, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы, ҡурайсы Раушан Ниязғолов, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, баянист Дим Шәрәфиев, һуҡма инструменттар оҫтаһы Сергей Филиппов, думбырасы Альмира Баймырҙина инә. Быйыл төркөм йәш көстәр менән тулыланды. Ҡурайсы, республика фестивалдәре лауреаттары Буранбай Исҡужин һәм моңло тауышлы йырсы Наҙгөл Ултраҡова колективҡа яңы һулыш бирҙе. Билдәле композитор, йырсы Азат Исҡужин да тарпандарҙың концерттарына йәм өҫтәй.

Төркөм башҡорт мәҙәниәтен төрлө майҙансыҡтарҙа, шул иҫәптән республиканан ситтә лә күрһәтергә өлгөрҙө. Шуның менән улар мәғрифәтселек һәм мәҙәни миссияны ла үтәй, тип әйтергә була. Быға дәлил: артистар Санкт-Петербургта, Мәскәүҙә, Силәбелә, Свердловск һәм Ҡурған өлкәләрендә һабантуйҙарҙа, концерттарҙа сығыш яһап, үҙ тамашасыларын тапты. Мәктәп балалары өсөн әҙерләнгән "Халҡымдың хазинаһы" исемле лекторий менән төркөм республика мәктәптәрендә йәш быуынды халыҡ йырҙары, халыҡ музыка ҡоралдары менән таныштырып, уларға һөйөү тәрбиәләүгә лә үҙ өлөшөн индерә. Ҡыҫҡаһы, рух алырға килегеҙ "Тарпандар" концертына.

**Гөлнара ХӘСӘНОВА.**

# ТАҒЫ БЕР БАЙРАМ

**Башҡортостанда тәүге тапҡыр Милли бейеү көнө билдәләнде. Тейешле указға республика етәксеһе Радий Хәбиров ҡул ҡуйғайны.**

21 октябрь Милли бейеү көнө тип осраҡлы ғына һайланмаған, сөнки был көндө легендар бейеүсе һәм хореограф, РСФСР-ҙың һәм Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәйзи Ғәскәров тыуған. Хәҙер республиканың Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле уның исемен йөрөтә.

"Бейеү теле бөтәһенә лә аңлашыла. Унда матурлыҡ һәм һомғоллоҡ, үткәндәр хаҡында иҫтәлек һәм киләсәккә ынтылыш бар. Ул теләһә ниндәй сиктәрҙе үтеп, дуҫлыҡ һәм тыныслыҡ хаҡына кешеләрҙе берләштерә ала. Ә хәҙер был - иң мөһиме. Башҡортостанда төрлө халыҡ вәкилдәре дуҫ һәм татыу йәшәй. Улар барыһы ла ата-бабаларының бейеү традицияларын һаҡлай һәм үҫтерә. Милли бейеү көнө республиканың мәҙәни мираҫын һаҡлау һәм арттырыу йәһәтенән тағы ла бер мөһим аҙым булыр тип ышанам", - тип яҙҙы Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында.

"Башҡортостан" дәүләт концерт залында тәүге Милли бейеү көнө ҙур концерт менән билдәләнде. Унда башҡорт хореографияһының алтын фондын тарихты һәм халыҡ йолаларын сағылдырған легендар бейеүҙәр күрһәтелде.

# КОЛЛЕДЖ ЮБИЛЕЙЫ...

**Өфөлә 30 октябрҙән 3 ноябргә тиклем VI "Кесе Нуриев" Халыҡ-ара хореография училищелары, колледждары һәм академиялары фестивале үткәрелә.**

Ул Рәсәйҙән, БДБ илдәренән һәм алыҫ сит илдәрҙән 200-ҙән ашыу ҡатнашыусыны йыя. Быйыл сара Рудольф Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжының 40 йыллығына арнала. Легендар бейеүсе исеме уҡыу йортона 1998 йылда бирелә. Фестиваль сиктәрендә А.Я. Ваганов исемендәге Рус балеты Академияһы педагогтарының, Санкт-Петербург балет белгестәренең лекциялары, оҫталыҡ дәрестәре, ижади осрашыуҙар, хореография сәнғәтен үҫтереү мәсьәләләре буйынса түңәрәк ҡорҙар һәм конкурс сығыштар планлаштырылған. Ғәҙәттәгесә, бөтә саралар Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры сәхнәһендә гала-концерт менән тамамланасаҡ. Ҙур сәхнәнән шулай уҡ лауреаттарға дипломдар тапшырыу була.

Фестиваль РФ Президентының Мәҙәни башланғыстар фонды грантына ойошторола. Сара төбәк-ара мәҙәни хеҙмәттәшлекте үҫтереү, тәжрибә уртаҡлашыу, йәш талантларға ярҙам итеү һәм классик бейеү сәнғәтен популярлаштырыу маҡсатын күҙҙә тота.

# КЕЙЕҘ БАҪА БЕЛӘҺЕҢМЕ?

**Өфөлә "Атайсал" мәҙәни үҙәгендә "ЭтноКод: Донъялар үрелеше" инновацион этношоуҙың премьераһы булып үтте.**



Был традицион сәнғәтте һәм заманса технологияларҙы берләштергән инновацион проект Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының халыҡ сәнғәте өлкәһендәге ижади проекттарҙы тормошҡа ашырыу грантына Республика халыҡ ижады үҙәге тарафынан бойомға ашырылды. Этношоу нигеҙенә традицион башҡорт кейеҙ баҫыу тарихына арналған хореографик мини-спектакль һалынған. Төп ҡатнашыусылар - Нәзифә һәм Әнфәр Нурмөхәмәтовтар етәкселегендәге "Аманат" халыҡ бейеүҙәре ансамбле артистары, "Селтәр" халыҡ костюмы студияһы оҫталары. Спектакль тамашасыларға боронғо кейеҙ баҫыу кәсебе аша башҡорттарҙың бай мәҙәниәтен аса. Һабантуй, туй йолалары аша мөхәббәт, батырлыҡ һәм традицияларҙың күсәгилешлеге күрһәтелә. "Коллекцияны Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған халыҡ художество кәсептәре оҫтаһы Фатима Хәйретдинова етәкселегендә "Селтәр" башҡорт костюмы халыҡ студияһы ойошторҙо. Костюмдар кейеҙҙән һәм башҡа тәбиғи материалдарҙан эшләнгән һәм традицион башҡорт костюмының художестволы интерпретацияһы булған. Уларҙы төҙөү быуаттар буйына этнографик тикшеренеүҙәр, халыҡ легендалары менән рухландырылған", - тип билдәләне проект етәксеһе, идея авторы, йырсы һәм композитор Линара Мероним. Проектты тормошҡа ашырыуҙа шулай уҡ рәссам Әлиә Байрамғолова, режиссерҙар Әлмира һәм Ләйсән Сәфәрғоловалар, 3d - mapping режиссеры Камила Нуғаева, хореограф Гүзәл Мамина, композитор Мәғүл Бурмистров, этнограф-тарихсы Гөлнара Яруллина ҡатнашты.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АТЫҢ БАРҘА ЕЛЕП ҠАЛ,

## яҡшыларҙы күреп ҡал!

Ҡайһы ырыу көслө -ханды шул ҡуя, ҡайһы ырыу үсле - ҡанды шул ҡоя.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡсаһы аҙ булып та күңел күтәренкелегендә йәшәгән кеше - бәхетле, аҡсаһы күп булып та йән тыныслығы тапмағандар - бәхетһеҙ.

**(Демокрит).**

Тәбиғәттән бирәү ҙә түбән йә бейек булмай, бары тик хеҙмәте генә кешене түбән йә бейек итә.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

Ахмаҡтың тормошо ҡурҡыу менән тулы, сөнки ул бер эшен дә бөгөн эшләмәй, ә барыһын да иртәгәгә ҡалдыра.

**(Кесе Сенека).**

Ғаилә бәхетенә һуҡыр ҡатын менән һаңғырау ир генә өлгәшә ала, тип әйткән кеше бик аҡыллы булғандыр.

**(М. Монтень).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Суфый-уҡытыусы һәр дәресендә бер риүәйәт һөйләй торған булған, әммә бер ваҡытта ла уларҙың мәғәнәһен аңлатмаған.**

**- Хөрмәтле остазыбыҙ, - тип мөрәжәғәт иткән бер шәкерте, - һин беҙгә матур риүәйәттәр һөйләйһең, әммә уларҙың мәғәнәһен аңлатмайһың...**

**- Ғәфү үтенәм, - тигән Уҡытыусы. - Ғәйебемде аҡлау өсөн мин һине хөрмә емеше менән һыйларға теләйем...**

**Шәкерт шатланып киткән һәм "Рәхмәт, Уҡытыусым" , - тип яуаплаған.**

**- Мин һиңә ашата торған хөрмәнең тышын үҙем таҙартып бирәйем, - тигән Уҡытыусы. Шәкерт быныһына ла шатланыуын белдергән. Уҡытыусының:**

**- Теләйһеңме, ашауға уңайлы булһын өсөн мин хөрмәне ваҡ киҫәктәргә турап бирәм?- тиеүенә, шәкерт:**

**- Мин улай һеҙҙең йомартлыҡтан файҙаланырға теләмәйем, Уҡытыусым, - тип уңайһыҙланыуын белдергән.**

**- Юҡ, мин бит һиңә быны үҙем тәҡдим итәм. Һине шатландырғым килгәндән генә эшләйем быны. Теләйһеңме, мин һиңә ул хөрмәне сәйнәп тә бирәм? - тигән тағы ла Уҡытыусы.**

**- Юҡ, мин һинең быны эшләүеңде теләмәйем! - тип ҡысҡырып ебәргән тамам аптырауға ҡалған шәкерт. Уҡытыусы бер аҙ тын ҡалып торған һәм:**

**- Әгәр ҙә мин һеҙгә һөйләгән һәр бер риүәйәттең мәғәнәһен аңлатһам, емеште бына шулай сәйнәп биреүгә тиң булыр ине, - тигән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.
1 582218 911006 25043

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 30.10.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 30.10.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 31.10.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 2031